ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

29-4
август - сентябрь
(урағай - һарысай)

2025

№34 (1178)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! *Баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл етте: 2026 йылдың 1-се яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы башлана. ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә ярты йылға яҙылыу хаҡы - 1054 һум 50 тин. Күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле "Киске Өфө" гә яҙылырға ашығығыҙ - үкенмәҫһегеҙ.*

Мөхәрририәт.

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Не рули, малай,

йәғни Атай-әсәйҙәр ни ҡарай?

6

Олимпиадала еңеү яула ла…

юғары уҡыу йортона имтиханһыҙ ин!

7

Мәктәп йылдары…

хәтерҙә күңелле булып ҡалһын

8

Был данлы дивизия…

халҡыбыҙ намыҫына һәйкәл дә ул

12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

КӨН ТЕМАҺЫ

БУРЫСТАР БИЛДӘЛӘНДЕ, МАҠСАТТАР ҠУЙЫЛДЫ!

Был аҙнала Бөрөлә мәғариф буйынса республика август кәңәшмәһе үтте. Уның эшендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, РФ Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитет рәйесе Лилиә Ғүмәрова, республиканың ҡала һәм райондары хакимиәттәре башлыҡтары, алдынғы педагогтар һәм мәғариф ветарандары ҡатнашты.

Август кәңәшмәһенең ҡала мәҙәниәт һарайында үткән пленар өлөшөндә Радий Хәбиров сығыш яһаны: "Хөрмәтле уҡытыусылар, лайыҡлы Ватан һаҡсылар тәрбиәләгәнегеҙ өсөн һеҙгә ихтирам белдерәм һәм рәхмәт һүҙҙәрен еткерәм. Бөгөн һеҙ белем биргән уҡыусыларығыҙ, ҡаһарманлыҡ күрһәтеп, алғы һыҙыҡта батырҙарса көрәшә", - тине һәм йәш быуынды әхлаҡи-патриотик тәрбиәләүгә ҙур өлөш индергәндәре өсөн республика педагогтары хеҙмәтенә оло баһа бирҙе.

Радий Хәбиров төбәктә белем биреүҙең бөтә кимәлдәренең дә - мәктәпкәсә белем биреүҙән алып юғары уҡыу йорттарына тиклем - әүҙем үҫешеүен, һуңғы алты йылда Башҡортостанда 33 меңгә яҡын урынға иҫәпләнгән 48 яңы мәктәп һәм 65 балалар баҡсаһы асылыуын, федераль программа буйынса 11 миллиард һумдан ашыу суммаға 181 мәктәп ремонтланыуын билдәләп үтте. Республика Башлығы әйтеүенсә, быйыл федераль программа сиктәрендә 35 мәктәп, 2 балалар баҡсаһы, 3 колледж яңыртылған. Киләһе йылда тағы 41 мәктәп бинаһы тәртипкә килтереләсәк. Быныҡ өсөн 3 миллиард һумдан ашыу аҡса бүленә.

Республикабыҙҙа урта һөнәри белем биреүҙең матди-техник базаһы әүҙем яңыртыла. Быға колледждарҙың "Профессионалитет" проектында ҡатнашыуы булышлыҡ итә. Уның сиктәрендә республикаға 2 миллиард һумдан ашыу федераль субсидия йәлеп ителгән. Колледждарҙы капиталь ремонтлау төбәк программаһы сиктәрендә лә дауам итә. Өс йыл эсендә был маҡсатҡа республика бюджетынан 1,2 миллиард һум аҡса бүленгән, 38 бина ремонтланған.

Юғары белем биреү инфраструктураһын үҫтереү - алда торған тағы бер бурыс, тип белдерҙе Радий Хәбиров. Фән һәм технологиялар, аграр, нефть техник һәм медицина университеттарының "Өҫтөнлөк 2030" стратегик федераль программаға инеүе - киләсәккә етди инвестициялар ул. Вуз-ара студенттар кампусы төҙөлөшө әүҙем бара. Унда алдынғы ҡорамалдар менән йыһазландырылған лабораториялар булған уникаль ғилми кластер формалаша.

Төбәк етәксеһе шулай уҡ педагогик хеҙмәткәрҙәргә адреслы ярҙам сараларын билдәләп үтте. Биш йыл эсендә 525 йәш уҡытыусы 690 мең һумлыҡ грантҡа эйә булған. Ә 2025 йылдың 1 сентябренән ауыл мәктәптәренең 50 директоры ошондай дәртләндереү сараһына хоҡуҡ ала. 2024 йылда тәүге тапҡыр 75 иң яҡшы балалар баҡсаһы педагогы 575 мең һум күләмендә грант алған. Быйыл тағы ла 50 тәрбиәсе ошондай ярҙам сараһына лайыҡ булды.

Яңы уҡыу йылында мәктәптәргә 500 меңдән ашыу уҡыусы, шул иҫәптән 45 мең беренсе класс уҡыусыһы бара. Тәүге тапҡыр парта артына ултырыусыларҙың 1,2 меңдән ашыуы - Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яугирҙарҙың балалары.

Ошоға бәйле Республика Башлығы район-ҡала хакимиәттәре башлыҡтарына мөрәжәғәт итеп: "Уларҙы мәктәпкә әҙерләүҙе шәхсән контролдә тотоуығыҙҙы һәм тантаналы линейкаға оҙатыуҙы ойоштороуҙы һорайым", - тине.

ШАҒИР ҺҮҘЕ

ИҢ ХӨРМӘТЛЕ КЕШЕМ!

Бөйөклөккә дәғүә итмәй һис тә
Ҙур донъяның кескәй кешеһе.
Эшләй бары, күңел биреп эшләй.
Көндө төнгә, айҙы йылға бәйләй.
Хеҙмәтендә - тормош инеше.

Ул барыһын бирә ошо юлға:
Ғәзиз ваҡытын,
Сәләмәтлеген.
Ғаиләһенән өҙөп наҙын бирә,
Ҡабат ҡайтмаҫ күпме яҙын бирә,
Барлыҡ көсөн, дарманын бирә -
Булмышының
Фиҙаҡәрлеге.

Мал да, дан да уға мөһим түгел.
Уға баҡҡан бала күҙҙәре.
Атлай уның фатихаһы менән
Киләсәккә кеше эҙҙәре.

Үҙ асылын асҡан,
Бәхетен тапҡан
Уҡыусылар - ғүмер мәғәнәһе.
Оло хеҙмәтеңдең бөйөк хаҡын
Ниндәй үлсәүҙәрҙә үлсәйһе!

Йөрәктәрҙә рәхмәт тойғолары
Иң ҡәҙерле бөгөн, иң ҡиммәт.
Быуындарҙы бәйләр мөхәббәт ул,
Мәктәп тарихын яҙған хәкиҡәт.

Сал сәстәрең. Ҡаҡса ғына кәүҙәң.
Наҙлы йырҙай хатта исемең.
Уҡытыусым, кескәй донъямдағы
Иң хөрмәтле Оло кешем һин.

Рита ФӘТҠУЛЛИНА.

Яҡынлашып килгән уҡыу йылы менән республика уҡытыусыларын РФ Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова ҡотланы. Үҙенең сығышында ул, Башҡортостан бөтә профилле федераль проекттарҙа әүҙем ҡатнаша, был тармаҡтың конкурентлыҡ һәләтен арттырыуға булышлыҡ итә, тип билдәләп үтте.

12+

✓ ***Быйыл көҙгө акция 20 сентябрҙән 4 октябргә тиклем үтәсәк, сараны уҙғарыуҙың берҙәм көнө итеп 27 сентябрь билдәләнгән. Акция сиктәрендә төбәк буйынса 4 меңдән ашыу эре ағас һәм 40 мең башҡа үсентe ултыртыласаҡ.***

ҠЫҪҠАСА

БАЙРАҠ ЕЛБЕРҘӘҺЕН!

Рәсәйҙә Еңеү Байрағын 9 Майҙан тыш башҡа иҫтәлекле һәм әһәмиәтле тарихи көндәрҙә лә элеү планлаштырыла. Башҡортостан парламенты федераль кимәлдә ошондай башланғыс менән сығыш яһаны. Әгәр Дәүләт Думаһы закон проектын хуплаһа, Хәрби дан көндәре һәм Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғалары уңайынан бөтә тантаналы саралар ваҡытында байраҡтың күсермәләре элергә тейеш. "Әлеге ваҡытта Еңеү көнөндә дәүләт учреждениелары Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың дәүләт флагтары янына байраҡ күсермәләрен элергә бурыслы. Хәҙерге шарттарҙа, тарихты яңынан яҙырға, совет халҡының нацизмды тар-мар итеүҙәге мөһим ролен кәмһетеп күрһәтергә тырышҡанда, беҙҙең гражданлыҡ һәм әхлаҡи бурысыбыҙ - был фальсификацияларға ҡәтғи яуап ҡайтарыу. Еңеүҙең төп символын ҡулланыуҙы киңәйтеү - патриотик тәрбиә биреү ҡоралы, йәштәр өсөн тарихи хәтирәт дәресе һәм дәүләт кимәлендә нацизмды реабилитациялауға ҡаршы тороу ысулы", - тип билдәләне Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев.

✓ **Башҡортостан дәүләт ерҙәрен ҡуртымға алыуҙа әүҙемлек буйынса тәүге өсәү иҫәбенә инде.** Сервистарҙың уңайлы булыуы һәм бизнесҡа бирелгән льготалар һөҙөмтәһендә ошондай динамикаға өлгәшелде, тип иҫәпләйҙәр Башҡортостандың Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығында. Йыл башынан Башҡортостанда 10,2 меңдән ашыу ер участкаһын ҡуртымға алыу килешеүе теркәлгән. Был иһә илдә өсөнсө һөҙөмтә - Алтай крайында (19 мең) һәм Ростов өлкәһендә (11,8 мең) генә күберәк. Росреестр мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәйҙә ерҙе ҡуртымға алыу тураһында бөтәһе 309 меңдән ашыу килешеү төҙөлгән (2024 йылдың ғинуар-июлендә - 313 мең). Башҡортостандың Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығында билдәләүҙәренсә, республикала инвесторҙарға иң кәрәкле дәүләт ярҙамы - ерҙе ҡуртымға алыуҙа (сауҙаһыҙ) ярҙам күрһәтеү. Бынан тыш, һанлы сервистар даими рәүештә камиллаштырыла, процедуралар ябайлаштырыла.

✓ **Яңы ҡағиҙәләр беренсе тапҡыр һөнәр билеты алған граждандарҙы, шулай уҡ был документтан мәхрүм ителгәндәрҙе имтихан тапшырырға мәжбүр итә.** Үҙгәрештәр 2025 йылдың 1 сентябренән көсөнә инә. Элек билет алыу өсөн минимум талаптары менән танышыу етә ине, әммә был һөнәрсының тәбиғәт һәм закон алдында үҙ яуаплылығын аңлау өсөн етерлек сара түгел тип танылды. Хәҙер һөнәрсылар хайуандар биологияһын, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен, һөнәр итеүҙең рөхсәт ителгән ысулдарын һ.б. белергә тейеш. Белемде тикшереү бушлай үткәрелә. Ғариза формаһы, имтихан үткәреү даталары һәм урындары тураһында мәғлүмәт министрлыҡ сайтында баҫыласаҡ. Башҡортостанда 83 меңдән ашыу һөнәрсы теркәлгән, уларҙың һөнәр билеты һәм ҡорал һаҡлауға һәм йөрөтөүгә рөхсәте булырға тейеш. Һөнәр ваҡытында был документтарҙы, шулай уҡ дөйөм ҡулланылыштағы ерҙәрҙә һөнәр ресурстарын табыуға рөхсәт алырға кәрәк. Беркетелгән һөнәр биләмәләрендә өҫтәмә юллама кәрәк буласаҡ. Был документтарһыҙ һөнәр итергә ярамай, ҡануниәтте боҙған өсөн административ һәм енәйәт яуаплылығы ҡаралған.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

ОСТАЗЫНЫҢ ЯРҘАМСЫҺЫ...

МХО ветераны, Батырлыҡ ордены һәм "Батырлыҡ өсөн" миҙалы кавалеры Оскар Ситдиҡов Башҡортостан Башлығы ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнде.

Республика етәксеһе Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә ошо турала хәбәр итте. "Уҙған аҙнала Оскар Ситдиҡов, Рәсәйҙең Ҡораллы Көстәрендә хеҙмәтен тамамлап, республиканың идара итеү командаһында эш башланы", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Оскар Ситдиҡов Рәсәй Президенты ҡушыуы буйынса бойомға ашырылған "Геройҙар ваҡыты" федераль кадрҙар проектының беренсе ағымында уҡып сыҡты. Радий Хәбиров - уның остазы.

Оскар Ситдиҡов 1989 йылдың 14 ғинуарында Белорет районының Үҙәнбаш ауылында тыуған. Советтар Союзы маршалы Семён Буденный исемендәге Хәрби элемтә академияһын тамамлай. 2007 йылдан төрлө вазифаларҙа Рәсәй Федерацияһы Ҡораллы Көстәрендә хеҙмәт бурысын үтәй. 2022-2024 йылдарҙа Махсус хәрби операцияла ҡатнаша. Батырлыҡ, генерал Шайморатов ордендары, "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнгән.

ҒАИЛӘ ФЕРМАЛАРЫНДА - ЙӘШТӘР

Башҡортостан Башлығы йәштәрҙең ауыл хужалығы менән ҡыҙыҡһыныуы хаҡында һөйләне.

Ҡалтасы районынан Дилара Низаметдинова һигеҙенсе йыл башҡорт тоҡомло аттар үрсетеү менән шөғөлләнә. Аграр университетты тамамлаған ҡыҙ ата-әсәһе ярҙамында "Экони" фермаһын асҡан. Хужалыҡ аттар, ит ризыҡтары, органик ашламалар һата. Хәҙер бында 450 ат бар. Предприятиены үҫтереүҙә дәүләттең дә ярҙамы ҙур. 2022 йылда Дилара ауыл хужалығы министрлығының "Ғаилә фермаһы" программаһы буйынса грант - 12,8 миллион һум отҡан. Был аҡса бейәләр һанын арттырыу (хәҙер улар 160), мал аҙығы әҙерләү өсөн техника һатып алыу, һуйыу цехы төҙөү өсөн тотонолған. Хәҙер һөтсөлөк йүнәлешен дә үҫтереү планлаштырыла. Дилара башҡорт тоҡомло аттарҙы бик ярата. Был аттар сыҙамлы булыуы, ныҡлы иммунитеты һәм юғары етештереүсәнлеге менән айырылып тора.

Республикала ғаилә фермаларына ярҙам күрһәтеү ғәйәт ҙур популярлыҡ менән файҙалана. Биш йыл эсендә 98 фермер 887,5 миллион һумлыҡ грант алған. "Республиканың ауыл хужалығына эшһөйәр, маҡсатҡа ынтылған, уңышҡа өлгәшергә теләгән йәштәрҙең килеүен күреүе ҡыуаныслы. Уларға уңыштар теләйем! Ә беҙ мотлаҡ ярҙам итербеҙ", - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.

АҒАС УЛТЫРТЫРТАЙЫҠ!

Быйыл 20 сентябрҙән 4 октябргә тиклем уҙасаҡ "Йәшел Башҡортостан" акцияһы сиктәрендә 4 меңдән ашыу ҙур ағас ултыртыласаҡ.

Республиканың Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә "Йәшел Башҡортостан" акцияһы пландары тураһында һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, быйыл көҙгө акция 20 сентябрҙән 4 октябргә тиклем үтәсәк, сараны уҙғарыуҙың берҙәм көнө итеп 27 сентябрь билдәләнгән. Акция сиктәрендә төбәк буйынса 4 меңдән ашыу эре ағас һәм 40 мең башҡа үсентe ултыртыласаҡ. Шулай уҡ алдағы акциялар сиктәрендә ултыртылған 9 мең ағас һәм ҡыуаҡлыҡ йәшелләндереләсәк. Республикала өс яңы аллея барлыҡҡа киләсәк.

"Туймазы районында 120 миләш һәм балан үсентeһе ултыртып, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙы иҫкә алыу аллеяһы барлыҡҡа килтереләсәк. Ә Ҡариҙел районында алма, сирень һәм миләш ағастарынан "Геройҙар аллеяһы" ойоштороласаҡ. Баҡалы районында 30 алма ағасынан торған "Алма баҡсаһы" аллеяһы ойоштороласаҡ. Шулай уҡ Салауатта, Нефтекамала һәм Стәрлетамаҡта тематик аллеяларҙа ҙур ағастар ултыртыласаҡ. Өфөлә ғенә көҙгө осорҙа 1600- ҙән ашыу эре һәм 4000 ҡыуаҡ ултыртыу күҙаллана", - тип һөйләне Ирина Голованова.

Бынан алда республикала "Йәшел Башҡортостан" акцияһы сиктәрендә 5,5 меңдән ашыу ағас ултыртылды.

ЙӨРӘГЕГЕҘҘЕ ҺАҠЛАҒЫҘ!

2025 йылдың июненән Республика кардиология үҙәгенең яңы хирургия корпусында бөтәһе 5,3 меңдән ашыу тикшереү һәм операция үткәрелгән, тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, ошо осорҙа 4314 кеше тәүлек әйләнәһенә эшләгән стационарҙа дауаланған, 33 368 пациент поликлиникала консультация алған, шулай уҡ 80-дән ашыу уникаль юғары технологиялы операция эшләнгән. Әлегә иң өлкән пациент - 99 йәшлек олатай. Иң йәше - тыумыштан йөрәк сирле 7 көнлөк сабый. Бөгөнгө көндә ике пациент та үҙҙәрен яҡшы хис итә.

- Башҡортостанда йөрәк ауырыуҙарына, уларҙы дауалауға һәм иҫкәртеүгә етди иғтибар бирелә. Мәҫәлән, Республика кардиология үҙәгенең яңы хирургия корпусы бик тә заманса килеп сыҡты. Бында эшләгән табиптар - үҙ эшенең оҫталары, улар хатта бик ҡатмарлы осраҡтарҙа ла сирлеләрҙе аяҡҡа баҫтыра. Әммә операция өҫтәле - иң һуңғы сара, уға еткермәү яҡшыраҡ. Үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ, һау-сәләмәт булығыҙ, - тип мөрәжәғәт итте Радий Хәбиров республика халҡына.

АВТОМОБИЛҺЕҘ БУЛМАЙ

Башҡортостанда производствола зыян күргәндәргә автомобилдәр тапшырылды.

Социаль реабилитация сиктәрендә 16 кеше "Лада Гранта" алды. Автомобилдәр махсус рәүештә физик мөмкинлектәрҙе иҫәпкә алып йыһазландырылған һәм ҡул менән идара итеү системаһы менән тәьмин ителгән. Социаль фондтың Башҡортостан бүлексәһе мәғлүмәте буйынса, был юлы Учалы, Яңауыл, Әбйәлил, Бишбүләк, Әлшәй, Стәрлебаш райондарынан һәм Сибайҙан 16 кешегә "Лада" тапшырылған. Улар араһында өсөнсө йәки дүртенсе тапҡыр машина алғандар ҙа бар, автомобиль ете йылға бер тапҡыр бирелә. Мәҫәлән, Илештән Искәндәр Диниев дүртенсе автомобилен алырға килгән. "Эш буйынса район үҙәгенә йыш барырға, көнкүреш мәсьәләләрен хәл итергә тура килә, тәбиғәткә ял итергә сығабыҙ. Беренсе тапҡыр миңә "Ока" биргәйнеләр, ә бөгөн ҡулымда - Lada Granta автомобиле асҡысы, ҙур рәхмәт", - тине ул.

Башҡортостан буйынса Социаль фондта белдереүҙәренсә, файҙаланыу осоронда льготалы транспортты һатып йәки бүләк итеп булмай. Дөйөм алғанда, производствола имгәнгән 33 кеше машина менән тәьмин ителгән. Был маҡсатҡа 36 миллион һум йүнәлтелгән.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың биш муниципалитетының Бөтә Рәсәй уңайлы ҡала мөхитен булдырыу буйынса иң яҡшы проекттары 2025 конкурсында еңеүе тураһында һөйләне. Ҡаҙанда Бөтә Рәсәй бәләкәй ҡалаларҙы һәм тарихи ауылдарҙы үҫтереү форумында илдең Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы уңайлы ҡала мөхитен булдырыу буйынса иң яҡшы проекттар конкурсы еңеүселәрен иғлан итте. "Беҙ 10 ғариза тапшырғайныҡ, шуларҙың бишәүһе еңде. Октябрьский, Дүртөйлө, Шишмә, Үрге Йәркәй һәм Кушнаренко. Федераль аҡса күләме - яҡынса 500 миллион һум", - тине Радий Хәбиров.

✓1 сентябрҙә Башҡортостан биләмәһендә урынлашҡан магазиндарҙа алкоголь продукцияһын һатыу тыйыла. Бындай сикләү "Башҡортостан Республикаһында этил спирты, алкоголь һәм спиртлы продукция етештереү һәм әйләнеше өлкәһендәге эшмәкәрлекте көйләү һәм алкоголь продукцияһын ҡулланыуҙы (эсеүҙе) сикләү тураһында" законға яраШлы билдәләнгән.

✓Учалы ҡалаһы үҙәгендә Урал батырға һәйкәл ҡуйыла. Эпос геройы ҡеүәтле арыҫланға атланған килеш һынландырыла, тип хәбәр итә район хакимиәте башлығы Руслан Ғиләжетдинов. Скульптура композицияһының ҡуйылыуы ҡала хакимиәтенең 2024 йылда "Башҡортостан Республикаһының иң яҡшы муниципаль берәмеге" конкурсында еңеүе менән бәйле. Һәйкәлдең авторы - рәссам һәм скульптор Фәнил Мөслимов. "Һәйкәл, һис шикһеҙ, ҡаланың биҙәге генә түгел, ә беҙҙең райондың бренды ла буласаҡ. Сөнки уның тарихы "Урал батыр" эпосы менән тығыҙ бәйләнгән", - ти район башлығы.

✓Үткән ярты йылда һаулыҡ һаҡлау өлкәһен финанслау күләме 138,8 миллиард һум самаһы тәшкил иткән, был 2024 йыл менән сағыштырғанда 25,6 процентҡа күберәк. Быйыл республика кардиология үҙәгенең яңы хирургия корпусы асылды. Шулай уҡ 4 һаулыҡ һаҡлау объектында капиталь ремонт тамамланған, 110 модулле ФАП ҡуйылған, 54 санитар автомобиль һатып алынған. Ағымдағы йылда 6 һаулыҡ һаҡлау объектын төҙөүҙе тамамлау планлаштырыла. Капиталь ремонт үткәреү өсөн билдәләнгән 9 медицина ойошмаһының 5-һендә эштәр тамамланған да инде.

✓Шишмә районы Шөңгәккүл ауылынан "Чистый" позывнойлы яугир "Атайсал" проектында ҡатнашҡан һәм ҡыҫҡа ваҡытлы ялында тыуған ауылына бүләк эшләргә булған. "Атайсал" проекты сиктәрендә ир-уҙаман үҙ урамына 15 заманса фонарь һатып алып ҡуйған.

✓ *Яңы уҡыу йылын республикала ярты миллиондан ашыу бала, шул иҫәптән 45 меңгә яҡын беренсе класс уҡыусыһы (45070), шулай уҡ 118 меңдән ашыу колледж студенты (31 меңгә яҡыны беренсе курс студенты) башлай.*

БАШЛАНДЫ!

РЕСПУБЛИКА МӘКТӘПТӘРЕ...

яңы уҡыу йылына әҙер!

Башҡортостан Республикаһының мәғариф министры Илдар Мәүлетбирҙин, Хөкүмәттә үткән аҙналыҡ оператив кәңәшмәлә сығыш яһап, яңы уҡыу йылына әҙерлек, уға бәйле төп күрһәткестәр менән таныштырҙы.

Яңы уҡыу йылын республикала ярты миллиондан ашыу бала, шул иҫәптән 45 меңгә яҡын беренсе класс уҡыусыһы (45070), шулай уҡ 118 меңдән ашыу колледж студенты (31 меңгә яҡыны беренсе курс студенты) башлай.

Белем көнөнә арналған тантаналы линейкалар 1 сентябрҙә республиканың барлыҡ мәктәптәрендә үтә. Унда Хөкүмәт ағзалары, Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары, урындағы үҙидара органдары вәкилдәре, абруйлы ҡунаҡтар ҡатнаша.

Белем биреү ойошмаларын яңы уҡыу йылына әҙерләү сиктәрендә ведомство-ара республика комиссияһы эшен дауам итә. Комиссия составына Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан Республикаһы буйынса Баш идаралығы, Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығы, Рәсәй Федерацияһы Милли гвардия ғәскәрҙәренең Башҡортостан Республикаһы буйынса федераль хеҙмәте идаралығы, Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын һәм кеше именлеген яҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы, ата-әсәләр комитеттары вәкилдәре индерелгән.

Яңы уҡыу йылына әҙерлек эштәре 1236 дәйәм белем биреү ойошмаһында үткәрелгән. Әле (28-29 августа) уларҙың барыһында ла ҡораллы һөжүм ваҡытында, шартлатҡыс ҡулайлама табылған йәки пилотһыҙ осоусы аппарат (БПЛА) һөжүме мәлендә һаҡ хеҙмәткәрҙәренең һәм коллективтар ағзаларының комплекслы сценарийын әҙерләү буйынса Бөтә Рәсәй күнекмәләре бара.

Уҡыу йылы башына республиканың 711 мәктәбенә "Ватанды һаҡлау һәм хәүефһеҙлек нигеҙҙәре" һәм "Хеҙмәт (технология)" предметтары буйынса уҡыу кабинеттары өсөн яңы ҡорамалдар һатып алынған. Ғөмүмән алғанда, Башҡортостан Республикаһы йыһаландырылған мәктәптәр һаны буйынса Рәсәй Федерацияһында - 4-се һәм Волга буйы федераль округында 1-се урынды биләй. Был маҡсатҡа тотонолған аҡсаның дөйөм күләме 203,5 млн һум тәшкил иткән.

Республикала белем биреү ойошмаларын берҙәм дәүләт дәреслектәре менән тәьмин итеү буйынса әүҙем эш алып барыла. 2025 йылда бының өсөн республика бюджетынан 1,3 миллиард һум аҡса бүленгән. В. Мединский авторлығындағы 10-11 кластар өсөн тарих буйынса дәреслектәр менән бөтә мәктәптәр ҙә тәьмин ителгән. 1 сентябргә республика уҡыусылары шулай уҡ 5-7 класс өсөн тарих дәреслеге лә аласаҡ.

53 меңгә яҡын уҡыусы мәктәпкә йәшәгән урынынан ситтә йөрөп уҡый. Республиканың уларҙы йөрөтөү өсөн тәғәйенләнгән мәктәп автобустары паркы 1590 берәмек техниканан тора. 2025 йыл дауамында федераль һәм төбәк программалары сиктәрендә мәктәп автобустары паркын өлөшләтә яңыртыу ҡаралған.

Республикала уҡыусыларҙы ҡайнар аш менән тәьмин итеүҙе камиллаштырыу буйынса эш дауам итәсәк. Уҡыусыларҙың льготалы категорияларын бушлай ашатыу өсөн 2025 йылда 2,6 миллиард һум бүленә. Шул иҫәптән Башҡортостан бюджетынан - 1,2 миллиард һум.

Мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин һүҙҙәренсә, 1 сентябрҙән "Тыуған яҡ тарихы" тигән яңы уҡыу курсы, берҙәм дәрес планлаштырыу һәм дәрестәр теҙмәһе индерелә, контроль эштәр һаны кәмей. Бынан тыш, көҙгө, ҡышҡы һәм яҙғы каникулдарҙың даталары билдәләнгән. "Яңы уҡыу йылы сифатлы белем алыу өсөн тулы мөмкинлек бирер, үҫеп килгән быуында патриотик аң формалаштырыу өсөн мөһим этап булыр тип ышанам", - тине Илдар Мәүлитбирҙин.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

БУШЛАЙ ЙӨРӨЙҘӘР

Башҡортостанда Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың мәктәптәрҙә, колледждарҙа һәм юғары уҡыу йорттарында уҡыған балалары өсөн бушлай юл йөрөү буйынса төбәк дәүләт хеҙмәте барлыҡҡа килде.

Яңы уҡыу йылында уларҙың социаль транспорт картаһы буйынса айына 60 тапҡыр бушлай йөрөү мөмкинлеге бар. Республика дәүләт идаралығының Һанлы үҫеш министрлығында асыҡлауҙарынса, льгота дөйөм белем биреү ойошмаларында - 1 сентябрҙән 31 майға, урта махсус һәм юғары уҡыу йорттарында 1 сентябрҙән 30 июнгә тиклем ғәмәлдә була. Уның менән ҡала һәм ҡала яны транспортында (таксиҙан тыш) файҙаланырға мөмкин. Хеҙмәт менән файҙаланыу өсөн МИР картаһы, "Алға" транспорт картаһы йәки уҡыусы картаһы кәрәк.

- Социаль әһәмиәтле хеҙмәттәрҙе электрон формаға күсереү, шулай уҡ яңы сервистар булдырыу - "Мәғлүмәттәр иҡтисады" милли проектының төп бурыстарының береһе, - тип билдәләне ведомство етәксеһе Геннадий Разумикин.

ҠЫҪҠАСА

МӘКТӘПТӘРГӘ - АВТОБУСТАР

Республика мәктәптәренә рекордлы һанда автобустар һәм еңел машиналар тапшырылды. "Өфө-Арена" алдындағы майҙанда республика етәксеһе Радий Хәбиров ҡатнашлығында асҡыстар тапшырыу тантанаһы үтте. "Бөгөн республиканың ауыл һәм ҡала мәктәптәре директорҙарына 200-ҙән ашыу автобус һәм еңел автомобиль тапшырҙыҡ. Илебеҙ машиналары федераль һәм республика бюджеттары аҡсаһына һатып алынған. Яңы мәктәп автобустары - көн һайын мәктәпкә йөрөгән балаларыбыҙ өсөн өҫтәмә уңайлылыҡ һәм хәүефһеҙлек. Беҙ быны яҡшы аңлайбыҙ, шуға күрә автопаркты яңыртыу эшен өҙлөкһөҙ алып барабыҙ. 2019 йылдан алып беҙҙең мәктәптәргә 900-гә яҡын яңы автобус тапшырылды.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Бөрөгә эш сәфәре барышында телмәре боҙолған уҡыусыларҙың Бөрө коррекция мәктәп-интернатында булды.** Ул 1944 йылда асылған. Хәҙерге ваҡытта унда 389 бала уҡый, уларҙың 49-ы - инвалид, 145 уҡыусы интернатта йәшәй. Белем усағы директоры Ирина Таһирова әйтеүенсә, мәктәптә инвалид балалар өсөн барлыҡ уңайлы шарттар булдырылған. Мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин быйыл республикала өс коррекция мәктәбенең капиталь ремонт программаһына индерелеүен әйтте. "Беҙ республикала коррекция мәктәптәре системаһын һаҡлап ҡалдыҡ, уларҙың матди базаһын тәртипкә килтерәбеҙ. Сәләмәтлеге үҙенсәлекле балалар айырыуса иғтибарға мохтаж. Бөрө коррекция мәктәп-интернаты балаларыбыҙҙы нисек яратыу һәм улар тураһында хәстәрлек күреүҙең сағыу миҫалы", - тип яуапланы Радий Хәбиров "Башинформ" хәбәрсеһенең һорауына яуап итеп.

✓ **1 сентябрҙән Хәйбулла районының Аҡъяр ауылында Сибай медицина колледжы филиалы үҙ эшен башлай.** Республиканың һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, бында шәфҡәт туташы эше белгестәрен әҙерләйҙәр. Беренсе курсҡа 25 студент ҡабул ителгән. Филиал Аҡъяр тау колледжында асыла, ә студенттар Аҡъяр үҙәк район дауаханаһында практика үтә. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда Һаулыҡ һаҡлау министрлығы етәкселегендә һигеҙ медицина колледжы селтәре һәм БДМУ ҡарамағындағы тағы бер колледж эшләй. Төп колледждарҙан тыш, Нефтекамала, Октябрьскийҙа, Учалыла һәм Мәсәғүт ауылында дүрт яңы филиал асылған, шулай уҡ Күмертауҙа Стәрлетамаҡ медицина колледжының филиалы бар. Хәҙер республиканың медицина колледждарында 8,5 меңдән ашыу студент уҡый, йыл һайын 2 меңгә яҡын кеше тамамлай, уларҙың 85 проценты дәүләт учреждениеларына эшкә урынлаша. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәте буйынса, республикала урта медицина хеҙмәткәрҙәре дефициты 1795 кеше тәшкил итә.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Шишмәлә милли аш-һыу фестивалендә башҡорт халҡының милли ризығын әҙерләгәндәр. "Турахан" визит-үҙәге янында уҙған милли аш-һыу фестивале барышында донъялағы иң ҙур тултырылған тауыҡ бешергәндәр. Был башҡорт халҡының милли ризыҡтарының береһе булып тора. Башҡортостандың күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин социаль селтәрҙәге сәхифәһендә яҙыуынса, рекорд өсөн 20 килограмм ит, 80 йомортҡа һәм өс литр ҡаймаҡ кәрәк булған. Был 400 кешегә етә тигән һүҙ. "Шишмә районында бына шундай тәмле милли аш-һыу фестивале уҙҙы. Шишмә халҡын һәм ҡунаҡтарҙы һыйланылар", - тип йомғаҡ яһаны Данир Ғәйнуллин.

✓"Медиалогия" компанияһы 2025 йылдың икенсе кварталы өсөн рейтинг төҙөгән. Ул "Медиалогия" системаһының киң мәғлүмәт саралары (ТВ, радио, гәзит-журнал, мәғлүмәт агентлыҡтары, интернеттағы киң мәғлүмәт саралары) нигеҙендә әҙерләнгән. "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы 76,15 цитата килтереү индексы менән беренсе урынды биләй. Икенсе урында - Mkset.ru (61,04), артабан Ufatime.ru килә (46,64). Дүртенселә - РБК (41,08), бишенселә иһә Ufa1.ru (37,41).

✓Республикала умартасылар ғаиләһе яугирҙарға 50 килограмдан ашыу бал тапшырған. Яңғыҙнарат ауылынан Зинира һәм Ришат Фәррәховтар өсөнсө йыл инде Махсус операцияла ҡатнашҡан яҡташтарына ярҙам күрһәтә. 30 йыл стажы булған умартасылар ғаиләһе даими рәүештә алғы һыҙыҡҡа үҙҙәренең тәмле балын ебәрә, тип хәбәр итә Яңауыл районы хакимиәте. Ошо көндәрҙә улар Миңлеғәле Шайморатов исемендәге урындағы ирекмәндәр штабына 50 килограмдан ашыу татлы ризыҡ тапшырған. "Яугирҙарыбыҙ файҙалы витаминдар алһын һәм һау-сәләмәт булһын. Был иһә илебеҙҙе һаҡлаусыларға беҙ эшләй алғандың бәләкәй генә өлөшө", - ти Фәррәховтар.

✓Башҡортостанда Республикаһының фельдшер-акушерлыҡ пункттарына эшкә урынлашҡан фельдшерҙарға (акушерҙарға) бер тапҡыр бирелә торған пособие биреү тәртибе үҙгәрҙе. Әлеге үҙгәрештәргә ярашлы, 2016 йылдың 1 ғинуарынан эшкә ҡабул ителгән фельдшерҙар (акушеркалар) 2025 йылда бер тапҡыр бирелә торған пособиеға дәғүә итергә хоҡуклы.

✓Башҡортостандың 43 муниципаль районы ойошторолоуға 95 йыл тулды. Был хаҡта республика Муниципаль берәмектәр советының телеграм-каналында хәбәр ителә. 1930 йылдың 20 августында Үҙәк башҡарма комитеты ҡарары менән административ-территориаль бүленеш системаһы индерелә. Башҡорт АССР-ында 48 район барлыҡҡа килә, кантон системаһы бөтөрөлә. Бөгөн 1930 йылда ойоштороған 43 муниципаль район юбилейын билдәләй.

✓ ***Быйыл РФ Мәғариф министрлығы, кескәйҙәрҙе артыҡ көсөргәнештән аралау маҡсатына һылтанып, беренсе кластарҙа туған тел дәресен ҡыҫҡартырға ҡарар итте.***

БАШ ҠАЛАМ

БЕРГӘЛӘП ТЫРЫШҺАҠ...

Өфөлә йәшәмәһәм дә, баш ҡалаға йыш ҡына юл төшә. Студент йылдары, ғаиләле булып йәшәгән тәүге йылдар - барыһы ла Өфө менән бәйле. Шуға күрә ҡала миңә яҡын һәм ҡәҙерле. "Киске Өфө"лә баҫылып килгән күҙәтеүҙәрҙе уҡып барам, һәм үҙемдең дә фекерҙәрем менән бүлешкем килде гәзит уҡыусылар менән.

Ҡалалағы йәшел зоналарҙы - парк, сквер, дендрарийҙарҙы һаҡлап тороуҙары, уларҙы тәрбиәләүҙәре тик маҡтауға лайыҡ. Нәҡ ошо йәшел утрауҙар Өфөнөң төп байлыҡтарының береһе. Ҡаланың төҙөкләндерелеүен күҙәтеү айырыуса ҡыуаныслы. Күптән булғандарына ҡушып, яңы сквер, яңыртылған аллеялар булдырыла, матур-матур газондар барлыҡҡа килә - быларҙың барыһы ла ҡалабыҙҙы уңайлыраҡ итә. Яҡутов паркы, Салауат Юлаев исемендәге баҡса, Ағиҙел йылғаһы яры һәм башҡа ошондай ерҙәр - ҡала халҡының яратҡан ял итеү, йылдан-йыл күбәйгән туристарҙың да күпләп йөрөгән урындары.

Өфөлә мәҙәни тормош гөрләй. Фестиваль, концерт, күргәҙмәләр даими үткәрелә. Уларҙың һәр береһе йөкмәткеле, рухлы һәм күңелгә ятышлы. Нисек кенә булмаһын, тормош дауам итә һәм бындай халыҡты туплаған, рухи яҡтан байытҡан саралар үткәрелеүе кәрәктер, тип уйлайым. Беҙ, мәҫәлән, ошондай сараларға райондан туғандар, дуҫтар менән бергәләп киләбеҙ.

Ҡала инфраструктураһының үҫеше лә һиҙелә. Яңы юлдар төҙөлә, иҫкеләре ремонтлана, заманса сауҙа үҙәктәре һәм спорт комплекстары барлыҡҡа килә. Йәмәғәт транспортының үҫеше айырыуса ҡыуандыра - яңы маршруттар өҫтәлә, урамдар буйлап заманса автобустар елдерә.

Шулай ҙа борсолоу тыуҙырған күренештәр ҙә юҡ түгел. Мәҫәлән, юлдарҙағы тығындар - Өфөнөң мәңгелек проблемаһы. Бигерәк тә ул иртәлекисле сәғәттәрҙә ныҡ һиҙелә. Ҡалала даими рәүештә яңы юл сиселештәрен төҙөүгә ҡарамаҫтан, хәл көсөргәнешле ҡала. Был бөтә ҙур ҡалаларҙың да үҙәгенә үткән хәлдер инде ул.

Ҡаланың экологик хәле иғтибар талап итә, сөнки уның ҡайһы бер райондарында һауаның бысраныуы юғары булып ҡала. Экологияны бысратыуҙан һаҡлаған яңы технологияларҙы әүҙемерәк индереү һәм сәнәғәт предприятиелары тарафынан һауаны бысратыуға алып килгән процестарҙы ныҡлы күҙәтеү аҫтында тотоу әүҙемләштерелһә ине.

Шулай уҡ ҡаланың тарихи үҙәгенең торошо ла бик маҡтанырлыҡ хәлдә түгел икәне күҙгә ташлана. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөтә тарихи биналар ҙа тейешле ҡарауҙа түгел, реставрация, төҙөкләндереү һүлпән бара. Нисек кенә булмаһын, ҡаланың уникаль архитектураһын һаҡлау мөһим, минеңсә. Беҙҙең Өфө ҙур үҫеш потенциалына эйә һәм һәр бер өфөләнөң генә түгел, ә төбәктә йәшәгән һәр кемдең иңендә уның үҫешенә үҙ өлөшөн индереү бурысы ята. Бергәләп беҙ Өфөбөҙҙө тағыла матурыраҡ, уңайлыраҡ итә аласаҡбыҙ.

Самат САФИУЛЛИН.

БЫЛ АЙҘА...

МӘКТӘП ХӘЛДӘРЕ ШУЛАЙ...

Алтынға мансылыр мәл - һарысай ишек шаҡый. Ниндәй булыр ул? Беҙҙең һуңғы ваҡыттарҙа күҙәтелеүсе тотороҡһоҙ климат шарттарында көҙ күнегелгән сценарий буйынса түгел, ә "нисек теләй, шулай" килә, төрлөсәрәк ҡылыҡтары менән аптырата башланы. Замана көҙҙәрелер был.

Әлекесә, ямғыры ла ваҡытында яуып, еле лә ваҡытында иҫкән ғасырҙарҙа көҙ үҙенең иң матур мәле - әбейҙәр сыуағы менән кинәндереп ала ине, хәҙер уның ҡайғыһы ла китте, ахыры. Әллә аҡ яулыҡ бөркәнеп, йышылып-йылтырап бөткән таяғына таянып, ҡапҡа алдына сыуаҡлап ултырырға сыға торған әбейҙәребеҙ китеп бөттөмө... Бөгөнгө әбейҙәр, ни тиһәң дә, замансараҡ та, йәшерәк тә күренгәндәй, элекке инәйҙәрҙә була торған сабыр аҡыл, серлелек, боронғолоҡ сифаттары ла күренмәҫ булды...

Шулай инде, миҙгелдәр алмашынып торған кеүек, заманалар ҙа бишкә төрләнә һәм уларҙың һәр береһенең үҙ көйө, үҙ холҡо. Ана бит, синоптиктар ҙа хатта, быйылғы сентябрҙә әбейҙәр сыуағына өмөт итмәгеҙ, тип иҫкәртеп тора. Бәхеткә, был хәбәрҙе "Метео" прогноз үҙәге етәксеһе Александр Шувалов, айҙың тәүге яртыһында һәм Мәскәү менән Мәскәү өлкәһе өсөн фараз лау, тип төҙәтмә бирҙе. Ә бына "Гисметео" порталы Башҡортостанда һарысайҙың тәүге яртыһы хас әбейҙәр сыуағына тап килерлек йәйгесә йылы, ҡояшлы буласағын, ямғырҙарҙың туҡтап торасағын күҙаллай. Ә беҙҙең өсөн бөгөн һауа торошоноң уңыш йыйыуға ҡамасауламауы шарт. Йәнә лә шуныһы бигерәк мөһим: көн тороштары ниндәй булһа ла булһын, мәгәр илебеҙ күге аяҙыһын, сыуаҡ көндәр, именлек, тыныслыҡ килһен, ниһайәт!

Ә бит ай башында һауа торошоноң нисек килеүе биштәрҙәрен артмаҡлап, ҡулдарына аҫыл гөлләмәләр тотоп мәктәпкә юлланыусы балалар өсөн дә мөһим. Бигерәк тә тәүге тапҡыр мәктәп ишеген үрелеп асасаҡ беренсе класс кескәйҙәре өсөн, сөнки был көн улар күңелендә сыуаҡ, яҡты, шатлыҡлы бер мәл булып иҫтә ҡалырға тейештер бит. Оло быуын вәкилдәре ошоғаса үҙ хәтерҙәрендә йөрөткән ана шул бер иҫтәлекле көн һымаҡ. Дөрөҫ, бөгөн мәғариф системаһы, мәктәп тормошо ла үҙгәрештәр кисерә - элекке-ләй тотороҡлолоҡ бында ла юҡҡа сыҡты. Бер яҡтан, мәғариф өлкәһе лә, йәмғиәтебеҙ үҫешенең төп йүнәлештәренең береһе булараҡ, бер урында тапанып торорға тейеш түгел, ул үҫешә бара һәм үҙ юлында үҙгәрештәр кисерә, әммә әлеге осраҡта милли идея һәм маҡсат тотороҡлолоғо күҙҙә тотола, тип әйтмәксе инем.

Әбына уҡыу-уҡытыу рәүешенә килгәндә, 2025 йылдың 1 сентябренән Рәсәй мәктәптәрен, колледждарын һәм вуздарын мәғариф системаһын модернизациялау, уҡыусылар, студенттар һәм педагогтар өсөн шарттарҙы яҡшыртыу йәһәтенән байтаҡ ҡына үҙгәрештәр, яңылыҡтар көтә. Шуларҙың иң мөһиме - цифрлаштырыу барышы: "Сферум" Рәсәй мәғариф платформаһын MAX мессенджерында берләштереү, йәғни был мәғариф эшмәкәрлегендә ҡатнашыусыларға һаҡ ҡуйылған цифрлы киңлек тыуҙырыу, тигән һүҙ. Уҡыусылар, ата-әсәләр һәм уҡытыусылар дәрестәр теҙмәһенә, электрон көндәлектәргә, өйгә эштәргә, ҡуйылған баһа-билдәләргә һәм белдереүҙәргә ҡушымтала уҡ инеү һәм файҙаланыу өсөн мөмкинлек аласаҡ. Әммә, үкенескә күрә, яуыз уйлы мутлашыусылар был порталға ла асҡыс тапҡан, тиҙәр...

Киләһе үҙгәреш - мәктәп кейемененең (форма) ГОСТ буйынса берҙәм стандарты. Балалар өсөн мәктәп кейеме аллергияға ҡаршы һәм ныҡлы туҡымаларҙан тегелә, улар нигеҙҙә ҡара, көрән, күк төҫтәрҙә һәм төрлө үлсәмдәрҙә була. ГОСТ кейемде кәм тигәндә ике йыл даими файҙаланыу һәм һәр кем һатып ала алырлыҡ хаҡтар мөмкинлеген бирә.

Тәртип өсөн баһа ҡуйыу. Яңы уҡыу йылынан башлап Рәсәйҙең 84 мәктәбендә уҡыусыларҙың тәртибенә баһа ҡуйыу буйынса тәжрибә проекты башлана. Төп маҡсат - балаларҙа социаль яуаплылыҡ һәм гражданлыҡ бурысы тәрбиәләү. Мәғариф чиновниктарының береһе әйтмешләй, был сара "мәктәптең аҡыл ғына түгел, ә холоҡ тәрбиәләүенә лә" булышлыҡ итер тип ҡарала.

Һуңғы ваҡыт Рәсәйҙә Дәүләт Думаһы кимәлендә уҡыусыларға өйгә эш биреүҙе лә юҡҡа сығарыу тураһында бәхәс алып барыла. Бәәй, былай була ҡалһа, балаларға өйгә эш менән мәшғүллек урынына диванда телефон ҡарап ятырға ваҡыт ҡына артасаҡ түгелме? Депутаттарҙың өйгә эште формаль башҡарыуҙа уҡыусыларҙы ғәйепләүендә дөрөҫлөк бар, әлбиттә, сөнки бала өйгә эште әҙер яуаптарҙан күсереп, үҙ-үҙен алдай ғына. Ләкин был сара белем алырға теләге булған уҡыусыға үҙен тикшереү ысулы икәнде лә оноторға ярамай. Өйгә эш уҡыусының үҙ намыҫы һәм мәнфәғәтендә икәнен уларға кем аңлатырға тейеш һуң? Әллә был мөһим пунктты уҡыу-уҡытыу процесынан бөтөнләй алып ташлауы ене лерәкме?

Тағы бер мәсьәлә күңелдә аңлайышһыҙ тойғо ҡалдырҙы: быйыл РФ Мәғариф министрлығы, кескәйҙәрҙе артыҡ көсөргәнештән аралау маҡсатына һылтанып, беренсе кластарҙа туған тел дәресен ҡыҫҡартырға ҡарар итте. Был популяр булмаған саранан һуң туған тел уҡытыу яҙмышына битараф булмаған төбәктәр министрлыҡтары (мәҫәлән, Татарстан, Яҡутстан, Марий Эл, Алтай республикаһы һ.б.) РФ мәғариф министры Сергей Кравцовҡа туған телдәр уҡытыу сәғәттәрен һаҡлап ҡалыуҙы һорап мөрәжәғәт итте, ләкин министрлыҡ туған тел уҡытыу өсөн дәрестән тыш саралар сәғәттәрен файҙаланырға була, тигән яуап менән сикләнде.

Әйткәндәй, Башҡортостан быйыл Рәсәй мәктәптәре араһында БДИ һөҙөмтәләре буйынса 2-се урынды яуланы. Сәнғәт, спорт, фән өлкәһендә балаларҙың талантын үҫтереү буйынса өҫтәмә белем биреү программаһы индерелә. Башҡортостан Премьер-министры Андрей Назаров үҙенең телеграм-каналында республикала 40 мәғариф учреждениеһына капиталь ремонт башҡарылыуы хаҡында хәбәр итте. Уҡытыусыларҙы санаторий-курорт дауалауы һәм науыҡтырыу проекты ҡарала.

Республикала дәүләт тел сәйәсәтен бойомға ашырыу йүнәлешендә поли-

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Рәсәйҙең Үзбәкстандағы Сауҙа вәкиллеге ҡарамағындағы Башҡортостан вәкиле Альберт Шәйхетдинов үҙ бурыстарын үтәй башланы. Был хаҡта Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә республика етәксеһе Радий Хәбиров белдерҙе. Хәтерегеҙгә төшөрөбөҙ, әлеге ваҡытта Белоруссияла, Үзбәкстанда, Төркиәлә, Ҡытайҙа, Ҡаҙағстанда, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәрендә илебеҙҙең сауҙа вәкиллектәрендә Башҡортостан вәкиллектәре эшләй. Һандар һәм тәжрибә күрһәтеүенсә, республикала был илдәр менән үҙ-ара һөҙөмтәле эш алып барыла: тышҡы сауҙа әйләнеше арта, инвестициялар йәлеп ителә, яңы берлектәге производстволар булдырыла.

✓ Башҡортостанда Верхоторҙы төҙөкләндереү эштәре тамамланып килә. Ишембай районы хакимиәте башлығы Азат Ишемғолов үҙенең телеграм-каналында ошо турала хәбәр итә. Уның һүҙҙәренсә, әле күләмле эштәр тамамланыуға табан бара. Оҙаҡламай йәмәғәт киңлеге верхоторҙарҙың һәм район ҡунаҡтарының ял итеү урынына әүерелер тип көтөлә. "Был проект яңы эскәмйәләр һәм юлдар тураһында ғына түгел. Был уникаль тарихты һаҡлауға һәм йәшәү өсөн заманса, уңайлы мөхит булдырыуға өлөш индереү ҙә", - тип билдәләне район башлығы. Яңыртылған биләмәне октябрҙә асыу планлаштырыла. Көнөн Азат Ишемғолов алдан хәбәр итергә вәғәҙә бирҙе.

✓ Башҡортостанда ураҡта иң юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән өсөн сираттағы республика конкурсы ойошторола. Тейешле бойороҡҡа республика Хөкүмәте вице-премьеры - ауыл хуҙалығы министры Илшат Фәзрахманов ҡул ҡуйған. Бындай конкурс ураҡта иң яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшкән иген йыйыу комбайндары, үҙйөрөшлө сапҡыстар һәм сөгөлдөр йыйыу комбайндары операторҙары араһында үткәрелә. 2025 йылда конкурста түбәндәге номинациялар билдәләнде: "Иң яҡшы комбайнсы", "Иң яҡшы үҙйөрөшлө сапҡыс операторы" һәм "Иң яҡшы сөгөлдөр йыйыу комбайны операторы".

✓ Башҡортостандың Журналистар союзы булышлығында Һаулыҡ һаҡлау министрлығы "Медицина и профсоюз" журналистар конкурсы ойоштороҙо. Конкурс икенсе тапҡыр үҙҙы, уны Ижади ярышта медицина хеҙмәткәрҙәренең һәм профсоюз ойошмаларының эшен, һаулыҡ һаҡлау системаһында кадрҙар ярҙамы мәсьәләләрен яҡтыртҡан, тармаҡта эшләгән кешеләр тураһында яҙған журналистар ҡатнашты. Бөтәһе 43 ғариза килде, 25 баҫмала донъя күргән 264 мәҡәлә баһаланды. "Башинформ" "Иң яҡшы мәғлүмәт агентлығы" номинацияһында еңеүсе тип билдәләнде. Агентлыҡ журналисы Эдуард Ҡускәрбәков конкурстың "Медиктар - МХО геройҙары" номинацияһында еңеү яуланы.

лингваль белем биреү учреждениелары асыу дауам ителәсәк. Был турала быйыл башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының май айында булып үткән П Бөтә Рәсәй съезында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һөйләне. Башҡорт телен һаҡлау һәм өйрәнеү буйынса тәүге съездан алып ваҡыт эсендә нығлы нигеҙ булдырылды, тине ул. Беҙҙең мәғариф системаһы күп теллелек һәм күп мәҙәнилек белем биреү йүнәлешенә йөҙ тота. Бөгөн Башҡортостанда туғыҙ полилингваль гимназия эшләй. Туған телде балаларға ғаиләлә һәм мәктәпкәсә тәрбиә учреждениеларында нығлап өйрәтә башлауҙың мөһимлеге бәхәсһеҙ. Ошо йәһәттән Әбйәлил районында асыласаҡ мәктәпкәсә бүлексәһе булған башҡорт мәктәбе телгә алып кителде. "Балалар баҡсаларында телде өйрәнеү өсөн иң уңайлы ваҡыт булған тап ошо кескәй бала саҡ осоронда башҡорт телен сағыу, йәлеп итерлек ҡыҙығлы һәм һөҙөмтәле итеп ойоштороу кәрәк", - тине республика Башлығы. Шулай уҡ башҡорт телен өйрәнеүҙе еңелләштереү һәм популярлаштырыу маҡсатында заман технологияларына ярашлы эшләнгән яңы ысулдар һәм мобиль ҡушымталарға, Google Translate аша файҙаланыусы миллиондарса кешегә туған тел өйрәнеү мөмкинлектәрен асыуға юғары баһа бирелде.

Сентябрҙә билдәләнә:

Белем көнө **(1)**, Икенсе донъя һуғышы башланған көн **(1 сентябрь, 1939 й.)**, Икенсе бөтә донъя һуғышы тамамланған, Рәсәй гвардияһы көндәре **(2)**, Японияның һис һүҙһеҙ капитуляцияға бирелеүе тураһында Актҡа ҡул ҡуйылыуға - 80 йыл **(2 сентябрь, 1945 й.)**, Терроризмға ҡаршы көрәштә теләктәшлек **(3)**, Халыҡ-ара хәйриәлек **(5)**, Нефть һәм газ сәнәғәте эшсәндәре көндәре **(7)**, Рәсәйҙең хәрби дан көнө. М.И.Кутузов етәкселегендәге рус армияһының француз армияһы менән яуында Бородино һуғышы көнө **(8 сентябрь, 1812 й.)**, Фашизм ҡорбандарын иҫкә алыу, Халыҡ-ара грамоталылыҡ, Журналистарҙың халыҡ-ара теләктәшлек көндәре **(8)**, Халыҡ-ара матурлыҡ, Белем биреү өлкәһендә һөжүмдәрҙән халыҡ-ара һаҡланыу көндәре **(9)**, Башҡортостан халыҡтарының милли кейем көнө **(12)**, Бөтөн донъя тәүге медицина ярҙамы күрһәтеү һәм Программист көндәре **(12)**, Танкист, Бөтөн донъя торна **(14)**, Санитар-эпидемиология хеҙмәте, Халыҡ-ара демократия **(15)** көндәре, Халыҡ-ара озон ҡатламы **(16)**, Ҡорал оҫтаһы **(19)**, Халыҡ-ара тыныслыҡ, Бөтөн донъя рустарҙың берләшеү, Урмансылар һәм ағас эшкәртеүселәр **(21)** көндәре, Бөтөн донъя автомобилһеҙ **(22)**, Бөтөн донъя диңгеҙ һәм "Юлдаш" радиоһы ойоштороло уға - 25 йыл (2000 й.) тулған һәм Ядро ҡоралын тулыһынса юҡ итеү өсөн халыҡ-ара көрәш көндәре **(25)**, Тәрбиәсе һәм бөтөн мәктәпкәсә хеҙмәткәрҙәр, Бөтөн донъя туризм көндәре **(27)**, Машина эшләүселәр, Ҡотороҡҡа ҡаршы халыҡ-ара көрәш, Халыҡ-ара мәғлүмәткә эйә булыу **(28)** көндәре, Отоларинолог, Бөтөн донъя йөрәк **(29)** көндәре, Рәсәйҙә интернет көнө **(30)**.

Һарысайҙа тыуғандар:

1 - мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәре, режиссер, БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Республика "Тальян байрамы"н башлап ойоштороусы, "Йәдкәр" фольклор ансамбленә нигеҙ һалыусы **Фәтих Ихсановтың тыуыуына - 90 йыл** (1935-1992).

- физика-математика фәндәре докторы, профессор, Өфө фән һәм технологиялар университетының математик анализ кафедраһы мөдире, Фән һәм техника өлкәһендә БР Дәүләт премияһы лауреаты, сығышы менән Баймаҡ районы Ҡолсора ауылынан **Йыһанур Фазуллинға - 70 йәш** (1955).

3 - режиссер, фольклор буйынса белгес-кәңәшсе, Сибай ҡалаһында Сәсәндәр мәктәбе ойоштороусы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Асия Ғәйнуллинаға - 70 йәш** (1955).

18 - шағирә, Рәсәй һәм Башҡортостан Яҙыусылар берлеге ағзаһы, 1996-2000 йылдарҙа - Күмертау, 2000-2009 йылдарҙа Стәрлетамаҡ Яҙыусылар ойошмаһында әҙәби консультант, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Зөбәржәт Йәнбирҙинаның тыуыуына - 80 йыл** (1945).

20 - эколог, биология фәндәре докторы, профессор, академик, Өфө фән һәм технологиялар университеты Сибай институтының ғилми хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, БР Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры **Йәлил Һөйөндөковҡа - 65 йәш** (1960).

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

АЛЫҪТАҒЫ АУҘЫ КҮРГӘНСЕ...

яҡындағы яуҙы күр

Үткән аҙнала донъя хәлдәрендә сағыштырмаса тынлыҡ күҙәтелде, тип әйтергә булалыр, тик был Махсус хәрби операция барышына һис ҡағылмай, әлбиттә. ФедералПресс 24 августа хәбәр итеүенсә, РФ Ҡораллы Көстәренең "Үҙәк" ғәскәр төркөмө һөжүме һөҙөмтәһендә Днепропетровск өлкәһенең Филия тораҡ пункты азат ителде. Был ошо өлкәләге хәрби операция барышында мөһим аҙымдарҙың береһе булды, һәм ул төбәктә Рәсәй ғәскәрҙәре урынын нығытасаҡ.

Украина Ҡораллы Көстәре МХО-ның бөтөн йүнәлештәре буйынса тәүлек эсендә 1270 һалдатын юғалтты. Бынан тыш, Украинаның хәрби инфраструктураһына һөжүм һөҙөмтәһендә дошмандың төп объекттары, шул иҫәптән, "Сапсан" ракета һаҡлағысы шартлатылды. "Төньяҡ" ғәскәр төркөмө Сумы өлкәһендә алып барылған хәрби бурыстарын башҡарып, ошо биләмәлә урынлашҡан "Рейнджер" украин спецназы отрядын һәм блиндажын, шулай уҡ FPV-дрондар ярҙамында уларҙың элемтә антенналарын һәм дрондар менән идара пунктын юҡ итте. "Көнбайыш", "Көньяҡ", "Көнсығыш", "Днепр" ғәскәр төркөмдәре подразделениелары ла үҙ ҡарамаҡтарындағы биләмәләрҙә дошмандың хәрби объекттарын, техникаһын, дрондар складын, украин хәрбиҙәренең 146 районындағы ваҡытлыса дислокация пункттарын юҡ итеүгә өлгәште. Ҡыҫҡаһы, ошо йылдың 24 августына ҡарата Махсус хәрби операция башланғандан алып дошмандың 665 самолеты, 283 вертолеты, 79 322 пилотһыҙ осоу аппараты, 625 зенит ракета комплексы, 24 755 танкы һәм башҡа төр бронлы машинаһы, 1 588 ут асыусы реактив системалар машиналары, 28 873 ялан артиллерияһы орудиеһы һәм минометтары, 40 314 берәмек махсус хәрби автомобиль техникаһы юҡ ителде. Үткән йәкшәмбе, йәғни 24 августа Киев режимы территорияһынан Рәсәйҙең 146 яугиры әсирлектән ҡайтарылды һәм яуап рәүешендә Украинаға шулай уҡ уларҙың 146 һалдаты тапшырылды.

Әйткәндәй, үткән аҙнаның һуңғы көнөндә Украинала Бойондороҡһоҙлоҡ көнөн байрам иттеләр. Билдәле ирланд журналисы Чей Боуз яҙып сығыуынса, Киевҡа донъяның "клоундар элитаһы", неонацистар һәм конфликтты тоҡандырыусылар был сарала ҡатнашырға йыйылды. "Аргументы недели" гәзите яҙыуынса, "Украинаны уның бер ҡасан да булмаған нәмәһе менән" ҡотлайҙар. Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ, сөнки Киев режимы һәр дайым Көнбайыш менән Аҡ йорт йоғонтоһонда һәм уларҙың ҡул аҫтында эш итте. Шуныһы ғәжәп: Киев режимын "Бойондороҡһоҙлоҡ" көнө менән ҡотлаусылар араһында Ҡытай башлығы Си Цзиньпин да бар һәм ул хатта ки Украина менән хеҙмәттәшлеккә әҙер булыуы һәм ике яҡлы мөнәсәбәттәрҙе үҙ-ара тотороҡло үҫешкә йүнәлтеүҙең ике ил өсөн дә файҙа килтерәсәге хаҡында белдерә. Бына һиңә -"көҙерле дуҫ"! Әллә, тием, Аляскалағы осрашыу зыйтына тейҙеме Си иптәшебеҙҙең? Әмәлгә ҡалғандай, РФ Президенты Владимир Путин ошо аҙна аҙаҡтарында Ҡытайға дүрт көнлөк эш сәфәре менән бара, һәм ул Цзиньпин менән 31 август-1сентябрь буласаҡ ШОС саммитында осрашасаҡ.

Киевтағы "байрам"да ҡатнашҡан Еврокомиссия рәйесе Урсула ханым телмәрендә "Ирекле Украина - ирекле Европа" тигән баш китмәле лозунг ташлап, күптәрҙе аптырашта ҡалдырғандыр. Хәйер, аптырай торғаны юҡ - Боуздан да тапҡырыраҡ әйтеп булмаҫ: тағун мәлендәге был байрамға "клоундар элитаһы" йыйылды, тигәйне бит ул. Был бигерәк тә байрамдың төп хужаһына ҡағыла торғандыр: Зеленский был көн ситтән йыйылған ҡунаҡтары яныңа Ҡырым менән Рәсәйҙең яңы төбәктәрен дә индереп, Украина картаһы төшөрөлгән сигеүле ҡара күлдәктә сыҡты. Эйе, ҡасандыр Украина ССР-ы майҙаны буйынса Советтар Союзының өсөнсө урында тороусы административ-территориаль берәмеге ине. Сәйәси эксперт Әхмәд Хәсәнов яҙыуынса, ССРС-ҙан ҡалған завод-предприятиелары менән көслө иҡтисадлы дәүләт булып үҫешергә бөтөн мөмкинлектәре бар ине. Украина властарына ни бары үҙ закондарына ярашлы идара итеү менән шөғөлләнергә генә кәрәк булды, ләкин уның сәйәсмәндәре үҙ илен һәм халҡын һатты, ватанына хыянат итте.

Шулай тип аталған "бойондороҡһоҙлоҡ" көнөн Украина Рәсәйҙең атом һәм инфраструктура объекттарына һөжүм менән билдәләмәксе булды. 24-енә ҡарай төн беҙҙең ил күгендә 95 дрон атып төшөрөлдө. Украин властары ошоға тиклем үҙҙәренә тынғылыҡ бирмәгән Курск атом электр станцияһына тағы ла яҫҡынды. Курск өлкәһе губернаторы вазифаһын башҡарыусы Александр Хинштейн АЭС өҫтөндә шартлатҡыс аппараттың бәреп төшөрөлөүе хаҡында хәбәр итте.

Бынан алда Зеленский менән осрашыуында АҠШ президенты Дональд Трамптың, конфликтты тамамлау өсөн Украинаға ҡайһы бер биләмәләре менән хушлашырға тура килер, тигән һүҙҙәрен Киев режимы башлығы алда буласаҡ килешеүҙәрҙе өҙөү өсөн сәбәп итеп алды. Һуңғы көндәрҙә генә дошман шартлатҡыс аппараттары Яңы шахта һәм Сызрань нефть эшкәртеү заводтарына, Ленинград өлкәһендәге НОВАТЭК компанияһы терминалына һөжүм итте. Трамп ике ил конфликты буйынса һөйләшеүҙәр алып барған арала Украинаға аҡса яуа башланы: Канада - 2 млрд доллар, Норвегия - 690 млн, ә Евросоюз Рәсәй активынан урланған 10 млрд евро ебәрергә ҡарар итте. Аҡ йорт хакимиәте лә Украинаға алыҫ араға (240-450 км) иҫәпләнгән радиуслы 3350 ERAM ракетаһы ебәреүҙе хупланы, ләкин уны ҡулланыу өсөн Киевҡа Пентагондың рөхсәте кәрәк буласаҡ.

Кисә генә Мәскәү менән һөйләшеүҙәргә ыңғайлаған Зеленский бындай йомарт "бүләктәр"ҙән оторо ҡыйыуланып китте, буғай, хәҙер ул, АҠШ талап иткәнсә, биләмәләрҙән баш тартыуға бармаясағын ҡәтғи белдерә: Евроберләшмә лидерҙары хөсөтө үҙенекен эшләй. Һөҙөмтәлә ике ил араһында тыныслыҡ урынлаштырыу юлында төп ҡаршылыҡты Украина менән Евроберләшмә аңлы һәм махсус рәүештә тыуҙыра. Кемдер әйтмешләй, Украина тыныслыҡҡа алыҫта әле, ә Рәсәй һаман яҡынлаша - Киевҡа етеп килә.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөнөң Орджоникидзе районында "Әкиәттә ҡунаҡта" аллеяһын төҙөкләндереү тамамланды. Аллея ВАЗ биҫтәһенең Вологда урамында урынлашҡан. Эштәр 2024 йылда уҡ ҡала Советы депутаттарына наказ сиктәрендә башлана. Уның барышын муниципаль депутаттар даими контролдә тота. Былтыр ер эштәре башҡарылған һәм юлдарға асфальт түшәлгән. Быйыл комплексты төҙөкләндереү эштәрен атҡарып сыҡҡандар.

✓Баш ҡалалағы "Аврора" таланттарҙы үҫтереү үҙәгенән егеттәр "Пилотһыҙ авиация системалары технологияһы: экспортҡа ынтылыш" дисциплинаһында - беренсе, "Дрондарҙың автономлы уҙыштары" номинацияһында икенсе булды. Өфө радиоэлектроника колледжы студенты Тимур Рәмиев криптографик саралар ярҙамында пилотһыҙ авиация системаларын һаҡлау буйынса ярыштарҙа беренсе булды. Григорий Усатов "Геодезия разведкаһы" дисциплинаһында өсөнсө урын яуланы.

✓Берҙәм дәүләт имтиханындары йомғаҡтары буйынса быйыл да йөҙ баллы эштәр буйынса уҡыусыларыбыҙ рекордлы күрһәткескә сыҡты, 159 эш иң юғары баһа алды. 5 егет һәм ҡыҙ ике фән буйынса 100 балл йыйҙы. Өфөнөң 153-сө лицейы уҡыусыһы Алексей Лобов республикала тәүге тапҡыр өс фән буйынса 100 балл алды. Бындай һөҙөмтәгә Рәсәй мәктәптәрен тамамлаусыларҙың 13-ө генә өлгәшкән.

✓Өфөнөң Рауил Бикбаев исемендәге мәҙәниәт һәм ял паркында Республика халыҡ ижады үҙәгенең "Атайсал" мәҙәни үҙәге солистары һәм ижади коллективтары ҡатнашлығында асыҡ концерт булды. Программала патриотик йырҙар һәм композициялар, ҡаһарманлыҡты данлаған сығыштар, башҡорт мәҙәниәтенең сағыу номерҙары яңғыраны. Сарала "Ауаз" башҡорт фольклор ансамбле, "Селтәр" башҡорт милли кейеме студияһы, Юнир Һағынбаев, Зилә Лира һәм башҡа йырсылар ҡатнашты.

✓Башҡортостан уҡсылары Ҡаҙағстанда донъя чемпионатында уңышлы сығыш яһаны. 2025 йылдың 19-20 августында Ақтау ҡалаһында балалар һәм юниорҙар араһында уҡтан атыу буйынса донъя чемпионаты үтте. Ярыштарҙа Ҡаҙағстан, Рәсәй, Ҡырғызстан һәм Үзбәкстан спортсылары ҡатнашты. Рәсәй исеменән турнирҙа Башҡортостандың Һыбай һәм традицион уҡтан атыу федерацияһы тәрбиәләнеүселәре сығыш яһаны. Республикабыҙҙың үҫмерҙәр командаһы халыҡ-ара аренала икенсе урынды яуланы. Ауырғазынан Батырхан Ғайсин 13-15 йәшлек үҫмерҙәр араһында бронза миҙалға лайыҡ булды. Бишбүләк районынан Гүзәл Буранғолова 16-17 йәшлек ҡыҙҙар араһында икенсе урынды алды.

“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.

✓ *Әлеге көндә штраф туҡталҡаларында 900-гә яҡын мотоцикл, питбайк, мопед тупланған. Уларҙың барыһы ла юл хәрәкәтен боҙоусы балаларҙан тартып алынған.*

БОРОНҒО АМАНАТ

ТЫЙЫУ ЙОЛАҺЫ

Боролоп ҡарауҙы тыйыу

Хикәйәттәрҙә, риүәйәттәрҙә ҡарауҙы тыйыу хәл-күренештәре лә һүрәтләнә. Иң йыш тыйылғаны - боролоп ҡарау. Был мотив йоланы мотлаҡ тотоу мөһимлегенә ишаралай. Грек мифологияһында музыканың магик көҙрәте менән һуғарылған Орфейҙың уйнауынан хайран Аид үлеләр донъяһынан остаздың ҡатыны Эвридиканы ҡабат ергә ҡайтарырға вәғәҙә бирә. Мәгәр өйгә инмәйенсә, Орфей ҡатынына ҡарамаҫҡа тейеш. Бәхетле ир һөйгәне менән ергә ҡайта, ләкин, тыйыуҙы онотоп, әйләнеп ҡарай һәм Эвридика шунда уҡ ер аҫтына инеп юғала.

Йәһүд риүәйәтендә Хоҙай Тәғәлә тарафынан юҡ ителергә тейешле Содом ҡалаһынан Лотты ғаиләһе менән алып сыҡҡанда, фәрештәләр артҡа боролоп ҡарауҙы тыя. Ләкин Лоттың ҡатыны әйләнеп ҡарай һәм тоҙ бағанаһына әүерелә.

Арт - күҙгә, йөҙгә кире тараф, йәғни алдың ҡаршыһы. Артҡа табан тигәндең насарға китеү мәғәнәһе лә бар. Әле килтерелгән һәм башҡа миҫалдарҙан аңлашылыуынса, артҡа боролоп ҡарау уңышһыҙлыҡ, кире һөҙөмтәле хәл һыҙаты, билдәһе, именлекте боҙған күренеш һымаҡ күҙаллана. Был башҡорт халыҡ ижадында ла төҫмөрләнә. "Йылҡысыҡҡанкүл" риүәйәтендә һөйләнеүенсә, серле егет аусы башҡортто бейәгә мендереп былай тигән: "Һин алға ҡарай кит, бейә артынан күлдән йылҡы малы сығыр, тик артыңа әйләнеп ҡарама". Бер аҙ барғас, аусы артында аттар кешнәүен, тояҡ тупылдауын, бейәләр сеңрәүен ишеткән. Күпмелер барғас, ул түҙмәгән, артына әйләнеп ҡараған. Ҡараһа, күлдән көтөү булып сығып килгән йылҡының яртыһы күлгә кире сумған, ярға аяҡ баҫҡандары ғына тороп ҡалған.

"Заятүләк менән Һыуһылыу" эпосының версияһында егеттең Балҡантауға барып етмәй тороп артҡа ҡарауы һөҙөмтәһендә гел бер төҫлө сыҫкан һыртлы ҡола мал тулыһынса ер йөҙөнә сыҡмай. Был күренеш эпоста ошолай һүрәтләнә. Һыу батшаһы Заятүләкте саҡырып ала ла:

- Бына һиңә бер арғымаҡ, шуның ялына тотон. Иллә мәгәр һыуҙан сыҡҡанда артыңа әйләнеп ҡарама, - ти.

Заятүләк, арғымаҡты менеп, Һыуһылыуҙы алдына ултырта ла һыу төбөнән сығып китә. Уның артынан эйәреп, ер өҫтөнә сыҫкан һыртлы йылҡы малы сыға. Кешнәшкән тауышҡа түҙә алмай, Заятүләк артына әйләнеп ҡарай. Ҡарауы була, йылҡы малының яртыһы кире боролоп һыуға инеп китә. Ярға сығып өлгөргәне генә Заятүләктең малы була.

Мәгәр сыҡмай ҡалған, кире күлгә сумған мал эпоста бәхетһеҙлек ишараһы һымаҡ һүрәтләнмәй. Заятүләк менән Һыуһылыу Балҡантауҙа донъя көтә. Һыу төбөнән сыҡҡан малдары үрсеп, байығып китәләр. Көн килгәнгә һөт биреп, тән ҡунғанға ут биреп, килгән-киткәнгә төйәк булып, оҙон, рәхәт ғүмер кисерәләр.

Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.
(Дауамы бар).

ХОҠУҠ һАҒЫ

НЕ РУЛИ, МАЛАЙ,

йәғни Атай-әсәйҙәр ни ҡарай?

Төбәктә 29 майҙан алып Башҡортостандың дәүләт автоинспекцияһы тарафынан балаларҙың руль артына ултырыуы мәсьәләһенә йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итеү маҡсатында "Не рули, малай!" исемле акция бара.

Йәй миҙгелендә төбәктә мототранспорт руленә ултырған балалар ҡатнашлығында юл-транспорт ваҡиғалары артыуы күҙәтелде. Ҡағиҙә булараҡ, руль артына ултырыусы йәш водителдәр юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен белмәй, машиналар геүләп торған оло трассаларға сыға, уларға техника менән идара итеү ҙә ауыр. Шулай уҡ улар йыш ҡына шлемһыҙ идара итә һәм хатта иҫерек килеш рулгә ултырған, йәштәштәре алдында текә булып күренергә тырышып, төрлөсә ҡыланған йәштәр ҙә әҙ түгел. Быларҙың барыһы ла авариялар килтереүе мөмкин. Ә бындай хәлдәр күҙәтелеүенә кем ғәйепле? Тәү сиратта, ололар, ата-әсәләр. Нәҡ улар балаларға мопед, питбайк, квадроциклдар һатып ала һәм руль артына ултырырға рөхсәт бирә.

Статистикаға күҙ һалғанда, быйыл республикала йыл башынан ике бәлиғ булмаған мототранспорт водителе һәм бер пассажир һәләк булған. 22 бала өсөн бындай йөрөүҙәр имгәнеүҙәр һәм йәрәхәттәр менән тамамланған. Балалар һәм үҫмерҙәр ҡатнашлығындағы бындай авариялар Баймаҡ, Ҡалтасы, Әбйәлил, Тәтешле райондарында, Яңауылда, Нефтекамала теркәлгән. Баш ҡалала ғына 102 үҫмер питбайк руле артында тотолған, уларҙың 12-һе иҫерек булған. Әлеге көндә штраф туҡталҡаларында 900-гә яҡын мотоцикл, питбайк, мопед тупланған. Уларҙың барыһы ла юл хәрәкәтен боҙоусы балаларҙан тартып алынған. Балаһының хәүефле теләгенә булышлыҡ итеп, бындай транспорт саралары һатып алыусы ата-әсәләр административ протоколдарға ярашлы штраф түләй, шулай уҡ опека ойошмалары хеҙмәткәрҙәре алдында ла яуап тота.

Республика Башлығы Радий Хәбиров та был проблемаға айырым иғтибар бүлә һәм кешеләрҙең ғүмерен һаҡлау мәсьәләһендә эҙмә-эҙлекле, системалы эшмәкәрлек кәрәк, тип белдерә. "Рәсәй Президенты алдыбыҙға ҡуйған төп бурыс - халыҡты һаҡлап ҡалыу. Беҙҙә кешеләрҙе, балаларыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу өсөн даими рәүештә көрәш бара. Һәм беҙ был көрәш барышында ниндәй дәрәжәлә һөҙөмтәле, технологик яҡтан әҙер булыуыбыҙҙы аңларға тейешбеҙ. Был ҙур, етди эш", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Балаларҙың питбайктарҙа ҡала урамдарында, парктарҙа ҙур тиҙлектә йөрөүен, йәш водителдәр ҡатнашлығындағы юл-транспорт ваҡиғаларының артыуын һәм был мәсьәләгә айырым иғтибар бүлергә кәрәклеген Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев та һыҙыҡ өҫтөнә алды.

-Ҡала урамдарында булған ваҡиғалар хәүеф тыуҙыра. Ата-әсәләр берләшмәһе менән эшләүгә айырыуса иғтибар бүлергә кәрәк, сөнки балалары бәлиғ булғанға тиклем уларҙың һаулығын һәм ғүмерен һаҡлап ҡалыу өсөн улар яуаплы. Беҙҙең бурыс - хәрәкәт итеү өсөн хәүефһеҙ шарттар булдырыу. Улар урамдар буйлап йөрөргә тейеш түгел, - тип белдерҙе Ратмир Мәүлиев. Ул ҡала райондары хакимиәттәренә мәғлүмәт кампанияһы, иҫкәртеү әңгәмәләре үткәреү бурысын йөкмәтте. Йәмәғәт именлеге үҙәгенә дәүләт автоинспекцияһы вәкилдәре менән бергә эшләүҙе әүҙемләштерергә һәм мототранспорттың бәлиғ булмаған хужалары "яратҡан" биләмәләрҙә даими рәүештә рейд үткәрергә кәрәклеген билдәләне.

"Не рули, малай!" акцияһы ағымдағы йылдың 31 октябренә тиклем дауам итәсәк. Был күләмле кампаниянан тыш, республикала шулай уҡ даими рәүештә "Мототехника", "Иғтибар - балаларға", "СИМ" һәм башҡа акциялар үткәрелә. Юл хәрәкәте ҡағиҙәләре - ул закон һәм барыһы ла уны үтәргә бурыслы. Бәлиғ булмағандар ҙа, юл хәрәкәтендә ҡатнашыусы булараҡ, үҙ хоҡуҡтарын һәм бурыстарын ғына түгел, ә уларҙы боҙоуҙың ниндәй эҙемтәләргә килтереүен дә белергә тейеш.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

ҠАНУНДАР - ЯҠШЫҒА!

Был эсемлек - ағыу!

2025 йылдың 1 сентябренән "Башҡортостан Республикаһы территорияһында тонусты күтәреүсе алкоголһеҙ эсемлектәр (шул иҫәптән энергетик) һатыуҙы тыйыу тураһында" законға үҙгәрештәр көсөнә инә.

Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың матбуғат хеҙмәтенән республика мәктәптәрендә һәм театрҙарында алкоголһеҙ энергетиктарҙы һатыуҙы тыйыу тураһында хәбәр иттеләр. Йәғни, республикала балаларға алкоголһеҙ энергетиктар һатыуҙы тыйыу тураһында федераль закон ғәмәлдә. 1 сентябрҙә ошондай эсемлектәрҙе һатыу урындарын сикләү тураһында республика законы көсөнә инергә тейеш: мәктәптәрҙә, юғары уҡыу йорттарында, дауаханаларҙа, театрҙарҙа, физкультура һәм спорт учреждениеларында уларҙы һатырға ярамай. Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, ике закон да махсус рәүештә стимулятор өҫтәлгән эсемлектәргә генә ҡағыла. Тонусты күтәреү компоненттары итеп кофеин һәм гуарана, женьшень, лимонник кеүек үҫемлектәрҙең экстракты ҡулланыла. Тәбиғи эсемлектәргә (ҡымыҙ һәм кеүәҫ) килгәндә, улар алкоголһеҙ энергетиктарға ҡарамай, ирекле һатыла.

Хәбәр ителеүенсә, 1 сентябрҙә Башҡортостан магазиндарында хәмер һатыу тыйыла.

Тәмәкенән алыҫ тор!

Рәсәйҙә балаларға тәмәке изделиеларын һатҡан өсөн максималь штраф күләмен 2 миллион һумға тиклем арттырыу тураһында Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаттары КоАП-ҡа тейешле үҙгәрештәр индерҙе.

"Бәлиғ булмағандарға тәмәке һатыуҙы тыйыуға ҡарамаҫтан, законды боҙоусылар барыбер табыла. Һорау алыу барышында 11-17 йәшлек үҫмерҙәрҙең 70 процентын ашыуы вейптар һәм электрон тәмәке һатып алғанда уларҙан бер кем дә паспорт һорамауҙарын таный. Әгәр ололар балаларҙың һаулығын һаҡлауҙы үҙҙәренең бурысы икәнен аңламаһа, унан да бигерәк ошонан аҡса эшләргә тырышһа, уларҙы һум менән язаларға, яуаплылыҡты ҡатыландырырға кәрәк", - тип белдерҙеләр парламентта.

8

Мәғариф

"Киске Өфө"гәзитенең махсус бите

29 август - 4 сентябрь
(урағай - һарысай)

2025 йыл

№34 (1178)

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

ИҒТИБАР: ҮҘГӘРЕШТӘР!

Илдәге мәғариф системаһының даими рәүештә үҙгәрештәргә, реформаларға дусар ителеүе тураһында беләбеҙ инде. Яҡшымы был, насармы, киләсәк күрһәтер. Тағы яңылыҡтар бар, иғтибар итегеҙ:

● ***Рәсәйҙә башланғыс класс уҡыусылары өсөн өйгә эш нормалары раҫланды.*** 2025 йылдың 1 сентябренән 1-4-се класс уҡыусылары өсөн өйгә эш ваҡыты раҫланған нормаларынан артмаҫҡа тейеш. Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы документынан күренеүенсә, беренсе класта уҡыусылар өйгә эш өсөн 1 сәғәт, икенсе һәм өсөнсө кластарҙа - 1,5 сәғәт, ә дүртенсе класта 2 сәғәт ваҡыт сарыф итергә тейеш. Бынан тыш, мәктәптәр һәр кластың барлыҡ фәндәр буйынса өйгә эштең күләмен контролдә тоторға тейеш. Шул уҡ ваҡытта өйгә эште ағымдағы дәрестә бирергә кәңәш ителә, уҡытыусы электрон журналға мәғлүмәтте уҡыу көнө тамаланғансы уҡ яҙып ҡуйырға бурыслы. Оҙайлы әҙерлек талап иткән эште үтәү өсөн уҡыусыларға әҙерләнергә етерлек ваҡыт бирергә кәрәк.

● ***Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы 1- 4-се класс уҡыусыларының аҙнаһына нисә сәғәт уҡырға тейешлеген дә билдәләне.*** 2025 йылдың 1 сентябренән беренсе класта йөкләнеш күләме аҙнаһына 20-21 сәғәт, икенсе-дүртенсе кластарҙа 23-26 сәғәт тәшкил итәсәк. Документҡа яраша, дүрт уҡыу йылында 5 көнлөк йәки 6 көнлөк уҡыу аҙнаһында дәрестәр һаны 2966 сәғәттән кәм һәм 3305 сәғәттән артыҡ була алмай.

● ***1 сентябрҙән 5-7-се кластар яңы тарих дәреслектәренән уҡый башлай. Был хаҡта дәүләт тарих дәреслектәре өсөн яуаплы секретарь Владислав Кононов хәбәр итте.*** Уның һүҙҙәренсә, Рәсәй Мәғариф министрлығының яңы дәүләт линейкаһына күсеү ике йылға билдәләнгән. 2026-2027 уҡыу йылынан 8-9-сы кластар өсөн дәреслектәр индереү планлаштырыла. "Бөтә дәреслектәр Федераль дәреслектәр исемлегенә ингән, мәктәп йәки төбәк быйылдан уҡ ошо дәреслектәргә күсергә мөмкин", - тип Владислав Кононовтың һүҙҙәрен килтерә ТАСС. Тарихты өйрәнеү 5-се класта Боронғо донъя тарихынан башлана, тип иҫкә төшөрҙө ул. 6-сы кластан уҡыусылар Дөйөм тарихты һәм Рәсәй тарихын эҙмә-эҙлекле өйрәнеүгә күсә. Бөтә дәреслектәрҙә лә "Уҡытыусыға һәм уҡыусыға" тигән махсус бүлек һәм Рәсәй музейҙары сайттарына һылтанмалар менән "Килеп ҡарарға тәҡдим итәбеҙ" рубрикаһы бар.

● ***Рәсәйҙә белем биреү эшмәкәрлеген тормошҡа ашырыусы учреждениелар өсөн дәреслектәрҙең федераль исемлеге раҫланды.*** Бөтә предметтар буйынса берҙәм мәктәп дәреслектәре 2026 йылда әҙер була һәм мәктәптәргә таратыла. 2025 йылдың 1 сентябренән мәктәптәрҙә 5-9-сы кластар өсөн яңыртылған берҙәм тарих дәреслеге индерелә. Шулай уҡ әлеге ваҡытта 2026/27 уҡыу йылынан мәктәптәрҙә уҡытыу өсөн 9-11 кластарға тәғәйенләнгән йәмғиәтте өйрәнеү буйынса яңы курс әҙерләнә.

● ***Башҡортостан мәктәптәрендә 6-8-се кластар өсөн йәмғиәтте өйрәнеү дәрестәре туҡтатыла.*** Ҡарар федераль кимәлдә ҡабул ителгән. "Әйткәнебеҙсә, киләһе йылдан йәмғиәтте өйрәнеү фәне 9-сы кластан уҡытыла башлай, ә ҡалған ваҡыт илебеҙ тарихын өйрәнеүгә бүленә", - тине Рәсәйҙең мәғариф министры Сергей Кравцов ил Хөкүмәтендә 2024-2025 уҡыу йылы йомғаҡтарына арналған брифингта. Хәбәр ителеүенсә, йәмғиәтте өйрәнеү фәне 2026 йылдың 1 сентябренә тиклем 8-се класс программаларында ҡала.

● ***"2026-2027 уҡыу йылынан мәктәптәрҙә Рәсәйҙең рухи-әхлаҡи мәҙәниәте" предметы уҡытыла башлай.*** Ҡарар федераль кимәлдә ҡабул ителгән. Был фән уҡыусыларҙа Рәсәйҙең традицион ҡиммәттәренә нигеҙләнгән ҡарашын формалаштырыуға булышлыҡ итергә тейеш, тип белдерҙеләр Рәсәйҙең Мәғариф министрлығында. Билдәләүҙәренсә, белем биреү программаһына экспертиза башланған. Атап әйткәндә, улар дәүләт, йәмәғәт һәм мәҙәниәт эшмәкәрҙәренең, шулай уҡ ғалимдарҙың һәм хәрбиҙәрҙең, шул иҫәптән МХО геройҙарының тормош юлдарын һәм ҡараштарын өйрәнә.

● ***Рәсәй Мәғариф министрлығында мәктәп каникулдары көндәре буйынса тәҡдимдәр әҙерләнде.*** Шулай итеп, сиректәр буйынса уҡыу системаһында каникулдар түбәндәге көндәрҙә:

- 2025 йылдың 25 октябренән 2 ноябренә тиклем (3 һәм 4 ноябрҙәге байрам көндәрен иҫәпкә алып);
- 2025 йылдың 31 декабренән 2026 йылдың 11 ғинуарына ҡәҙәр;
- 2026 йылдың 28 мартынан 5 апреленә тиклем;
- 2026 йылдың 27 майынан 31 августына ҡәҙәр.

АФАРИН!

Республика уҡыусылары халыҡ-ара олимпиадаларҙа йыш ҡына еңеү яулай. Мәҫәлән, Өфөнөң 58-се лицейын тамамлаған Тимур Ғарифуллин 2-9 августа Пекинда үткән яһалма интеллект буйынса халыҡ-ара олимпиадала еңеү яуланы. Ул юғары класс уҡыусылары араһында алтын миҙалға лайыҡ булды. Яҙын Тимур "Яһалма интеллект" буйынса милли технологик олимпиада (НТО) финалында еңгәйне.

Республика инженер лицей-интернаты директоры Азамат ЯМҒЫРСИН ошондай уңыштарға булышлыҡ итеүсе факторҙар тураһында һөйләне:

ОЛИМПИАДАЛА ЕҢЕҮ ЯУЛА ЛА...

юғары уҡыу йортона имтиханһыҙ ин!

- Төбәк уҡыусыларының халыҡ-ара олимпиадаларҙа еңеүе һәләтле балаларға ярҙамдың юғары кимәлен күрһәтә. Быйыл июнь айында республика уҡыусылары химия буйынса халыҡ-ара олимпиада призерҙары булды. Белеүегеҙсә, химия буйынса халыҡ-ара олимпиадаларҙа Республика инженер лицей-интернатын тамамлаған Вадим Харисов дүрт тапҡыр еңде.

Шулай итеп, беҙ һәләтле балаларға ярҙам итеү принциптарының тормошҡа ашырылыуын, уларҙың фән һәм технологияның алдынғы йүнәлештәренә йөҙ бороуын күрәбеҙ. Был модель республикала һәм илдә, РФ Президентының Рәсәй Федерацияһы үҫешенең милли маҡсаттары тураһындағы указына ярашлы, бик яҡшы төҙөлгән, унда 2030 йылға тиклем һәләтле балаларҙы һәм йәштәрҙе асыҡлау, уларға ярҙам итеү һәм үҫтереүҙең һөҙөмтәле системаһын тәьмин итергә кәрәк, тигән төп бурыс аныҡ билдәләнгән. Был - республикабыҙҙа "Аврора" таланттарҙы үҫтереү үҙәгенең, мәғариф учреждениеларының, Өфө дәүләт нефть техник һәм Өфө фән һәм технологиялар университеттарының етди эш һөҙөмтәһе.

Төрлө кимәлдәге олимпиадаларҙа еңеүҙәре, юғары уҡыу йорттарына имтихандарһыҙ инеү мөмкинлеге уҡыусыларҙың олимпиада хәрәкәтенә ҡыҙыҡһыныуын арттыра. Балалар төрлө ярышта үҙҙәрен һынап ҡарарға һәм күрһәтергә ынтылып тора. Беҙҙең бурыс - 11-се класты тамамлаусыларҙың күпселеген халыҡ-ара олимпиадаларҙа, бөтә Рәсәй уҡыусылар олимпиадаһында, БР һәм РФ кимәлендәге олимпиадаларҙа еңеүҙәр иҫәбенә вуздарға имтиханһыҙ инеү статусына өлгәштереү. Был статусты алғас, Рәсәй Федерацияһындағы теләгән юғары уҡыу йортона инергә, юғары стипендиялар алырға мөмкин. Әйткәндәй, илдә иң юғары стипендия - ул Өфө дәүләт нефть техник университетында, шуға ла беҙҙең олимпиадасыларҙың күбеһе унда уҡырға инә.

Беҙ ата-әсәләргә һәм уҡыусыларға 1-се кластан башлап олимпиадаларҙа ҡатнашырға кәңәш итәбеҙ. Барыһын да белергә, үҙенде төрлө йүнәлештә һынап ҡарарға кәрәк. Бер фән өлкәһендә алған күнекмәне икенсе предметта ла ҡуллана алаһың бит. Олимпиада хәрәкәтенең киләсәге ҙур. Ошоноң иҫәбенә беҙ хеҙмәт баҙарында талап ителгән буласаҡ белгестәрҙе асыҡлайбыҙ, унда көндән-көн яңы ҡатмарлыҡтар барлыҡҡа килә, уларҙы күберәк күнекмәләргә һәм компетенцияларға эйә булғанда ғына хәл итергә була.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Башҡортостан Бөтә Рәсәй уҡыусылар олимпиадаһының йомғаҡлау этабында иң көслө ун төбәк иҫәбенә инә. Бынан тыш, республикала төрлө кимәлдәге олимпиада еңеүселәренә һәм уларҙы әҙерләгән педагогтарға түләүҙәр ҡаралған. Атап әйткәндә, еңеүселәр һәм уларҙың уҡытыусылары 100 мең һум ала (призерҙар 60 мең һум). Башҡортостан олимпиадаһында еңеүселәргә 10 мең һум түләнә, уларҙың исемлеге РФ Мәғариф һәм фән министрлығы тарафынан раҫлана.

Башҡортостанда 2019 йылдан уҡыусыларҙың интеллектуаль һәм ижади потенциалын үҫтереү, уларҙы олимпиада хәрәкәтенә йәлеп итеү менән шөғөлләнгән "Аврора" таланттарҙы үҫтереү үҙәге эшләй.

✓ ***Буллинг совет мәктәбендә лә булған, хәҙергеһендә лә бар. Тәүгеһендә тәрбиәгә ҙур урын бирелгән, йәмғәт ойошмалары ла үҙ өлөшөн индергән, етмәһә, барыһы ла социаль йәһәттән дә тиң булған.***

ЗАМАН БӘЛӘҺЕ

Август аҙағы, йәйге оҙон каникулдар ахыры булараҡ, мәктәпкә әҙерлек кеүек күңелле мәшәҡәттәрҙе лә үҙ эсенә ала. Тик "мәктәпкә әҙерлек" тигәндә арманһыҙ булып магазиндар ҡыҙырып, баланы баштан-аяҡ кейендереп, уңайлы биштәрҙе дәфтәр-ҡәләм менән тултырыу кеүек бурыстарҙы ғына күҙ уңында тотабыҙ. Хатта белгестәр уҡыу кәрәк-ярағы күпмегә төшкәнен йыл һайын яңынан иҫәпләп сығарырға ла йыбанмай.

Өлкәндәрҙең иғтибарынан бер генә нәмә ситтә ҡала: бала үҙе мәктәпкә ниндәй күңел менән бара? Уны бер нәмә лә борсомаймы? Уны унда бер кем дә йәберһетмәйме? Ул һеҙгә бар нәмәне лә нисек бар, шулай һөйләйме? Һеҙ, атай-әсәйҙәр, тантаналы линейкаларҙа ҡыңғырауҙар зыңлағансы, балағыҙ менән буллинг һәм бындай хәлгә тарый ҡалғанда нимә эшләргә кәрәк икәнлеге тураһында һөйләштегеҙме әле?

МӘКТӘП ЙЫЛДАРЫ...

хәтерҙә күңелле булып ҡалһын

Мәктәп - һәр кемдең бала саҡта үтә торған тормош этабы. 11 йыл буйына белем эстәп кенә ҡалмай ул унда, төрлө сифаттарын аса, таланттарын үҫтерә, башҡаларға ҡарап үҙендә яҡшы, ҡайһы саҡта насар ғәҙәттәр тәрбиәләй, дуҫлашырға, теге йә был ситуацияға ираҡлашырға, уны хәл итергә һ.б өйрәнә. Заманалар менән бергә белем биреүгә булған талаптар, стандарттар үҙгәрһә лә, "мәктәп", "уҡыусы", "уҡытыусы" тигән төшөнсәләр үҙгәрешһеҙ ҡала һәм уларға "буллинг" тигәне лә эйәреп йөрөй. Быға тиклем бындай йәберһетеүҙәр баланы көслөрәк кенә итә тигән ҡараш йәшәй ине. Бөгөн иһә психологтар, педиатрҙар был хәлдәрҙе баланың нескә психикаһы күтәрә алмауы ихтималлығы хаҡында күп һөйләй, уларға ярҙам итергә саҡыра һәм был тап өлкәндәрҙең бурысы тип иҫкәртә.

Шуға ла беҙ, бармы ул буллинг, әллә юҡмы, уға нимә сәбәпсе, кемде йышыраҡ йәберләйҙәр, тигән һорауҙарға яуап эҙләргә йыйынмайбыҙ. Буллинг совет мәктәбендә лә булған, хәҙергеһендә лә бар. Тәүгеһендә тәрбиәгә ҙур урын бирелгән, йәмғәт ойошмалары ла үҙ өлөшөн индергән, етмәһә, барыһы ла социаль йәһәттән дә тиң булған, шуға буллинг та бик тамырланып китә алмағандыр. Хәҙергеһе иһә уҡытыу системаһынан тәрбиәне бер алып ташлайҙар, бер кире ҡайтаралар. Уҡыусылар үҫкән ғаиләләрҙең матди хәле лә төрлө, ата-әсәһенең ниндәй әхлаҡи ҡиммәттәрҙе алға һөрөп йәшәүе лә роль уйнай, үкенескә, бөгөн текә кеҫә телефоны булмағаны өсөн дә бала кәмһетелеүгә дусар булыуы ихтимал. Үҙ-үҙенә ҡул һалыусы йәки ҡоралға тотоноп, мәктәбенән үс алыусы үҫмерҙәр ҙә йылдар буйына буллинг ҡорбаны булыуы асыҡланып тора бит. Һәр хәлдә, был мәсьәләнең осо-ҡырыйына сығыуы бик ауыр. Тимәк, буллинг күренеше ҡайҙалыр сит илдә түгел, һинең балаң уҡыған мәктәптә лә бар һәм һинең улың/ҡыҙыңдың ҡорбан ролендә ҡалыуы бик мөмкин.

Шулай итеп, кемделер кәмһетәләр, үсекләйҙәр, иҫәнләшмәйҙәр, бер парта артында ултырмайҙар һәм янында тормайҙар, әйберен йә тартып алалар, йә йәшерәләр, йә боҙалар, үҙенә төртәләр, һуғалар, төрлөсә ҡурҡыталар икән, был - йәберһетеү, буллинг тип атала. Быны бер генә кеше йәки бер кеше етәкселеге аҫтында тотош төркөм башҡара һәм йәберләүҙәр даими була. Ҡылыҡтарын аҡларлыҡ әҙер яуаптары ла бар, мәҫәлән: "Ул беҙгә оҡшамай", "Үсекләйбеҙ генә лә инде", "Был уйын", "Шаярттыҡсы". Ундайҙар менән бәхәсләшергә, мәҫәлән, әйткән һүҙенән һуң аҡланырға ("Мин һимеҙ түгел, эре һөйәкле", "Хәҙер ошондай кеймдәр модала") кәрәкмәй. "Үҙең иҫәр!" тип, уның "шаярыу" кимәленә төшөп тә һүҙ әйтмәҫкә. Ҡурҡытырға тырышырға ла кәрәкмәҫ ("Уҡытыусыға әйтәм!"). Ишетмәмешкә һалышаһың икән, асыуыңды һиҙҙермәҫкә, ҡыҙармаҫҡа, күҙҙәрҙе йәшерәҫкә, иламаҫҡа. Ғөмүмән, психологтар был йәберләү/үсекләү/кәмһетеүҙәрҙе туҡтатам тип тырышыуҙан файҙа юҡ, ти. Сөнки агрессорға һинең тышҡы ҡиәфәтең дә, кейемең дә һ.б кәрәк тә түгел, уға бары һине нисектер сығырыңдан сығарып, ошонан ҡәнәғәтлек алыу мөһим. Әгәр ҙә иғтибар итмәйһең икән, уға бындай ҡорбан менән ҡыҙыҡ түгел. Йәлап ул үҙенә башҡа ҡорбан табасаҡ. ***Әммә һиңә һуҡһалар, әйбереңде, кейемеңде боҙһалар, тыныс ҡына ашарға, туалетҡа барырға ҡамасауласалар, хатта янаһалар, был ябай ғына йәберләү түгел. Был - закон тарафынан тыйылған ғәмәлдәр. Уларҙы түҙергә кәрәкмәй, ата-әсә, уҡытыусы ярҙамынан тыш бындай кәмһетеүҙәрҙе туҡтатырға булмаясаҡ.***

Йәберһетеүсе, кәмһетеүсе ролендә уҡытыусы ла тора ала, бала был турала ла белһен. Буласаҡ имтихан менән уҡыусыны ҡурҡытып торһаң, ул уға яҡшыраҡ әҙерләнәсәк, тигәнгә инанған, ата-әсәләр йыйылышында: "Балағыҙ имтихандан да ҡурҡмай ҙа ул", - тип сығыш яһаған, йәиһә "Вәкил - алйот, Йәмилә - ялҡау, Зөлхиә - яй, мыштыр һ.б" тип әйткән уҡытыусынан тура мәғәнәһендә ҡасырға кәрәк. Сөнки һәр бала мәктәпкә ҡыуанып йөрөргә тейеш. Кеше аңының бер үҙенсәлеге бар: ул стресс кисергәндә яңы мәғлүмәт үҙләштерә алмай. Гел ҡурҡыу, хәүеф кисергәндә уҡып булмай, бар көс үҙеңде яҡларға тырышыуға ғына китеп торасаҡ.

Бала өйгә ҡайтып, уны йәберләүҙәре хаҡында һөйләй икән, бының миңә ниндәй ҡағылышы бар, тимәгеҙ. Бер нәмә лә һөйләмәй, тик нимәгәлер борсолғанын һиҙәһегеҙ икән, шулай уҡ тыныс ҡына йөрөмәгеҙ.

Нимә эшләргә һуң?

- Иң тәүҙә уны иғтибарлап тыңлағыҙ, "Кит әле!", "Юҡты һөйләмә!", - тип, үҙенә йомолорға мәжбүр итмәгеҙ.
- Фактттар туплағыҙ: нимә, нисек, ҡасан булған, кемдәр ҡатнашҡан, был хәл йыш ҡабатланғанмы һ.б.
- Класс етәксеһе, директор менән мәктәпкә барып һөйләшегеҙ. Кәрәк икән, рәсми мөрәжәғәт яҙығыҙ.
- Әгәр ҙә вәғәҙә итеп тә, мәктәп етәкселеге бер нәмә лә эшләмәй икән, ҡала-район мәғариф идаралыҡтарына, министрлыҡҡа, прокуратураға, Рособрнадзорға яҙығыҙ.

Нимә эшләргә ярамай?

- "Үҙең ғәйепле", тигәнерәк һүҙҙәр әйтергә.
- "Иғтибар итмә" тип, проблеманы юҡҡа сығарырға тырышырға.
- "Элек беҙҙең әсәйҙәр бер нәмә белмәй ине", тип, яуаплылыҡты балаға һалырға. Буллингты бала үҙе туҡтата алмай.
- Хәл "төпкә" төшөп китмәһен тип ҡурҡырға. Бында иң ҡурҡынысы - ҡул ҡаушырып ултырыу.

Ярҙам кәрәкһә:

"Травли нет" ҡыҙыу линияһы эшләй (8 800 500 44 14), шулай уҡ травлинет.рф сайтында ла терәк-ярҙам таба алаһығыҙ.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

Ғәлиә ВӘЛИЕВА, Рәсәйҙең мәғариф алдынғыһы: Мин 35 йыл башланғыс кластар уҡытыусыһы булып эшләнем. Ул саҡта балалар ҙа башҡа ине, һеҙгә еңел булған, тиҙәр хәҙер, ғәҙәттә. Юҡ шул, заманалар, стандарттар, талаптар, ҡағыҙ эшенең һәм эш хаҡының күләме бында бер ниндәй ҙә роль уйнамай. Уҡытыусы үҙ һөнәрен яратырға һәм уҡыусыларының киләсәге уның ҡулында икәнен иҫенән сығармаҫҡа тейеш. Юғиһә, ҡырҡ ата балаһын бер класҡа йыйып ултыртыу ғына аҙ, уларҙың барыһы ла үҙен яҡшы тойорлоҡ, тыныс ҡына белем алырлыҡ мөхит булдырыу - уның бурысы.

Көслөрәк холоҡло бала тиҫтерҙәрен йәберләй башлағанда ла мәлендә генә һиҙеп ҡалып, бер-икене әйтһәң, хатта уға ҡарап, кинәйәләп кенә төрттөрһәң дә шунда уҡ тыйыла торғайнылар. Бала күңеле һиҙгер бит ул, класта төрлө уҡыусы була, ҡайһыһына берәй ҡылығы өсөн үҙең эстән саҡ ҡына көйөп, ҡырыраҡ ҡараһаң, шуны тойоп та ала, йәберләй ҙә башлай. Шуға ла һәр береһенә тигеҙ ҡарап, уларҙы тигеҙ яратырға һәм ҡабул итергә кәрәк. Йәлап күҙәтеп, кем нимәгә отҡорораҡ, сосораҡ, шул йүнәлештә эштәр ҡушыбыраҡ, бер коллектив итеп көйләп алаһың инде.

Бер ниндәй ҡултамға йыймай, походтарға сығып китә инек. Хәҙерге балаларҙы ҡайҙалыр алып сығыр өсөн йөҙ рөхсәт кәрәк. Шул сәйәхәттәрҙән күпме бала класташтары алдында бер башҡа үҫеп ҡайта ине, уҡыуҙа насарыраҡ өлгәшһә лә, кәрәк саҡта ауырлыҡтар алдында баҙап ҡалмауы, усаҡ яға, компас менән ҡуллана белеүе һ.б. уларҙың абруйын күтәрә ине. Мәктәп янында баҡса ла үҫтерҙек балалар менән, малайҙар үҙҙәре уны кәртәләп тә ҡуйғайны. Шул уҡыусыларымдың бөгөн барыһының да ауылда гөрләтеп донъя көтөүенә ғорурланып ҡарап йөрөйөм.

Буллинг мәсьәләһенә килгәндә, унда ҡорбандан башҡа, кешене кәмһетерлек, йәберләрлек һүҙ әйтерлек бала ла бар, уның ошо ҡылығына ҡушылып китеүселәр бар. Ундай агрессия уларҙың күңеленә ҡасан оялаған һуң, аптырарлыҡ. Яратырға өйрәтәйек балаларҙы, үҙҙәрен дә, кешеләрҙе лә, бер-берегеҙгә дуҫ, тип аңлатайыҡ өйҙә лә, мәктәптә лә. Балаларыбыҙҙы үҙебеҙ ҙә яратайыҡ. Был сирҙе шул яратыу һәм һөйөү менән генә еңеп булалыр ул.

Әлфиә ИШБУЛАТОВА, әсәй: Үкенескә, был проблема беҙҙең ғаиләгә таныш. Уҡыусы саҡта миңә мәктәп алыштырырға тура килде. Улай ғына ла түгел, беҙ бәләкәй ҡаланан ҙурына күстек. Класташтарым мине үҙ итмәне, "ауыл" тип кенә ебәрә инеләр. Һәм күҙ алдына килтерегеҙ, ошо "ауыл" тәүге контроль эштәрҙе үк "бишле"гә эшләй башлай. Улар тап ошоно күтәрә алманы, ахыры. Минең менән һөйләшмәйҙәр, бер парта артында ултырмайҙар һ.б. Тәбиғәтем менән бик түҙемле кешемен, йомоҡмон, шаулап йөрөмәйем, барыһын да күңелемә йыям. Түҙҙем-түҙҙем дә, бер көндө мәктәптән сыҡтым да киттем. Минең юғалғанымды аңлап, эҙләп таба алмағас, уҡытыусылар әсәйемә шылтыратырға мәжбүр булған. Әсәйем ошо ваҡиғанан һуң ғына мине мәктәптә рәнйетеүҙәрен белеп ҡалды һәм килеп, уҡытыусы, директор һәм класташтарым менән һөйләште. Артыҡ бер нәмә лә әйтмәне кеүек: нисек яңы мөхиткә, сит кешеләр араһына эләккән баланың уны күрмәмешкә һалышыуҙарын кисереүе, уға ауыр булыуы тураһында ғына һөйләне. Әммә балалар ошонан һуң башҡаса насар ҡыланманы.

Шуны ла әйтергә кәрәк, әсәйем үткәргән аңғәмәне класс етәксеһе лә үткәрә ала ине, хатта тейеш ине. Нисек кенә булмаһын, кешелеклелек сифаттарын тәрбиәләү, баланың күңеленә изгелек орлоҡтарын "сәсеү" ул борон-борондан мөғәллимдең, остаздың бурысы. Ирем дә бала саҡта мәктәптә буллинг менән осрашҡан, уны иһә физкультура уҡытыусыһы башҡалар алдында даими рәүештә һүҙ менән кәмһеткән.

Буллингтың беҙҙең ғаиләгә ҡағылышы ошоноң менән тамамланһа икән. Башланғыс класта һәләтен күреп, улыбыҙҙы математика йүнәлешле класҡа күсерҙеләр. Баштан уҡ бергә уҡый башламағас, уҡыусылар уны шулай уҡ ҡабул итмәне. Айырыуса бер малай йәберләй, әйберен ала, үсекләй, төртөп ебәргән саҡтары булды. Баштан үткәс, мин был хәлде үҙ яйына ҡуя алмай инем. Директорға барҙым. Был малай уға бәйләнмәй башланы, әммә икенсе, өсөнсө баланы шулай йәберләп, уныһының башын ярып ҡуйҙы. Шуға ла бындай хәлгә тарыһағыҙ, баланың йәберләнеүе хаҡында мәғлүмәтте йыйырға кәрәк: ата-әсәһе, уҡытыусы менән яҙышып һөйләшәһегеҙ икән, скриндарын һаҡлағыҙ, фото, видео ла дәлил, улар полицияға кәрәк булыуы бар. Иғтибарлы булығыҙ, зинһар, мәктәптә балағыҙҙы йәберләмәйҙәрме, кәйефе нисек - һорашып тороғоҙ.

Ләйсән НАФИҠОВА әҙерләне.

✓ *Социализм төҙөр өсөн илдә айырым шарттар - юғары иҡдисади үҫеш, бынан тыш, эшсе халыҡтың аң-дәрәжәһе етерлек кимәлдә булырға тейеш. Ә Африка илдәрендә, башлыса, тәүтормош община ҡоролошо хөкөм һөрә бит әлегә.*

ХӘТЕРКИТАП

ДӘРЕСТӘ ЙОҠОҺО КИЛМӘҺӘ...

тимәк, балаға ҡыҙыҡ

Үткән йылдарҙың береһен педагог һәм остаз йылы тип тә атағайнылар бит әле. Эйе, уҡытыусыларыбыҙҙы бер ҡасан да иғтибарыбыҙҙан төшөрөп ҡалдырырға тейеш түгелбеҙ шул. Уҡытыусының ниндәй булырға тейешлеге хаҡында, әлбиттә, күп яҙалар. Урта һәм юғары уҡыу йорттарында буласаҡ мөғәллимдәр әҙерләү эшендә ғүмер буйы эшләгән ғалимдарыбыҙ ҡулланған алымдар ҙа бихисап булыуына иманым камил. Үҙем уҡытыусы һөнәренән бөтөнләйгә алыҫ торам, әммә ошо хаҡта йыш ҡына уйланып алам. Бер аҙ фекерем менән дә бүлешмәксе булдым әле. Был һөнәр эйәләренең ҡайһылайыраҡ сифатта булырға тейешлеге хаҡында нәсихәт уҡырлыҡ кимәлдә түгелмен, әммә үҙемде элек мәктәптә уҡытҡан бәғзе бер ағай, апайҙар миҫалында уларҙы нисегерәк итеп күрергә теләүем тураһындағы ошо яҙмам гәзит уҡыусының күңеленә ятыр тигән өмөттәмен.

Ауылыбыҙҙа башланғыс мәктәпте уҡып бөткәс, өс йыл күрше Аҡморон ауыл урта мәктәбендә, унан Баймаҡ интернатында уҡығайным. Ярайһы ғына зиһенле бала булғанмындыр, күрәһең (маҡтанып әйтмәйем, әстәғфируллаһ): үҙемде уҡытҡан бөтә уҡытыусыларым, уларҙың нисек дәрес алып барғандары бөгөнгөләй күҙ алдымда. Шулар араһынан бер нисәүһен айырып, иҫкә алып китмәксемен.

Уҡытыусы дәресте бик мауыҡтырғыс итеп алып бара белергә тейештер, тип һанайым үҙем электән. Аҡморон мәктәбендә уҡыған саҡта тарих фәнен беҙҙә Сабур Хәйрулла улы Ғәлиев алып барҙы. Был ағайҙың һәр дәресен дауамлы, ҡыҙыҡлы кинофильмдың сираттағы серияһын көткәндәй көтөп ала торғайным. Хәс тә теге Штирлиц хаҡындағы фильмды ҡараған һымаҡ ҡабул итә инем. Шул дәрестәрҙәге айырым эпизодтарҙың бер нисәүһен килтерәйем әле. "Урта быуаттар тарихы" дәрестәренең береһендә Сабур ағайҙың Рим папаһы хаҡында һөйләгәне хәтеремдә бик яҡшы һаҡланып ҡалған. "Күҙ алдына килтерегеҙ әле, балалар: Рим папаһы үҙ халҡында шундай ҙур абруй ҡаҙанған, хатта уның аяҡ кейемен үбеү бәхетенә ирешкән кеше лә оло ғына дәрәжәгә эйә булған..." Иғтибарыбыҙҙы уҡытыусыбыҙға тағы ла нығыраҡ йүнәлтәбеҙ. Сабур ағай мут йылмайып, бармаҡ янаған һымаҡ ишаралай: "Һин уның менән не шути, ул - Рим папаһының түфлиһен үпкән кеше, йәнәһе..." Беҙ гөр килеп көлөшәбеҙ, ул бер аҙ тынысланғаныбыҙҙы көтөп тора. Артабан уны йотлоғоп тыңлайбыҙ. "Халыҡ ғибәҙәт ҡылһын өсөн, руханиҙар ҙурҙур ғибәҙәтханалар - соборҙар һалдырған..." Шул саҡ балалар бер-береһе менән быш-быш һөйләшә башлай. Уҡыусыларҙың ни өсөн шыбырҙашҡанын шунда уҡ һиҙгән Сабур ағай, һөйләүенән бер аҙ ғына туҡтап, йәнә йылмайып, беҙгә ҡарап тора бирә, тағы иғтибарыбыҙҙы йәлеп итә: "Сабур түгел, балалар, ә - собор..." Беҙҙең гөр килеп көлөшкәнебеҙгә ҡәнәғәт йылмая, хатта беҙгә ҡушылып көлөп тә ала.

Ағайыбыҙҙың Ғәрәп хәлифәлеге тураһында һөйләгәне лә иҫемдә. Бәйғәмбәр Мөхәммәттең (с.ғ.с), мөшриктәргә ҡаршы көрәше, ғәрәп илдәрен Ислам динендә берләштереүе хаҡында шундай ҡыҙыҡлы итеп һөйләгәйне ул. Аллаһтың берлеге, үҙенең Аллаһ илсеһе булыуын "Лә иләһә иллəAллаһ Мөхәммәд расүлуллаһ" тип кешеләргә дәғүәтләгән тигән һүҙҙәрҙе тарих уҡытыусыһы ауыҙынан ишетеү (илдә көслө атеистик пропагандалау барған СССР осоронда!) минең өсөн айырыуса ҡыҙыҡлы булды. Сөнки ошо шәһәҙәне мин тик өйҙә атайым менән әсәйемдән генә ишетә инем.

"Яңы донъя тарихы"нда илдәрҙә социалистик ҡоролош төҙөү хаҡында дәрес бара. Рәсәй һәм башҡа бер-нисә дәүләт тәү тормош ҡоролошонан феодаль, унан капиталистик фазаға етеп, революцияға бөтә шарттар өлгөргәндән һуң ғына социализмға килеүе хаҡында һөйләй уҡытыусыбыҙ. Киләсәктә бөтә Ер йөҙөндә лә, нәҡ беҙҙең илдәге һымаҡ, социализм, унан коммунизм төҙөләсәк икән... Ә Монголия, Вьетнам һымаҡ бәғзе бер илдәр капитализм фазаһын үтмәйенсә, феодализмдан туп-тура социализмға күскән...

Сабур ағайыбыҙ һүҙенең ошо урынына еткәс, уны иғтибар менән тыңлап ултырған бер алдынғы уҡыусы, ҡул күтәреп, һорау бирә: "Сабур Хәйруллович, ә бына Африка илдәре лә хәҙер колонизаторҙарҙан ҡотолоп, үҙаллылыҡ яулап алды бит. Ни өсөн улар социализм төҙөмәйҙәр икән?" Ағайыбыҙ был һорауға ошолайыраҡ итеп яуап бирә: "Социализм төҙөр өсөн илдә айырым шарттар - юғары иҡдисади үҫеш, бынан тыш, эшсе халыҡтың аң-дәрәжәһе етерлек кимәлдә булырға тейеш. Ә Африка илдәрендә, башлыса, тәүтормош община ҡоролошо хөкөм һөрә бит әлегә. Улар менән нисек социализм төҙөмәк кәрәк? Был илдәрҙәге уҡый-яҙа ла белмәгән, ярым яланғас кешеләрҙең ни ашауҙарына ғына иғтибар итәйек: уларҙың бит туҡланғаны - баҡамы, ҡортмо, йыланмы, чёртмы..." - тип теҙеп алып китә. Бына шундай оҫта итеп һөйләгән уҡытыусыны нисек тыңламай ултырыу мөмкин!

Әбаймаҡ интернат-мәктәбендә уҡыған саҡта беҙҙә ("Кеше" буйынса) биология дәресен Айҙар Йыһанша улы Хөсәйенов алып барҙы. Уның дәрестәрен дә нәҡ алда әйтелгән ағайҙыҡы һымаҡ көтөп ала инек. Балаларға аңлайышлы булһын өсөн кеше тәнендәге биохимик процестарҙы бик уңайлы ғына итеп, тормош күренештәре менән сағыштырыу һәләте бар ине унда. Мәҫәлән, тәндәге иммунитет хаҡында беҙгә ул былай тип аңлатты: "Белеүебеҙсә, берәү ҡыҙылса, йә булмаһа ел сәсәге (ветрянка), йә иһә башҡа берәй инфекцион сир менән ауырып, йүнәлде икән, был кешелә шул инфекциялярға ҡаршы иммунитет барлыҡҡа килә, тибеҙ. Быны нисек аңларға? Нимә ул иммунитет? Иммунитет - организмдың инфекцияға ҡаршы тороу һәләтлеге. Ул нисек беҙҙең тәнебеҙҙә барлыҡҡа килә һуң? Ябай итеп аңлатыу өсөн, тормошобоҙға күҙ һалайыҡ. Әйтәйек, берәү һиңә һөжүм итте икән. Аңғармаҫтан ташланып, һине бер талай дөмбәҫләп тә алды, ти. Әммә икенсе мәртәбә ул кеше осрай икән, был юлы һин уның һөжүмен йыуаш ҡына ҡаршыламайһың бит: ҡулыңа таяҡ-маҙар тотоп, әҙерләнеп тораһың... Ә теге кеше, һинең әҙерлегеңде күреп, теймәй үтеп китә. Һөжүм итә ҡалған хәлдә лә һинән лайыҡлы "сдача" аласаҡ... Тимәк, был кешегә ҡарата һинең инде "иммунитетың" бар... Кеше тәнендә лә нәҡ ана шулай. Берәй инфекция килеп эләкһә, организмда, ситтән ингән вирус һәм башҡа зарарлы агенттарға ҡаршы "антитело"лар бүленеп сыға башлай. Инде унан һауығып киткән тән киләһе мәртәбә ошо төр микроорганизмға һис кенә лә бирешмәй, йәғни, иммунитетлы була. Һәр төрлө ауырыуҙарға ҡаршы вакцина яһау ҙа тап ана шундай механизм буйынса бара... Барыбыҙға ла мәғлүм булыуынса, ҡырҡ беренсе йыл Гитлер Германияһы аңғармаҫтан илебеҙгә һөжүм иттте. Ғәйәт ауыр һуғыштан һуң, ҡырҡ бишенсе йыл, беҙҙең Ҡыҙыл Армия фашистарға ҡарағанда мәртәбәләргә көслөрәк тә булып киткән бит. Шунан бирле империалистар хәҙер СССР-ға ҡаршы ҡорал күтәрергә ҡурҡа. Был да нәҡ ана шул иммунитет һымаҡ инде ул..." Айҙар ағайҙың бына ошолай фәлсәфәләүен йотлоғоп тыңлағаным хәтеремдә.

Шул уҡ интернат-мәктәптә Гөлсара Искәндәр ҡыҙы Йәнтүрина апай беҙҙе химиянан уҡытты. Ул да үҙенең дәрестәрен бик ҡыҙыҡлы ҡора ине. Матдәләрҙең молекуляр төҙөлөшөн аңлатҡандары әле булһа иҫемдә. Һыу молекулаһы хаҡында һөйләгәндә: "Күҙ алдына килтерегеҙ, балалар, бына мин - кислород. Кислород атомы - ике валентлы, - тип ике ҡулын ике яҡҡа йәйеп ебәрер ине. - Һәр бер ҡулыма берәр валентлы водород атомын эләктереп алам да, ебәрмәй тотоп торам. Был - "Н два О" (АШ два О), йәғни, һыу молекулаһы булыр. Хәтерегеҙҙә тотоғоҙ..." Бөгөнгө көнгәсә, һыуҙың молекулаһы хаҡында иҫләү менән, Гөлсара апай күҙ алдыма килә. Һикһәндең бишен ҡыуып барған был һәләтле педагог әлеге көндә Баймаҡ ҡалаһында йәшәй. Дин юлында. Хажиә. Аллаһ Тәғәлә уға иман, һаулыҡ насип итһен.

Хәҙерге компьютер заманында, әлбиттә, балалар өсөн "наглядное пособие" тип аталған нәмәләр ҙә күп. Тик әле бәйән иткән уҡытыусыларым һымаҡ үҙ эшен яратҡан, балаларға дәресте ихлас күңелдән аңлатыусы педагогтар ҙа аҙ түгелдер тигән өмөттәмен.

Һуңғы осорҙар ватсап аша йыш ҡына олпат йәштәге яҙыусы халҡы менән аралашырға тура килә. Уларҙың күпселеге педагогтарҙан, йәғни уҡытыусыларҙан сыҡҡанлығы беребеҙгә лә сер түгел. Үҙенең һайлап алған уҡытыусылыҡ һөнәренә тоғро ҡалған яҙыусы, филология фәндәре кандидаты Ғәзилә Мәдәрис ҡыҙы Бүләкова, мәҫәлән, оҙаҡ йылдар Сибай институтында студенттар уҡытты (бөгөнгө көндә баш ҡалабыҙҙа йәшәй). Ул мине үҙенең студенттары менән осрашыуға саҡырғылай торғайны. Студенттар алдында сығыш яһағанында уның ғәжәйеп ораторлыҡ һәләтенә иғтибар итеп ултырғайным бер. Бөтә аудитория уны "ауыҙ асып" тыңлай! Был уҡытыусының көр тауышы, һүҙҙәрен асыҡ ҡына итеп әйтеп, һөйләмдәрен шундай матур, ҡыҙыҡлы итеп төҙөп, үҙенә хас интонация менән һөйләшкән алымдары, һөйләү сифаты бик оҫта дикторҙарҙа ғына булалыр ул. Бына шундай уҡытыусының дәресендә нисек итеп йоҡомһорап ултырмаҡ кәрәк инде!.. Әле булһа ватсап аша аралашабыҙ уның менән. Был педагогтың мәктәп программаһына ингән ғәйәт күп шиғырҙарҙы, хатта поэмаларҙы яттан белеүенә һушым китә. Ғәлимов Сәләмдең "Бала", "Шоңҡар", "Ғүмер" поэмалары, Мәжит Ғафуриҙың һәм башҡа күп кенә классиктарҙың бихисап шиғырҙарын йәш сағында ятлап алып, балалар уҡытыу процесында ҡулланыуы, әлегәсә һис яңылышмай уҡыуы, әлбиттә, күп кенә йәш һөнәрмәндәргә үрнәк булырлыҡ.

Бына ошондай, үҙ эшен яратҡан изге профессия эйәләре - уҡытыусыларыбыҙҙың шундай яуаплы, еңел булмаған эштәрен барыбыҙ ҙа күрә белергә һәм уларҙы лайыҡлы баһаларға ла бурыслыбыҙ, тип һанайым.

Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.

✓ ***Бала өсөн көтөлмәгән ваҡытта йылмайыу уның күңелендә ышаныс һәм эҫенеү тойғоһо уятасаҡ. Шулай уҡ сабыйығыҙ ныҡ ҡурҡҡан йә булмаһа, тулҡынланған ваҡытта уның ҡулдарын усығыҙға алығыҙ.***

ШӘП БИТ!

ДӘРТЛӘНДЕРЕҮ САРАЛАРЫ

♦ **Баш ҡалала почетлы педагогтарға премия 60 мең һумға тиклем арттырыла.**

Өфө уҡытыусыларының август кәңәшмәһендә аҡсалата премия күләмен арттырыу тураһында тәҡдим яңғыраны. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, былтыр намыҫлы хеҙмәт һәм баш ҡаланың мәғариф системаһын үҫтереүгә тос өлөш индергән өсөн "Өфө ҡалаһының почетлы педагогы" исеме булдырылды. Уға 16 уҡытыусы лайыҡ булды. Ошо исем менән 50 мең һум премия ла түләнде. Кәңәшмә йомғаҡтары буйынса Өфө мэры Ратмир Мәүлиев хәбәр итеүенсә, бындай педагогтарға түләүҙе 60 мең һумға тиклем арттырырға тәҡдим ителә. Был исем ҡаланың 30 уҡытыусыһына бирелә, тип асыҡлыҡ индерҙе ул. Проект ҡала советы ултырышында тикшереүгә сығарылды.

♦ **Республикала 1 сентябрҙән Рәсәй вуздарында һәм колледждарында уҡып йөрөгән ҡатын-ҡыҙҙар йөклөлөк һәм бала табыу буйынса арттырылған пособие алырға мөмкин.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ғинуарҙа Рәсәй Президенты тыуым кимәленең түбән булыуына бәйле йөклө студенткалар өсөн пособиены арттырырға ҡушты. Хәҙер пособие күләме стипендияға түгел, ә төбәктәге йәшәү минимумына ҡарап иҫәпләп сығарыла. Башҡортостанда 2025 йылда йәшәү минимумы 17 202 һум кимәлендә билдәләнгән, тимәк, республикала йәш әҫәләр өсөн 140 көнлөк отпуск өсөн түләү - 80 мең һум. Элек был сумма 23 мең һумдан артмай ине.

Тағы бер үҙгәреш бар. Элек аҡсаны уҡыған урын буйынса бирһәләр, хәҙер ул Рәсәй Социаль фонды ҡарамағына тапшырылған. Пособие алыу өсөн ғаризаны "Дәүләт хеҙмәттәре" порталы аша, Социаль фондтың клиент хеҙмәттәрендә йәки күп функциялы үҙәктә бирергә мөмкин. Бының өсөн "эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы" һәм уҡыу йортонда көндөҙгө бүлектә уҡыу тураһында белешмә тапшырырға кәрәк, тип хәбәр иттеләр Социаль фондтың матбуғат хеҙмәтенән.

♦ **Башҡортостанда күп балалы ғаиләләргә яңы ярҙам сараһы булдырылды. Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың һуңғы ултырышында депутаттар законға төҙәтмәләр индерҙе.**

Хәҙер ишле ғаиләләр балаларын университет ҡарамағындағы колледждарҙа түләп уҡыткан өсөн компенсация алырға хоҡуҡлы. Республика парламенты спикеры һүҙҙәренсә, быға тиклем ата-әсәләрҙең үҙаллы техникумдарҙа һәм колледждарҙа ғына сығымдарҙың бер өлөшөн компенсациялау мөмкинлеге бар ине. Ғаилә йылына бер бала өсөн 30 мең һумға яҡын аҡсаны кире ҡайтара ала. Яңы сара юғары уҡыу йорттары ҡарамағындағы колледждарҙа урта махсус белем алған студенттарға ла сығымдарҙың бер өлөшөн кире ҡайтарыу хоҡуғын бирә. Республикала бөтәһе 620 ошондай студент бар. Бынан тыш, улар 2024/25 уҡыу йылы өсөн дә компенсация алырға мөмкин. Компенсация өс бөлиғ булмаған бала тәрбиәләгән ғаиләләргә генә түгел, ә 23 йәшкәсә студент балалары булғандарға ла ҡағыла. Никахта торған йәки тулыһынса дәүләт тәьминәтендә булған балалар ғына был хоҡуҡтан файҙалана алмай.

АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ

ОШО АЛТЫН ҠАҒИҘӘЛӘР...

бала тәрбиәһенең нигеҙе

"Балам өсөн бер нәмә лә йәл түгел, барыһын да уның өсөн эшләйем", тип йәшәүсе ата-әсәләр позицияһы дөрөҫмө? Ғаиләлә баланы үҙәккә ҡуйыу, уны өйҙөң бәләкәй бойороусыһына әйләндереүҙең эҙемтәләре ниндәй булыр? Һорауҙар күп. "Нисек грамоталы ата-әсә булырға?" тигән мәҡәләһендә Навзат Тархан түбәндәге төп кәңәштәргә туҡталып китә:

● ***Тәү сиратта баланы танып белегеҙ.*** Баланың һәр йәшенә хас психосоциаль үҙенсәлектәр бар. Ошо үҙенсәлекле осорҙарҙы белеү кәрәк, шул саҡта һеҙ баланың рухи һәм физик талаптарына яраҡлы эш итергә өйрәнәсәкһегеҙ. Йәғни һеҙ балаға кәрәкмәгән әйберҙәр менән уның башын ҡаңғыртмаясаҡһығыҙ, кәрәкмәгән һорауҙар бирмәйәсәкһегеҙ.

● ***Балаға шәхес булырға мөмкинлек биреген.*** Бала - беҙҙең сабыйыбыҙ, әммә ул беҙ түгел. Ул икенсе, айырым кеше, шунлыҡтан ата-әсә уның айырым шәхес булыуын танырға тейеш.

● ***Һығылмалы булығыҙ.*** Сабыйҙарҙың ғәҙәттәре төрлө. Күп кенә осраҡта: "Мин атайым эшләгәнде үк эшләйем, бер ҡасан да бының насарлығын тойғаным юҡ", - тигән һүҙҙәрҙе ишетергә тура килә. Әммә ғаиләлә биш бала булған осраҡта ла, уларҙың һәр береһенең үҙ үҙенсәлектәре бар.

● ***Иғтибарлап тыңлай белегеҙ.*** Баланың һүҙен аҙағына тиклем тыңлап бөтөргә, һөйләшкән ваҡытта күҙҙәренә ҡарап торорға, ризалыҡ белдереп, башығыҙҙы һелкеп хуплларға, һүҙ араһында һорауҙар бирергә лә кәрәк.

● ***Диалог алып барығыҙ.*** Үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе яйлау өсөн шәхесте баҫыу йә абруйыңды эшкә ҡушыуға ҡарағанда диалогтың әһәмиәте ҙурыраҡ булыуын аңларға кәрәк.

● ***Ғаилә эсендә йыйылыштар ойоштороғоҙ.*** Бергәләшеп ваҡыт уҙғарыу бик кәрәк. Ул ғаилә ағзаларын яҡынайта, сөнки улар бер-береһенең шатлыҡ-ҡайғылары тураһында ишетә. Был ғаилә йыйылыштарының нисә тапҡыр үткәрелеүе мөһим түгел, уларҙың ғаилә ағзаларына файҙалы булыуы кәрәк.

● ***Балағыҙҙың дуҫтары ниндәй булыуын белегеҙ.*** Өс йәше тулғандан һуң сабый тормошонда дуҫлыҡ иң мөһим ролдәрҙең береһен уйнай башлай. Ул донъяны дуҫтары менән бергә уйнау аша танып белә. Баланың дуҫтарын тәнҡитләргә ярамай, ә өйөгөҙгә саҡырып, улар менән яҡынданыраҡ танышырға кәрәк. Дуҫтарын кәмһетеп ҡарау баланы һеҙҙән ситләштереп ҡуйыуы бар, ул осраҡта сабыйығыҙ барлыҡ эштәрен дә һеҙҙән йәшерә башлауы мөмкин.

● ***Ғаилә йылыһын бүлегеҙ.*** Бала өсөн көтөлмәгән ваҡытта йылмайыу уның күңелендә ышаныс һәм эҫенеү тойғоһо уятасаҡ. Шулай уҡ сабыйығыҙ ныҡ ҡурҡҡан йә булмаһа, тулҡынланған ваҡытта уның ҡулдарын усығыҙға алығыҙ. Физик ҡағылыуҙар бала күңелендә ышаныс тойғоһон уята, онотолмаҫлыҡ эҙ ҡалдыра. Мөхәббәт хөкөм иткән өйҙә ата-әсәнең абруйы арта, уларға ҡарата хөрмәт үҫә генә бара. Сабый ата-әсәһенең һөйөүен юғалтмаҫ өсөн генә лә яҡшы эштәр башҡарасаҡ. Мөнәсәбәттәре һөйөү менән һуғарылған ғаиләлә үҫкән бала тормошта күберәк уңыш ҡаҙана.

● ***Балаға көсө еткәндәй генә эштәр йөкмәтегеҙ.*** Уңыш тәмен тойоп, үҙаллылыҡты белеп, кәрәк тиклем һеҙҙән бойондороҡһоҙ булырға өйрәнһен өсөн балағыҙға уның хәленән килерҙәй өй эштәре ҡушығыҙ, ара-тирә магазинға ебәрегеҙ. "Уның эштәренән миңә ниндәй ярҙам булһын инде", тимәгеҙ.

● ***Иғтибарығыҙҙы проблемаларҙы хәл итеүгә йүнәлтегеҙ.*** Ниндәйҙер проблема килеп тыуа ҡалһа, юғалып ҡалыу һәм тулҡынланыу, беренсе ҡыйынлыҡ ваҡытында ҡойолоп төшөү урынына уны тыныс ҡына сисергә тырышырға кәрәк булыуын балаға яҡшылап аңлатырға кәрәк. Оло кешенең тормош һабаҡтары - бала өсөн хазина. Әммә бойороу тактикаһы урынына кәңәшсе позицияһында туҡталығыҙ.

● ***Һеҙ бала өсөн өлгө булыуығыҙ тураһында онотмағыҙ.*** Бала һеҙгә ҡарап, баһа биреп: "Минең дә атай-әсәйем кеүек булғым килә", - тиеү ихтималы нисек? Уның өсөн өлгө булараҡ үҙегеҙҙе ни тиклем дөрөҫ тотаһығыҙ? Бала һеҙҙән өйрәнгәндә һөйләгән һүҙҙәрегеҙгә түгел, ә ҡылыҡтарығыҙға нығыраҡ иғтибар итеүен онотмағыҙ.

● ***Хәл-ваҡиғалар тураһында һөйләшегеҙ.*** Ҡайғылы йә шатлыҡлы хәл-ваҡиғалар тураһында әңгәмәләшеү балала ғаиләгә эҫенеү тойғоһон уята. Ошо рәүешле ул ғаиләләге тәртиптәрҙе, әхлаҡи ҡиммәттәрҙе үҙләштерә. Уға аҡыл өйрәтеү файҙа килтермәйәсәк. Бала менән аралашҡанда үҙегеҙ генә һөйләмәгеҙ, диалог кәрәк.

● ***Баланың ым-хәрәкәттәренә иғтибар итегеҙ.*** Балалар үҙ проблемаларын һүҙҙәр ярҙамында аңлата алмай. Ҡыҙыулыҡ, артыҡ теремеклек, ыҙғыш-талаш ойоштороу, алдыҡ, ашарға теләмәү, йоҡоһоҙлоҡ, ҡурҡаҡлыҡ, көнләшеү, мәктәптәге уңышһыҙлыҡтар, тотлоғоу, ҡаршы затҡа ҡарата хас булмаған ҡыҙыҡһыныу - былар барыһы ла проблемалар барлығы хаҡында һөйләй. Баланың был йәшерен депрессия сәбәптәрен һөйләп бирә белмәүен өлкәндәр дөрөҫ аңларға тейеш, бәлки, дауа кәрәк булыр.

● ***Дәртләндереүҙә лә, шелтәләүҙә лә алтын урталыҡты һайлағыҙ.*** Өй - ҡағиҙәләр территорияһы булырға тейеш. Мәҫәлән, хатта футбол уйнағанда ла ҡағиҙәләрҙе үтәмәгән уйынсыға штраф һалына. Әгәр ҙә бала тыңлаусан, эшсән, аҡыллы икән, уның тырышлыҡтары һәм эштәре дәртләндереүгә лайыҡ. Тик был осраҡта баланың шәхесен түгел, ә эштәрен маҡтарға кәрәк. Ҡылған эштәре өсөн үҙ өҫтөнә яуаплылыҡ алырға һәм йәмғиәт ҡағиҙәләрен үтәргә өйрәнеүе баланың алдына ҡуйылған талаптарҙы һәм сикләрҙе аңлауы менән туранан-тура бәйле. Бала ҡылған ҡылыҡтарына ярашлы яуап бирергә һәм шелтә алырға тейеш.

ФЕКЕРЛӘШӘЙЕК!

"БАЛАМ", ТИП ӨНДӘШСЕ...

Ҡулима ҡәләм алырға улым менән булған бер һөйләшеү мәжбүр итте. Ул миңә ейәнемдең ҡылыҡтарын һөйләп ултырҙы ла, аҙаҡтан ғына: "Ислам (8 йәштә) миңә "Атай, ни эшләп һин миңә "улым" тип әйтмәйһең?" тип дәғүә белдерҙе бит әле", - тип өҫтәп ҡуйҙы. "Ә ниңә әйтмәйһең һуң, әйт, "улым", тип өндәш һәр ваҡыт. Тиҫтерҙәренә аталарының "улым" тиеүен ишеткәндер", - тип кәңәш иттем дә, уйға ҡалдым…

Ысынлап та, күптәребеҙ балаларыбыҙға ла, ир-ҡатындарыбыҙға ла, сит кешеләргә лә исеме менән генә өндәшәбеҙ. Шулай итеп туғандарыбыҙҙы ла, балаларыбыҙҙы ла сит кешегә әйләндерәбеҙҙер ул. Бына мин бер әбейҙе беләм. Ул күптән инде үҙҙәре олатай-өләсәй булып бөткән балаларына ла "Бәпәйем", "Балам", "Улғынам", "Ҡыҙым" тип өндәшә. Һәр ерҙә, һәр кемгә балаларын маҡтап һөйләй. Күптәр уға көлөп ҡарай, ә өлгө алырға кәрәклеген уйламай ҙа. Ә бит был әбейҙең балалары ла ата-әсәләренә ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп, матур итеп донъя көтә. Сөнки уларҙың ҡанына һеңгән: улар әсәләренең изге, ҡәҙерле балаһы, бәпәйе...

Уйлап ҡараһаң, иренә лә, балаһына ла исеме менән өндәшеп, әсә кеше үҙе лә аңғармаҫтан уларҙы тигеҙләй, шулай уҡ ҡыҙына ла, киленең лә исеме менән мөрәжәғәт итеп, ҡайһыһы ҡыҙы, ҡайһыһы килене икәнлеген дә онота. Күптән түгел был тема буйынса "Киске Өфө" гәзитендә лә бер мәҡәлә донъя күргәйне: ҡәйнә әсәй булмай, уға шулай тип өндәшеү үҙ әсәйеңде һанламау була, шулай уҡ ҡайнаға - ағай, ҡайынбикә апай була алмай, тигәнерәк фекер яҙылғайны унда.

Башҡорт теле бик бай, унда туғантыумасалыҡты белдергән бына тигән һүҙҙәр бар: ҡәйнәм, бейемем, ҡайным, ҡәйнеш, ҡусты, балдыҙ, һеңлем, һылыуым, бажа, ҡоҙа, ҡоҙаса, ҡоҙағый, мыртый, ҡәйенбикә, ҡәйенеңгә, ҡәйенеҙнә, һ.б. Уларҙы телдәребеҙгә кире ҡайтарайыҡ, тимәксемен. Әгәр балаларыбыҙға көн һайын "улым", "ҡыҙым" тип йышыраҡ ҡабатлаһаҡ, уларҙың ата-әсәләре менән күңел яҡынлығы ла нығыраҡ булыр ине һымаҡ. Ә гәзит уҡыусылар ошо хаҡта ни уйлай икән?

Гөлдәр ӘЛИБАЕВА.
Баймаҡ районы Билал ауылы.

МАЛАЙҘАР

Рәсүр БАЙГИЛДИН

Хикәйә

Илназ алыҫ юлға сығыуҙарының сәбәбенә лә, атаһы һүҙҙәренең мәғәнәһенә лә аҙағынаса төшөнөп етә алмай әле. Атаһы әйләнгән һайын: "Ике айға ғына, йәме... Оҙаҡ түгел ул, Денис ағайың ял һайын килеп йөрөр. Яңы йылға алып ҡайтырбыҙ", - тип ҡабатлай ғәйепле тәҫ менән.

Әсәһе лә оҙатҡанда:

- Улым, оҙаҡҡа ебәрмәйбеҙ, һә тигәнсә үтә лә китә ул ике ай. Шыршы байрамына үҙем барып алырмын, - тине. Үҙе иланы нишләптер.

- Ярай һуң, - тине Илназ, ғәҙәтенсә.

Ул ололарҙың өгөтөнә гел шулай ризалаша. Бигерәк йәлләгес күренә улар бындай саҡта, тиҙ генә күнмәй булдыра алмай шуға. Әсәһе илағас, үҙенең дә күңеле тулғайны.

Тәүҙә самолетта остолар, шунан автобуста килделәр.

- Ана, Өфө күренде, - тине атаһы, алыҫтағы ҙур шаҡмаҡтарға, һерәйгән торбаларға күрһәтеп.

"Өфө нимә була икән?" Эстән генә һораны малай үҙенән. Шунан иҫенә төштө - балалар баҡсаһында "Тау башында балҡый бер ҡала, ул ҡала Өфө тип атала", тип йырлағайнылар. "Бейектә эленеп тора икән Өфө тигәндәре". Ҡар аҡлаған ер күк менән тоташҡан һымаҡ күренгәнгә, тау башындағы ҡалаға баҫып, Илназ шулай уйланы.

Бейек йорттар, киң урамдар, машинаның да, кешенең дә күплеге Илназды артыҡ әҫәрләндермәне. Телевизор ҡарап, донъяны арҡыры һәм буй гиҙеп иҫ белгән бала, күрәһең, ысынбарлыҡ менән "зәңгәр экран" араһында айырма күрмәй. Уға бит биш йәш тә тулмаған әлегә.

- Атай, ҡасан ашайбыҙ? - тип һораны Илназ, бергилке урам буйлап атлағас.

- Хәҙер, улым, - студент йылдарында йыш йөрөгән Ленин урамындағы ашханаға тоҫкап алып китеп бара ине Рамаҙан Илназды.

- Ҡарале, атай, сәпит, - ҡапыл туҡтап, ҙур витринаға ҡуйылған төрлө велосипедтарға төртөп күрһәтте малай.

- Әйҙә, инеп ҡарайыҡ һуң, - тине атай кеше.

Алдында бит улына баш ҡалаһы күрһәтеү, уның менән таныштырыу бурысы ла тора. Тәүге килеүе бәләкәсенең башҡорттоң төп ҡалаһына. Ҙурайғас, ҡасан, ни сәбәп менән тәүләп Өфөгә аяҡ баҫыуы тураһында һөйләп бирер уға. Үҙенә күрә, улының яңы башланып ҡына торған тормош юлында иҫтәлекле ваҡиға. Кем белә, бәлки, яҙмышында эҙһеҙ ҙә ҡалмаҫ ул.

Спорт тауарҙары магазиныныҡы ине Илназдың иғтибарын йәлеп иткән витрина.

Урамда мең туғыҙ йөҙ ҙә туҡһан дүртенсе йыл. Йәшәгән урындары район үҙәге булһа ла, магазиндарҙа әйбергә ҡытлыҡ. Баш ҡалала иһә сауҙа кәштәләре сағыштырмаса бай. Ана, велосипедтарҙың да ниндәйе генә юҡ...

Ауылдан килгән кешегә магазин кәштәләрен ҡарап йөрөү - үҙе бер ирмәк. Тик кеҫә яғы һай булғас, унан фәтүә юҡ. Рамаҙан, улын ҡулынан ысҡындырмай, оҙон залды бер ураны ла сығыуға ыңғайланы.

- Атай, туҡта, ҡайҙа бараһың? - Илназ атаһын ике ҡуллап тотто ла, аяғын терәп, кирегә һөйрәне. - Сәпитсе...

- Сәпиткә аҡса юҡ, улым, - ир малайына ипле генә өндәште.

- Сәпит ал, әтеү санатурыйыңа бармайым! - Илназдың сигенергә иҫәбе юҡ. Магазинды яңғыратып ҡысҡырҙы.

Ағаһы Илгиҙәр менән өс тәгәрмәсле велосипедтарын әллә ҡасан туҙҙырып, ботарлап ташланылар инде. Үткән йәйҙе ҡупшы сәпитендә елдергән күрше Фәнис дуҫының артынан йүгереп үткәрҙе. "Тимер ат" төштәренә инә хатта. Ә атаһы алдына үҙе килеп ятҡанды алмаҫҡа итә.

- Ярай, ярай. Тәүҙә ашап алайыҡ та шунан берәй нәмә уйларбыҙ...

Илназ тағы күнде ололарҙың хәйләһенә. Бала кеше хәҙер бер нәмәгә, күп тә үтмәй, икенсе әйбергә ҡапыл ылығып китә, тәүгеһен шунан онотоп та ҡуя.

Тамаҡ ялғап алғас, автобуҫҡа ултырып, Черниковкалағы балалар өсөн пульмонология шифаханаһын эҙләп киттеләр. Илназға, һыуыҡ тейеп йыш ауырығас, һаулығын нығытырға путевка биргәйнеләр. "Бигерәк күп сирләй, улайға китһә, баҡсаға йөрөтөргә справка бирмәйем башҡа", - тип участка педиатры киҫәтеп тә алғайны.

Илназ шифаханала ике ай яңғыҙ ятып ҡайтырға тейеш. Баланы сит ҡулдарға тапшырырға мәжбүр булыуҙарын Рамаҙан менән ҡатыны Менәүәрә ауыр кисерҙе. Бигерәк йыш ауырый шул кесе улдары, үҙәктәренә үтте дауахана коридорҙарын тапауҙары. Бала ла уколдан, дарыуҙарҙан ныҡ йонсоно.

Шифаханала ихлас ҡаршы алдылар. Тейешле ҡағыҙҙарҙы йәһәт кенә тултырҙылар. Илназ артыҡ шөбһәләнмәй. Күрәһең, атаһының уны ошо таныш түгел йортта, сит апайҙар ҡарамағына, ят балалар араһына ҡалдырып китергә ултырыуы башына инеп тә сыҡмай. "Ике айға ғына... Ике айға ғына", - тип тылҡыуҙарын үҙенә ҡағылмаған һымаҡ ҡабул итте, был хәбәр, нисектер, башҡа төрлө хәл ителергә тейеш кеүек ине уға. Нисек инде, атаһы уны әллә ҡайҙа алып килеп, әллә ниндәй кешелергә бирep китһен! Була торған хәл түгел!

- Ярай, улым, санаторий ошо инде... Һин бында ҡалаһың, әйткәйнем бит, ә мин ҡайтам. Шулай... - тине лә атаһы, кәүҙәһен ауыр күтәреп, урынынан торҙо. Үҙе күҙҙәрен ситкә күсерҙе. Ят апай Илназды күтәреп алды.

Малай ныҡ аптыраны. Бер атаһына, бер ят апайға текләне. Шунан үҙен күтәргән ҡатынды ике йоҙроҡлап төйә башланы.

- Атай, мин ҡайтайым, алып ҡайт инде, пажалыста, - тип илап ебәрҙе.

Рамаҙан йәһәтләп сығыуға ыңғайланы. Ишек аша ла Илназдың ярһыған тауышын ишетте, балаһының өҙгөләнеүенә йөрәге һыҙланы, күҙҙәренә йәш төйөлдө. Кире әйләнеп, улын ят ҡулдарҙан йолоп алғыһы килде. Ҡаршы осраған кешеләрҙән йәшләнгән күҙҙәрен йәшереп, байтаҡ атланы. Илназдың руссалап "Пажалыста" тиеүе ирмәк һымағыраҡ ишетелһә лә, улының шулай үҙе лә белеп етмәгән һүҙҙәр менән ялбарыуы күңелен тағы ла нығыраҡ әрнетте. Юлында осраған уйынсыҡтар магазинына аяҡтары үҙҙәре ыңғайланы. Рамаҙан ҡабалан аҙымдар менән кәштәләр рәте аша үтте лә, уйынсыҡ машиналар ҡуйылған урынға еткәс, күҙенә ташланған тәүге ҡапты тотоп, кассаға ыңғайланы. Хәҙер юлы кирегә - шифаханаға.

- Уйынсыҡ ҡына ҡалдырырға ине, - тине аҡ халатлы хеҙмәткәрҙең аптыраулы ҡарашына яуап итеп.

- Иҫкәрттем бит, хөрмәтле атай кеше, ҡилеп, баланың психикаһын ҡаҡшатып йөрөмәҫкә, тип. Башҡа туғандарығыҙ килһә ярай, ә үҙегеҙ аяҡ баҫаһы булмағыҙ. Телефон аша хәлен белешеп тороғоҙ, - бая итәғәтле генә күренгән ханым үтә лә ҡырыҫ ине.

- Уйынсыҡ ҡына... Ҡалдырып ҡына китергә... - Рамаҙан ҡаушаны. Балаһына хоҡуғын да юғалтырға тора әллә?

- Ҡуйып тороғоҙ, үҙем бирермен.

- Илназ улым нисек?

- Ҡайғырмағыҙ, тынысланды. Бала тиҙ күнегә ул... Тик үҙегеҙ сабыр булығыҙ... Улығыҙ хаҡына...

* * *

Илназ арығансы иланы. Уны әрләмәнеләр ҙә, тыйманылар ҙа.

- Бәләкәс, ярай, бөттө-бөттө. Тыныслан, - тип ипле генә йыуатты кинолағыса һөйләшкән апай. Яңы урында бер ниндәй ҡурҡыныс та юҡ икәнен тойған малай яйлап баҫылды. Үҙенән башҡа бында байтаҡ малай һәм ҡыҙҙарҙың һин дә мин йөрөп ятыуын абайлап алды.

Илназ кешеләрҙең өс төрлө һөйләшкәнен белә: өйҙәгесә, кинолағыса, юлыҡтағыса. Үҙе тәүгеһенсә генә һөйләшә белһә лә, башҡаларын да, юлыҡтағыһаны ла аңлай. Ҡайһы бер һүҙҙәрен әйтә лә белә.

Шифаханала тик кинолағыса һөйләшәләр икән - иң тәүҙә шуға иғтибар итте ул. Малайҙарҙың зурыраҡтары ла, бәләкәсерәктәре лә бар. Ә ҡыҙҙар бер тигеҙ һымаҡ.

- Һинең йоҡлай торған карауатың ошо була. Быныһы - әйберҙәренде һалыр өсөн тумбоҫка. Бына исеменде яҙып ҡуйҙым, яңылышма, йәме, - Илназға урынын күрһәтте баянан бирле эргәһенән китмәгән апай. - Бар, уйнап ал малайҙар менән.

- Ладны, - тине Илназ.

Уға хәҙер кинолағыса һөйләшергә өйрәнергә кәрәк - ят урында, яңы кешеләр менән йәшәй башлағанда иң тәүҙә шул һөнәрҙе үҙләштерергә тейешлеген аңлап алғайны шул арала малай. Аңланы, тип әйтеү арттырыу, әлбиттә. Эске һиҙемләү, артабан тереклек итеү зарурлығы аңғартты сабыйға бынан кире үҙен нисек тотоу кәрәклеген.

Илназда әлегә уйын ҡайғыһы юҡ. Карауат эргәһенә ҡуйылған балалар ултырғысына сүгәләне лә ололарса уйға батты. Һуңғы көндәрҙә булып үткән хәл-ваҡиғаларҙы, атаһының, әсәһенең һүҙҙәрен иҫенә төшөрҙө. Үҙен бында ҡалдырып китеүҙең сәбәбенә төшөнгөһө килде. "Йыш ауырыйһың бит, дауаланырға кәрәк", - тип бер туҡтауһыҙ тылҡынылар өйҙә. Тик ул һүҙҙәр бер ҡолағынан инде, икенсеһенән сыҡты. Үҙенә нығыраҡ төпсөнөргә, барыһын да ныҡлап белеп алырға кәрәк булған. Ә ул мәшәүләнеп тик йөрөнө, уйынға һалышып. Әллә ҡасандан бирле балнисҡа барғаны юҡ. Хәҙер ҙә ауырымай. Йүткермәй ҙә хатта. Әллә уны яратмаймы икән атаһы менән әсәһе? Шуға алдатып алып ҡилеп ҡалдырып киттеме атаһы? Юҡтыр. Гел һөйөп, иркәләп кенә йөрөттөләр. Илгиҙәр ағаһы ла, гел нуғышырға ҡулы ҡысытып торһа ла, урамда уны яҡлаша. Хәйер, Илназ үҙе лә бирешкәндәрҙән түгел - ҙур малай тип ҡарап тормай, йоҙроғон төйөп, йәберләүсеһенә ташланырға һәр саҡ әҙер.

Стена буйлап ҡына атлап, башҡа балалар уйнаған яҡҡа ыңғайланы. Йүгерәләр, сабышалар, әллә быларҙың өйө ошонда микән? Ҡайһылай күңелле уйнайҙар, ҡайғырмайҙар ҙа...

Ә уға күңелһеҙ. Тағы әсәһе менән атаһы, ағаһы иҫенә төштө, өйөнә ҡайтҡыһы килде. Эсендә - бушлыҡ. Бында йөрөгән кешеләр бөтәһе лә йәнһеҙ ҡурсаҡ кеүек. Яттар, һалҡындар, алыҫтар... Бер кем дә күрмәгәндә мөйөшкә генә боҫоп ултырып илағыһы килә Илназдың. Ниңә бында алып килделәр, нишләп атаһына нығыраҡ йәбешмәне? Кире ҡайтып китһәсе... Хәҙер атаһы менән тағы сталауай ашап алырҙар, шунан самолетта Аҡъярға осоп ҡайтып китерҙәр ине. Ә өйҙә - әсәһе, ағаһы! Их-х... Ҡайтып алһамы, башҡа бер ваҡытта ла Өфөгә килмәйәсәк, өйҙә генә ултырасаҡ! Кәрәге юҡ уға баш ҡаланың! "Өфө, Өфө", тип йырлаған булалар бит әле.

Кире карауаты янына барҙы ла ултырғыҫҡа ултырҙы. Күҙҙәрен һөрткөләп алды. Арығайны. Кисерештәрҙән дә, юлдан да. Был ваҡытта йоҡларға ла күнеккән. Ултырған ерендә ойоп киткән. Кемдер төрткәнгә уянып китте.

- Һин кем? - тип һораны үҙе шикелле малай.

- Ә... Нимә? - Йоҡо аралаш өйҙәгесә сыҡты һорауы.

- Бә-бә... Басурман мәллә? - Малай ауыҙын ҡыйшайтып, мыҫҡыллы йылмайҙы.

- Нимә? - Илназ уға өндәшеүсене аңламаны.

- Басурман, басурман, - тип үсекләшә башланы тегенеһе.

- Ты сто, дурак столи? - Илназ ултырған урынынан һикереп торҙо ла боксерҙар стойкаһына баҫты. Ул һуғышырға яҫҡынғанда малайҙар әйтә торған һүҙҙәрҙе, нисек баҫырға, йоҙроҡтарҙы төйөп тоторға кәрәклеген белә - дошманын хәҙер изеп ташлаясаҡ.

Бая шәп ҡыланған малай албырғап ҡалды - был тиклемен, шундай ҡәтғи тәүәккәллекте көтмәгәйне, күрәһең.

- Мин Мунька, ә һин кем? - тип ярашырға ишара яһаны.

- Я - Илназ, - ул йоҡо аралаш ҡайҙа ултырғанын да, ҡайғыһы булыуын да иҫенән сығарғайны.

- Минең урыным - ошо, ә һинеке ҡайҙа? - Үҙен Мунька тип таныштырған малай бөтөнләй үҙгәрҙе.

- Быныһы минеке... Беҙҙең урын бергә лә баһа, - Илназ яңы танышының ихласлығына шулай уҡ ихлас яуап бирҙе.

Тыуған йортонан алыҫта, ят кешеләр араһында ҡалыуы иҫенә төшһә лә, ниңәлер, баяғы шикелле үҙәк өҙҙөргөс юҡһыныу кисермәне. Эргәһендә үҙе ише теремек малайҙы күреп ирене. Мунька - Мөнир менән дуҫлығы шулай башланды.

(Дауамы бар).

✓ *Кейеменә тәмәке төтөнө еҫе һеңгән хеҙмәттәшегеҙ менән оҙайлы ваҡыт бер бүлмәлә ултырып эшләргә мәжбүр булһағыҙ, хәүефләнергә урын бар. Никотин туҡымала оҙайлы ваҡытҡа һаҡланып ҡала.*

ИНТЕРНЕТТАН

ТӘМӘКЕ ТАРТМАҺАҢ ДА...

■ Табиптың кейеменә һәм сәсенә һеңеп ҡалған тәмәке төтөнөнөң микроөлөшсәләре пациенттарға, мәҫәлән, астма йәки аллергия сирлеләргә насар тәьҫир итеүе бар. Мәғлүмәттәргә ярашлы, үпкә яман шеше тәмәке тартыуҙан ғына барлыҡҡа килмәй. Кейеменә тәмәке төтөнө еҫе һеңгән хеҙмәттәшегеҙ менән оҙайлы ваҡыт бер бүлмәлә ултырып эшләргә мәжбүр булһағыҙ, хәүефләнергә урын бар. Никотин туҡымала оҙайлы ваҡытҡа һаҡланып ҡала һәм һауала булған азот кислотаһы быуы менән химик реакцияға инә. Һөҙөмтәлә канцероген үҙенсәлекҡә эйә булған нитрозаминдар барлыҡҡа килә.

■ Эрисман исемендәге Мәскәү гигиена ғилми-тикшеренеү институты белгестәре сүпте көн һайын түгеп, сүп биҙрәһен йышыраҡ йыуып торорға кәңәш итә. Был йортоғоҙҙо насар еҫтәрҙән, үңеҙ бәшмәктәренән, тараҡандарҙан ғына һаҡлап ҡалмаясаҡ, аллегияның ҡайһы бер төрҙәрен булдырмаҫҡа ярҙам итәсәк. Аҙыҡ ҡалдыҡтары бүлмә температураһында ярты сәғәттән һуң серей башлай һәм бактериялар үрсеүенә яҡшы шарттар тыуҙырыла. Ит, балыҡ, һөт аҙыҡтары азот һәм көкөрттән торған химик берләшмәләр барлыҡҡа килтерә, шуға ла уларҙан ауыр еҫ тарала. Саң һурҙырғыҫҡа йыйылған сүп-сарҙы ла аш-һыу биҙрәһенә ташлауҙан тыйылығыҙ, был осраҡта ундағы йорт талпандары, организм өсөн хәүефле башҡа микроорганизмдарҙан торған ваҡ ҡына саң бөртөктәре кире фатир буйлап тараласаҡ.

■ "Сәләмәт ҡала" гәзите тәүлегенә 8 сәғәт йоҡлау - йәш булып ҡалыуҙың нигеҙе, тип белдерә. Ғалимдар иҫбатлауынса, даими рәүештә йоҡо туймау организмды ваҡытынан алда ҡартайыуға дусар итә, шулай уҡ йоҡо баш мейеһе эшмәкәрлеге өсөн дә мөһим. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, төнгө йоҡоноң ҡыҫҡа булыуы организмдың үтә мөһим функцияларының боҙолоуына һәм биологик үҙгәрештәргә килтерә. Йоҡо туймау матдәләр алышыныуы, гормональ һәм эндокрин системаһы процесының боҙолоуына алып килә. Тәжрибәлә ҡатнашыусы йәш егеттәр тәүлегенә 4 сәғәт кенә йоҡлай, һөҙөмтәлә уларҙың ҡанында глюкозаның, шулай уҡ стресс гормоны - кортизол артыуы һәм гормональ баланстың үҙгәреүе күҙәтелә. Эксперименттарҙа ҡатнашыусыларға 12 сәғәт йоҡлап алырға рөхсәт бирелгәндән һуң был симптомдар юҡҡа сыға.

■ Нидерландтар дәүләтендә таблеткалы хушбуй уйлап табылған. Был капсулаларҙы ябай витаминдар кеүек ҡабул итергә кәрәк. Таблетка составына ингән хуш еҫле молекулалар ашҡаҙанда һәм эсәктәрҙә капсуланан сығып, тир менән бергә тире аша бүленеп сыға. Бындай хушбуй авторҙары раҫлауынса, хушбуйҙың еҫе индивидуаль буласаҡ, сөнки һәр кешенең тире төрлө еҫле була. Әлегә был асыш тест үтә һәм яҡын арала һатыуҙа булмаясаҡ.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

ОЛАТАЙҘАР ЮЛЫНАН

Ҡырмыҫҡалынан "Баха" позывнойлы Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы яугир бала саҡтан патриотик рухта тәрбиәләнә, ир ҡорона инеп, ғаилә ҡорғас, олатайҙары юлын дауам итергә ҡарар ҡыла.

"Беҙҙең нәҫелдә элек-электән ир-егеттәр Тыуған илде һаҡлаған. Атайым Мәскәүҙә Жуковский исемендәге хәрби һауа көстәре ғәскәрҙәрендә хеҙмәт иткән. Ул мине һәр сәләмәт егет армияла булырға, Тыуған илде һаҡларға тейеш, тип үҫтерҙе. Уҡытыусы булып эшләгән әсәйем дә патриотлыҡ орлоҡтары сәсеп тәрбиәләне. Ишетеп кенә белгән олатайымдарҙың икеһе лә Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан. Олатайымдар менән ғорурланып үҫтем. Уларҙың береһе илдә барған 1917 йылғы үҙгәрештәрҙә ҡатнаша. Кавалерист булып хеҙмәт итә. Артабан Бөйөк Ватан һуғышында башынан аҙағына тиклем яу юлдары үтә. Уның күп орден-миҙалдары өйөбөҙҙә ҡәҙерләп һаҡлана, - тип һөйләне яугир.

"Баха" мәктәптә яҡшы уҡый. Ҡулына аттестат алғандан һуң үҙенең яҙмышын тимер юлы менән бәйләргә ҡарар итә. Ул Өфө тимер юлы колледжында белем алып, Өфө - Куйбышев тимер юлы селтәрендә эшләй. Шунан армия сафында хеҙмәт итә. Мотоуҡсылар полкы составында Тажикстанда хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнаша. Егет 2023 йылдың август аҙағында Рәсәй Оборона министрлығы менән контракт төҙөп, Тыуған ил һағына баҫа. Батырлығы өсөн "Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыға", Суворов һәм Жуков миҙалдары менән бүләкләнә. Өйләнгән, ике улы уны һағынып көтөп тора.

Улым ялға өсөнсө тапҡыр ҡайтты, тип уртаҡлашты яугирҙың әсәһе. "Ҡайтыу менән кире китеү тураһында уйлай башлай. Иптәштәре менән һәр ваҡыт бәйләнештәләр. Бынан хәстәрләп, кәрәкле әйберҙәрҙе алып китәләр. Был юлы окоп шәмдәре алып китте. "МХО ҡатындары һәм әсәләре" тигән төркөм бар. Улар менән тиҙ генә кәрәк-яраҡты әҙерләйбеҙ. Ауылдаштар ҙа йылы ойоҡбаштар һәм башҡа әйберҙәр йыйып ярҙам ҡулдарын һуҙалар. Аҙаҡ яугирҙар күп рәхмәт һүҙҙәрен ебәрәләр", - тине әсә.

ОСТАЗДАРЫ - ИРЕК ЗАРИПОВ

Республикабыҙҙан өс МХО ветераны Дзержинскиҙа өҫтәл теннисы буйынса ярышта еңеүсе булды.

"Ватанды һаҡлаусылар кубогы" төбәк-ара ярыштарында еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы Түбәнге Новгород өлкәһенең Дзержинск ҡалаһында үтте. Турнирҙа Волга буйы федераль округының 14 төбәгенән 130-ға яҡын МХО ветераны ҡатнашты. Хәбәр ителеүенсә, Башҡортостан командаһы Кубокта уңышлы сығыш яһаны. Яугирҙар өҫтәл теннисы буйынса өс алтын миҙал яуланы. Өфөнән Дмитрий Феликсов, Стәрлетамаҡтан Владимир Егоров һәм Шишмә районынан Рауил Шәңгәрәев чемпион исеменә лайыҡ булды. Ярышта еңеүем көтөлмәгән хәл булды, тип шатлығын йәшермәй Владимир Егоров. "Шатлыҡ һәм ғорурлыҡ тойғоһо кисерәм. Әлеге ваҡытта мин Стәрлетамаҡ ҡалаһы буйынса МХО ветерандары ассоциацияһы рәйестәше булып торам. Ярыш ваҡытында янда булған һәм ярҙам иткән тренерҙарға, егеттәргә рәхмәт", - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты Владимир.

Командаңың остазы һәм кураторы булып дүрт тапҡыр Паралимпия уйындары чемпионы, Рәсәй Паралимпия комитеты президенты кәңәшсеһе Ирек Зарипов сығыш яһаны.

Дзержинскиҙа үткән төбәк-ара "Ватанды һаҡлаусылар кубогы"нда Башҡортостандан МХО ветерандары командаһы ултырып волейбол уйнау ярышында ла ҡатнашты һәм көмөш миҙалға лайыҡ булды. Ярыштарҙа республикабыҙ намыҫын 14 МХО ветераны яҡланы. Команда составында - ҡышҡы спорт төрҙәре буйынса "Ватанды һаҡлаусылар кубогы" еңеүселәре һәм призерҙары Олег Мөфтәхетдинов, Артем Мөхәрәмов, шулай уҡ Илеш районынан Рубен Хәсәнов, Бөрө районынан Лев Зәйнетдинов, Балаҡатай районынан Максим Корлыханов.

БЫЛ БӘЙГЕЛӘ ЛӘ - УЛАР

Башҡортостандан МХО-ла ҡатнашыусының ғаиләһе "Йыл ғаиләһе" конкурсында еңеү яуланы.

Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе, Башҡортостандан сенатор Лилиә Ғүмәрова федераль конкурс һөҙөмтәләре тураһында һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, быйыл унынсы тапҡыр ойоштороlған "Йыл ғаиләһе" Бөтә Рәсәй конкурсында 11 мең ғаилә ҡатнашҡан. Барлыҡ субъекттарҙа ла һайлап алыу турҙары үткән. "Ойоштороу комитеты рәйесе, дәүләттең демография һәм ғаилә сәйәсәтен тормошҡа ашырыу буйынса Президент Советының яуаплы секретары булараҡ, "Йыл ғаиләһе"нең конкурстан илдең төрлө мөйөштәренән тотош династияларҙы берләштергән күләмле ғаилә хәрәкәтенә әүерелеүен билдәләп үтергә теләйем. "Ватанды һаҡлаусы ғаиләһе" тигән яңы номинация булдырылды, ул ғаиләләребеҙҙең көсөн, сыҙамлылығын күрһәтә", - тип яҙа республика сенаторы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. Еңеүселәр иҫәбендә Башҡортостанда йәшәгән ғаилә бар, тип билдәләне Лилиә Ғүмәрова. Ишле, күп милләтле Андрющенколар ғаиләһе башлығы МХО биләмәһендә хәрби бурысын үтәй.

ХӘТЕРЛӘП...

БЫЛ ДАНЛЫ ДИВИЗИЯ...

халҡыбыҙ намыҫына һәйкәл дә ул

"Кавалерист олатайым Шакиров Сәләх Шакир улының тап ошо ерҙә тәүге атлылар сафында хәрби әҙерлек үтеүе, һуңынан, ҡулына ҡорал тотоп, фашист илбаҫарҙарына ҡаршы көрәше күҙ алдына баҫҡандай булды", - тип уртаҡлашты үҙенең тәьҫораттары менән социаль селтәрҙә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы музейында экскурсияла булған Гөлсибәр Шакирова.

Музей, Республика Хәрби Дан музейының филиалы булараҡ, Дим биҫтәһенең Левитан урамындағы 27-се һанлы ике ҡатлы йортта урынлашҡан. Ул дивизияның ветерандары инициативаһы һәм Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы нигеҙендә ойоштороla, 2005 йылдың 8 майында тантаналы асыла.

Диорамалар, витриналағы экспонаттар һәм манекендар, стендтағы фото һәм яҙма мәғлүмәттәр аша 112-се Башҡорт (16-сы гвардия) кавалерия дивизияһының Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы тулы тарихы күҙ алдына баҫа. Фотокүсермәләр һәм күсермә документтар дивизияны ойоштороу мәлен сағылдыра. Музейға килеүселәр, әлбиттә, иң беренсе сиратта дивизияның тәүге командиры генерал-майор, Рәсәй Геройы Миңлеғәле Шәйморатов (*2025 йылдың 27 августында уның тыуыуына 126 йыл булды.* - **Ред.**) һәм унан һуң етәкселекте ҡулына алған генерал-лейтенант Григорий Беловтың биографияһы менән таныша.

Ике диорама атаевсыларҙың ҡаһарманлығына һәм Днепр йылғаһын аша сыҡҡандағы һуғыш ваҡиғаһына бағышланған. Бер макет Дебальцево рейдынан сыҡҡан осорҙо күҙалландыра. Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумының дивизияға тапшырған, гвардия исеменә бәйле бирелгән дивизия һәм полктарҙың байраҡ күсермәләре лә ҡуйылған. Витриналарҙа һуғыш осоронда кавалеристарға хас хәрби кейемдәр һәм аттарҙың дағалары, шпоралары, өҙәңгеләре, һуғыш яланынан килтерелгән ҡорал өлгөләре урын алған. Башҡорт кавалерия дивизияһының махсус баҫма матбуғаты булған "Ҡыҙыл атлылар" гәзите менән дә танышырға мөмкин. Музейҙа экспозицияға ҡайһы бер дивизия яугирҙарының наградалары, кейемдәре, документтары һәм фотолары ҡуйылған. Дивизия тарихын асыҡлауға ярҙам иткән художестволы һәм фәнни әҙәбиәт тупланған.

1941 йылдың 14 ноябрендәге Дәүләт оборона комитеты һәм 1941 йылдың 17 ноябрендәге БАССР Халыҡ Комиссарҙары советы ҡарарына ярашлы, халыҡ теләгән иҫәпкә алып ойоштороlған дивизияның хәрби тарихы СССР-ҙың бойондороҡһоҙлоғана хәүеф янаған аяуһыҙ көндәрҙә, 1942 йылдың 2 июлендә, Брянск фронтының 3-сө армия составында башланып китә. Хәрби берекмәнең үҙенсәлеге шунда: ул тулыһынса Башҡорт АССР-ы халҡының иҫәбенә булдырыла, һуғыш осоронда Советтар Союзы Геройы исеме алыусылар һаны буйынса уның менән тиңләшеүсе башҡа дивизия булмай. Шәйморатовсыларҙан 78 яугир юғары

✓ *Арығанлыҡты, хәлһеҙлекте, төшөнкөлөк һәм йоҡомһорап йөрөүҙе ҡәҙимге таҙа һыу бөтөрә. Оло кеше көнөнә 6-8 стакан таҙа һыу эсергә тейеш. Башҡа төрлө эсемлектәр иҫәпләнмәй.*

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

ӨЛӘСӘЙҘӘРСӘ...

Ризығың файҙалымы?

Ысынлап та, ризыҡты туйымлыҡ өсөн, танһығыңды ҡандырыу өсөн түгел, ә уның организмыңа файҙалы булыу-булмауын белеп ашарға кәрәк.

❖ Йөрәк һәм бауыр ауырыуы ваҡытында көн һайын 100-әр грамм эремсәк ашау файҙалы.

❖ Ҡалҡан биҙе шешкән ваҡытта лимонды ҡабығы менән бергә ит турағыстан үткәреп, шәкәр ҡомо ҡушырға һәм шуны көнөнә 3 тапҡыр берәр балғалаҡлап ашарға.

❖ Ҡан ауырыуы булһа, йыл буйына петрушка ашау файҙалы. Петрушка ҡандың ойоу һәләтен яҡшырта, организмдан артыҡ шыйыҡлыҡты ҡыуып сығара.

❖ Боғаҡ (зоб) һәм атеросклероз интектерһә, 1 кг ҡара миләште 1 кг шәкәр ҡомона ҡушып болғатырға һәм шуны көнөнә 3 мәртәбә берәр балғалаҡ ашарға.

❖ Бауырҙа таш булғанда ер еләге өлгөргән ваҡытта көнөнә 6 тапҡыр яртышар стакан еләк ашарға кәрәк. Ер еләге экземанан, ҡурылдайҙан да дауалай.

❖ Миокард инфаркты булғанда, яңы һығылған кишер һуты эсергә кәрәк.

❖ Ҡан таҙартыу, бауыр өҫтән ҡаплаған лайланы бөтөрөү өсөн йылына бер-ике тапҡыр ҡабыҡлы көйө һоло бешереп, һөҙөп эсергә, һоло бутҡаһын йышыраҡ ашарға кәрәк.

❖ Көсөргәнешлектә, йән көйөүен, кәйеф ҡырылыуын бөтөрөү, йән тыныслығын һаҡлау өсөн көбәктән (отрубь) бешерелгән икмәкте йышыраҡ ашарға кәрәк. Арығанлыҡты, хәлһеҙлекте, төшөнкөлөк һәм йоҡомһорап йөрөүҙе ҡәҙимге таҙа һыу бөтөрә. Оло кеше көнөнә 6-8 стакан таҙа һыу эсергә тейеш. Башҡа төрлө эсемлектәр иҫәпләнмәй.

Ҡурылдай

Һарыһыу мәлендә ҡурылдай сире (бронхит) көсәйеүсән була. Унан һаҡланыу өсөн: һуған ашарға һәм уның шәкәрле һутын эсергә; түш, арҡаны иҙелгән һуған ҡушылған һарыҡ майы (эс майы яҡшыраҡ) менән ышҡырға; бер тамсы спирт йәки камфара тамыҙып, йылы һөт, кишер һуты эсергә; йүткертһә, көнөнә өс мәртәбә 2-3 сей хөрмә емеше ашарға, ә төнгө 1 ҡалаҡ көнбағыш майы ҡушып, эҫе сәй эсергә.

Тамаҡ ауыртһа

Тамаҡҡа һырғанаҡ майы, лимон һуты, бал һөртөргә; муйынға иҙелгән һуған менән араҡы компресы ҡуйырға; сей кәбеҫтә япрағын бәйләргә - уны өс сәғәт һайын яңыртып тороу отошло; сөгөлдөр һуты менән тамаҡты сайҡау ҙа шифалы, һутҡа аҙыраҡ һеркә ҡушаһың; танау-йотҡолоҡ мускулдарына күнегеү эшләйһең: 10-30 секунд телде шартлатырға, ауыҙҙы ҙур асып, "а"ны һуҙырға, тел осон аңҡау буйлап йөрөтөргә, телде сығарып, мөмкин тиклем аҫҡа һуҙырға. Күнегеүҙе 6 мәртәбә эшләргә.

Һыу

Кәйефһеҙлектән һыу ҡотҡара. Умыртҡа бағанаһына, ашҡаҙан тураһына, аяҡ-ҡулдарҙың бөгөлгән урындарына һалҡын һыуҙы ҡойорға, таҫтамал менән ныҡлап һөртөнөргә, йылыныу өсөн бер нисә күнегеү эшләргә. Ошо рәүешле даими ҡойоноу кәйефте күтәрә, тынысландыра. Йәй баҡсала ҡойонһаң, тағы ла шифалыраҡ.

Бөйөрҙө таҙартыу

❖ Термосҡа бер ҡалаҡ етен орлоғо һалып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк тағы 1 стакан ҡайнар һыу өҫтәргә һәм шуны көнөнә 3 мәртәбә эсергә. Дауаны 1 аҙна эшләргә;

❖ Етен орлоғон, ҡабаҡ орлоғон (тышы менән), һары мәтрүшкә үләнен бер тигеҙ өлөштәрҙә болғатырға, 4 ҡалаҡ ошо ҡатнашмаға 1 ҡалаҡ аҡ сәскә ҡушып, 0,5 л ҡайнаған һыуҙа 30-40 минут төнәтергә, һөҙөргә. Төнәтмәне 4 өлөшкә бүлергә, ашарҙан 1 сәғәт алда көн буйы эсеп бөтөргә;

❖ 3 ҡалаҡ ҡара ҡарағат япрағын 0,5 л ҡайнар һыуҙа 15-20 минут төнәтергә. Япраҡтарҙы алып ташларға. Төнәтмәне ҡайнау хәленә килтерергә һәм уға 2 ҡалаҡ ҡарағат һалырға (туңған йәки кипкән) һәм төнәтергә. Көн буйы эсеп бөтөргә.

Миләш

❖ Киптерелгән миләш эс китеүҙе баҫа;

❖ Миләш ҡайнатмаһы ҡанһыраууҙы туҡтата;

❖ Миләш бауырҙа таш булғанда, ревматизмдан дауа, һейҙек ҡыуҙырыусы яҡшы сара булып тора.

Бауыр ауыртһа

❖ Бер тигеҙ өлөштә ҡыҙыл көртмәле (брусника), ала миләүшә (фиалка), бөтнөк (мята) алырға (мәҫәлән, 2 ҡалаҡ) һәм 1 стакан ҡайнар һыуға һалырға, ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Ауыртыныу бөткәнсе дауаланырға, әҙерләгән төнәтмәне көнө буйы эсеп бөтөрөргә;

❖ Һары мәтрүшкә үләнен, мәтрүшкәне, аҡ сәскәне, бөтнөктө бер тигеҙ өлөштә болғатырға, 2 ҡалаҡ ҡатнашмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм көн буйы эсеп бөтөргә. Ауыртыу бөткәнгә тиклем дауаланырға.

Музейҙа даими экспозициянан тыш, ваҡытлы күргәҙмәләр ҙә ойошторола. Әлеге ваҡытта рәссамдар Надежда Калимуллинаның - "Еңеүҙән һуң донъя", Людмила Тараканованың - "Сәскәле май", Әлиә Кутлованың "Данлыҡлы дивизия командирҙары һәм комиссарҙары" күргәҙмәләре, Илдар һәм Регина Арыҫлановтарҙың "Фронт фотоларының тарихынан" фотокүргәҙмәһе менән танышырға мөмкин. Республика, Рәсәй һәм ҡала кимәлендә үткәрелгән сараларҙа музей үҙенең күргәҙмәһен даими ойоштора. Был йәһәттән, миҫал итеп, "Китап-байрам", "Әйҙә, уйнайыҡ", "Музей төнө", "Бөйөк Еңеү" сараларын һанап китергә мөмкин.

Музейға килеүселәр экспонаттар һәм мәғлүмәттәр менән үҙҙәре таныша, йә экскурсоводтың музей буйынса экскурсияһын тыңлай ала. AR-технология ҡулланыла. QR-код аша индивидуаль рәүештә экспонаттар менән ентекле танышыу мөмкинлеге тыуҙырылған.

Экскурсиянан тыш, музей хеҙмәткәрҙәре махсус тема буйынса лекция, мастер-класс һәм башҡа сараларҙа уҙғара. Уларҙы үткәреү буйынса интерактив методик ҡулланмалар эшләнгән. Музей экспонаттары һәм мәғлүмәттәре нигеҙендә "Кавалерия. Лото", "Гвардиясылар, алға!" уйындары булдырылған.

Музейға өлкәндәр ҙә, балалар ҙа күпләп килә. Йәш буйынса сикләү юҡ. Йыш ҡына алыҫ тарафтарҙан да ҡунаҡтар ҡабул итәбеҙ. Яңыраҡ бер инәй үҙенең Мәскәүҙән килгән ейәнен музей менән таныштырҙы. Ә унан алдараҡ шул уҡ Мәскәүҙән ошо дивизияла хеҙмәт иткән олатайҙың туғандары килеп, музей экспонаттары менән танышты һәм үҙҙәренең мәғлүмәттәре менән уртаҡлашты.

Һәр кем, музейҙа булып, халҡыбыҙ ғорурлығы - 112-се Башҡорт (16-сы гвардия) кавалерия дивизияһының тарихы менән танышыу һәм Бөйөк Ватан һуғышы тураһында дөрөҫ мәғлүмәттәр алыу мөмкинлегенә эйә.

Ғилман ҠАШҠАРОВ,
тарихсы,
112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы музейының ғилми хеҙмәткәре, БР мәғариф алдынғыһы.

наградаға лайыҡ. Генерал-майор Миңлеғәле Шайморатовҡа 2020 йылдың 30 мартында, батырҙарса һәләк булғандан һуң күп йылдар үткәс, Рәсәй Федерация Президенты В.В. Путиндың Указы нигеҙендә Рәсәй Геройы исеме бирелә.

Тәүге хәрби бәрелештә үк дивизия яугирҙары, ҡурҡыу тойғоһон еңеп, ҡаһарманлыҡ күрһәтә. Алыш Олым йылғаһы янында була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, юғалтыуһыҙ үтмәй ул. Башын һалыусылар араһында 294-се кавалерия полкының командиры Ғ.Д. Нафиҡов та була. Үлемесле алышта юғалтҡан иптәштәре менән яугирҙар борондан килгән йоланы башҡарып бәхилләшә. Иҫтәлектәр буйынса, алты яугирҙың ҡәберенә аттың ауыҙлығын һалалар һәм уның янында дошман позицияһында ҡулға төшөрөлгән йылҡы малын салалар.

Миңлеғәле Шайморатов дивизияла башҡорт яугирҙарына борондан хас батырҙар рухын уята ала. Ошо юғары рухта, ҙур юғалтыуҙар булһа ла һәм хәрби состав ныҡ үҙгәрһә лә, дивизияның данлы хәрби юлы Берлинға тиклем дауам итә.

ЗИНҺЕН КИҢӘЙТЕП...

КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

Балыҡсы турғай, тәтәй ҡош

(Зимородок)

Балыҡсы турғай һымаҡтар төркөмөнә ҡарай, ҙур башлы ваҡ ҡына ҡоштар, ҡанаттары һәм ҡойроғо ҡыҫҡа, суҡышы оҙон. Ваҡ балыҡ менән туҡлана, һыуҙың өҫтөнән генә осоп йөрөй.

Балыҡсы турғай сыйырсыҡтан ҙурыраҡ, беҙҙең төбәктәге башҡа ҡоштарҙан арҡаһының һәм башының йәшкелткүкһел ялтырауыҡ төҫтә булыуы менән айырылып тора. Түше ерән, муйыны һәм муйын тирәһендәге таптары аҡ, тәпәйҙәре ҡыҙыл, суҡышы ҡара. Инә ҡош менән ата ҡош төҫө йәһәтенән айырылмай, шулай ҙа ата ҡош сағыуыраҡ. Ныҡ тауышланмай, осоп барғанында "пиип", "псиив" тип ҡысҡырғанын ишетергә мөмкин.

Европаның урманлы һәм далалы зонаһының көньяғынан алып Курил утрауҙарына тиклем территорияла йәшәй. Башҡортостанда Ағиҙел, Дим һәм Өршәк йылғалары буйҙарында теркәлгән, оялары Дим һәм Ыҡ йылғалары буйҙарында табылған.

Таҙа һыулы йылғаларҙы ярата. Һыу ташҡан мәлдә осоп ҡайта. Һыу ярҙарына ҡайта башлағас та элекке ояларын эҙләп таба. Айырым парҙар булып йәшәй. Йылға ярын соҡоп, 0,3 см - 1 м тәрәнлегендә оя яһай. Ояһының төбөнә үлән түшәй. 4-8, ҡайһы саҡта 6-7 йоморткa һала. 19-21 көн баҫа. Икәүләп баҫалар. Бәпкәләр яланғас һәм һуҡыр тыуа, шуға ла ояла 23-27 көн ултыралар. Уларҙы ата ҡош ҡарап үҫтерә, ә инә ҡош башҡа ояға йоморткa һалып, уны баҫырға ултыра. Сағыу төҫлө булһа ла, ул ояһында шундай йәшерен ултыра, күреп тә булмай. Бары тик осоп йөрөгәнендә генә иғтибар итергә мөмкин.

Бар ризығы - һыуҙа. Ваҡ балыҡ, умыртҡаһыҙҙар, тәлмәрйендәрҙе ашай. Ҡорбанын һыуҙың өҫтөндә һағалап ултыра. Мәле еткәс, уның артынан һыуға ла сума.

Август аҙағында - сентябрь башында йылы яҡҡа оса. Европаның көньяғында, Төньяҡ Африкала, Көньяҡ Азияла ҡышлай. Беҙгә билдәле иң ҡарт ата ҡошҡа 15 йәштән артыҡ ине.

М. Баянов, Ә. Мәмәтов,
"Көньяҡ Урал ҡоштары"
китабынан.
(Дауамы бар).

1 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.10 "Модный приговор". [0+]
10.00 "Жить здорово!" [16+]
10.50, 11.30, 0.40, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.00 Х/ф "Любимая женщина механика Гаврилова". К 100-летию со дня рождения Петра Тодоровского". [12+]
13.25, 14.15, 16.25, 17.15, 22.40 Информационный канал. [16+]
14.45 "Давай поженимся!" [16+]
15.35 "Мужское / Женское". [16+]
19.30 Премьера. "Лето Победы". [12+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Спросите медсестру". Новые серии". [16+]
23.40 Премьера. "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Не плачь по мне, Аргентина". [16+]
11.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00, 21.00 Специальный репортаж. [12+]
12.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей.
15.15 Асыш. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Д/ф "Преодоление. Ильяс Валеев". [12+]
16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
17.45 Профессионалы. [12+]
18.00 Защитники Отечества. [12+]
19.00 Телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 О чем молчат Памятники. [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Күстәнәс. [12+]
23.30, 1.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
0.00 Х/ф "Дополнительный урок". [16+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]

2 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.10 "Модный приговор". [0+]
10.00 "Жить здорово!" [16+]
10.50, 11.30, 14.15, 16.35, 17.15, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
14.55 "Давай поженимся!" [16+]
15.45 "Мужское / Женское". [16+]
19.35 Премьера. "Лето Победы". [12+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Спросите медсестру". Новые серии". [16+]
23.50 Д/с "Обыкновенный фашизм-2". [18+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Не плачь по мне, Аргентина". [16+]
11.00 Специальный репортаж. [12+]
11.15 Квадратные метры. [12+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Тайм-аут. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей.
15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Автограф. [12+]
17.00, 22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
19.00 Телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Д/ф "Победа на Дальнем Востоке". [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Х/ф "Номер один". [16+]
1.45 Спектакль "Райса + Файзи". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]

3 СЕНТЯБРЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.30, 14.15, 16.25, 17.15, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
14.45 "Давай поженимся!" [16+]
15.35 "Мужское / Женское". [16+]
19.25 Премьера. "Лето Победы". [12+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Спросите медсестру". Новые серии". [16+]
23.40 Д/с "Обыкновенный фашизм-2". [18+]
0.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Не плачь по мне, Аргентина". [16+]
11.00, 3.30 "Дорога к храму". [6+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [16+]
12.15 Криминальный спектр. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей.
15.15 "Экологично". [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
15.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
17.45 Доступный Башкортостан. [12+]
18.00 Креативный код. [12+]
19.00 Телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Защитники Отечества. [12+]
21.00 Специальный репортаж. [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 "Байык-2025". [12+]
0.00 Х/ф "Выше неба". [16+]
1.45 Спектакль "Сердце не стареет". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]

4 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.30, 14.15, 16.25, 17.15, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
14.45 "Давай поженимся!" [16+]
15.35 "Мужское / Женское". [16+]
19.25 Премьера. "Лето Победы". [12+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Спросите медсестру". Новые серии". [16+]
23.40 Д/с "Обыкновенный фашизм-2". [18+]
0.50, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Не плачь по мне, Аргентина". [16+]
11.00, 21.00 Специальный репортаж. [12+]
11.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 16.45, 20.45 Интервью. [12+]
12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]
12.15 Профессионалы. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей.
15.15 Сулпылар. [6+]
15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Патриот РФ. [12+]
16.15 Дознание. [16+]
17.00 Башкортостан#вместе. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 "Йома". [6+]
19.00 Телецентр.
19.45 "Мама". [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Формула здоровья. [12+]
22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Х/ф "За кулисами". [16+]
1.45 Спектакль "Красная звезда". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

5 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.20 Д/ф "Азнавур глазами Шарля". [16+]
0.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Большой юбилейный концерт Игоря Крутого. [12+]
1.50 Х/ф "Катино счастье". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Д/ф "Ибраевской школе - 100 лет: воспоминания и достижения". [12+]
10.45 "Күрай даны". [12+]
11.00 "Йома". [6+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]
12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]
12.15 Криминальный спектр. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей.
15.15 Тирмәкәй. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Хазина. [6+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45, 20.15 Квадратные метры. [12+]
18.00 Башкорттар. [12+]
19.00 Честно говоря. [12+]
19.45 История одного села. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 "Башкорт йыры-2025". [12+]
22.00 Своих не бросаем. [12+]
22.15 Письма солдатам. [12+]
23.15 "Ете егет". [12+]
0.00 Х/ф "Успех". [16+]
1.45 Спектакль "Галиябану". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

6 СЕНТЯБРЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Под каждой маской - тайна жизни". К 90-летию со дня рождения Валентина Гафта". [12+]
11.05 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.05 Т/с "По ту сторону волков". К 90-летию со дня рождения Валентина Гафта". [16+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Шедевры музыки и кино". Концерт к 95-летию со дня рождения Андрея Петрова. [0+]
20.20 "Михаил Задорнов: вся жизнь". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Летний кубок. [16+]
23.55 "50 лет в эфире. Спецпроект. "Что? Где? Когда?" [12+]
1.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Последнее желание". [16+]
0.30 Х/ф "Воспитательница". [12+]
4.16 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз). [12+]
7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
8.45 Хазина. [6+]
9.15 "Күрай даны". [12+]
9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
9.45 Своих не бросаем. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Книга сказок. [6+]
10.45 Әкиәтсе. [6+]
11.00 Гора новостей.
11.15 "Курсак". [6+]
11.30 Зерно. [6+]
12.00 "Елкән". [6+]
12.30 "Ете егет". [12+]
13.30 Башкорттар. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Д/ф "Преодоление. Ильяс Валеев". [12+]
17.45 Тайм-аут. [12+]
18.15 Новости (на баш. яз).
18.50 Хоккей. "Торпедо" (Нижний Новгород) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30 Новости недели (на баш. яз).
23.15 "Башкорт йыры-2025". [12+]
0.00 Караоке по-башкирски. [12+]
0.30 Х/ф "Ускользающая жизнь". [16+]
2.15 Спектакль "Таланты и поклонники". [12+]
4.45 Новости недели (на баш. яз). [12+]
5.30 "Простые истории: жить, работать, любить". [12+]

7 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Т/с "Поединок". К 155-летию со дня рождения Александра Куприна". [16+]
16.10 Премьера. Концерт, посвященный окончанию Второй мировой войны. "Сахалин - земля героев". [12+]
18.00 Вечерние новости.
18.45 Х/ф Премьера. "Аманат". Ко Дню языков народов России". [12+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с "Триггер". [16+]
0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1

5.30, 1.30 Х/ф "Я буду рядом". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.12 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз). [12+]
7.45 Золотой фонд башкирского ТВ.
8.30 Күстәнәс. [12+]
9.00 Доступный Башкортостан. [12+]
9.15 "Мама". [12+]
9.30 Новости (на рус. яз).
9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Тирмәкәй. [6+]
10.45 Городок АЮЯ. [6+]
11.00 Гора новостей.
11.15 "Беседка". [6+]
11.30 "Сулпылар". [6+]
12.00 "Атайсал. Беҙҙекеләр! Знай наших!" [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз).
13.15 "Занимательная биология". [12+]
13.45, 20.00 Квадратные метры. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
14.30 Дорога к храму. [6+]
15.15 Честно говоря. [12+]
16.00 Х/ф "Притворщики". [16+]
17.45 Д/ф "Преодоление. Ильяс Валеев". [12+]
18.30 Формула здоровья. [12+]
18.45 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]
19.00 Люди труда: профессия - газовик. [12+]
19.15 Әлләсе... [12+]
20.15 Патриот РФ. [12+]
20.30 Автограф. [12+]
21.00 Дознание. [16+]
21.30 Новости недели (на рус.яз.).
22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 Концерт Айгуль Сагинбаевой. [12+]
1.00 Х/ф "Герасим". [16+]
2.30 Спектакль "Мы с тобой одной крови". [12+]
4.15 Моя планета - Башкортостан.[12+]
4.45 Башкирские каникулы. [12+]
6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]

НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1447 һижри йыл.

Сентябрь (Рәбиғел әүүәл)	Иртәнге намаҙ	Ҡояш ҡалҡа	Өйлә намаҙы	Икенде намаҙы	Ағшам намаҙы	Йәстү намаҙы
1 (9) дүшәмбе	4:18	6:23	13:30	17:56	20:08	22:13
2 (10) шишәмбе	4:20	6:25	13:30	17:55	20:06	22:10
3 (11) шаршамбы	4:23	6:27	13:30	17:53	20:03	22:06
4 (12) кесе йома	4:26	6:29	13:30	17:51	20:01	22:02
5 (13) йома	4:29	6:30	13:30	17:49	19:58	21:59
6 (14) шәмбе	4:32	6:32	13:30	17:47	19:56	21:55
7 (15) йәкшәмбе	4:35	6:34	13:30	17:45	19:53	21:52

БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.

✓ *Етлекмәй тыуған балаларҙы ла һарыҡ йөнөнә һалғандар. Тере һарыҡтан ҡырҡып алынған, йыуылмаған, буялмаған, химик матдәләр менән эшкәртелмәгән йөн хайуан балауыҙы - ланолин менән ҡапланған була.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

КЕЙЕҘЛӘП БАҪҠАН ТУҠЫМА НИСЕК АТАЛА?



33-сө һандағы сканворд яуаптары.

Горизонталь буйынса: Йофар. Ярғанат. Царицыно. Эшелон. Нөктә. Ринг. Осраша. Клуб. Ведомости. Ҡама. Торт. Емеш. Алматы. Икмәк. Әкрен. Ҡына. Елена. Ниәт. Рада.

Вертикаль буйынса: Норвегия. Циклодром. Әремлек. Янки. Ялман. Цирк. Орғасы. Шәшке. Кит. Литр. Оягөл. Реле. Реал. Нард. Этноботаника. Ҡомаҡ. Лама. Навага. Ыҙа.

ҠЫЗЫҠ ТАҺА!

БЫУЫН ҺЫҘЛАУЫНАН...

йөн еп

Йөн ептең капилляр ҡан әйләнешенә ниндәйҙер йоғонтоһо бар, сөнки шешеү процесы капилляр ҡан әйләнеше яйланғандан башлана. Йөн еп шулай уҡ ҙур булмаған статистик электр тогы сығанағы булып тора. Шуға ла ҡулдың беләҙегенә бәйләнгән йөн еп ҡан әйләнешен яҡшырта, ҡулдағы яраларҙы тиҙерәк бөтәштерә, тарамыш тартылғанда ярҙам итә.

Йөн - иң сәләмәт, гигиеник яҡтан иң таҙа, йылыны көйләүсе материал иҫәпләнә. Уның төҙөлөшө тирегә тын алыуға ҡамасауламай. Бынан тыш, уның шифалы сифаттары ла бар. Борон теш, баш, бил һыҙлағанда уларға йөн баҫҡандар. Етлекмәй тыуған балаларҙы ла һарыҡ йөнөнә һалғандар. Тере һарыҡтан ҡырҡып алынған, йыуылмаған, буялмаған, химик матдәләр менән эшкәртелмәгән йөн хайуан балауыҙы - ланолин менән ҡапланған була. Ланолин йөн ауырлығының 12 процентын тәшкил итә. Был бик ҡиммәтле матдә, косметик майҙарҙың нигеҙе итеп ҡулланыр өсөн уны махсус табалар. Ланолин тән температураһында ирей һәм тирегә үтеп инә. Ул мускулдарға, быуындарға, умыртҡа бағанаһына тәьҫир итә, ауырытыуҙы баҫа, ҡан әйләнешен көсәйтеп ебәрә. Шуға ла йыуылмаған тәбиғи йөндән яһалған түшәктәр юғары хаҡ менән баһалана.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

1 сентябрь "Әкиәт илендә мажаралар" (В. Коростылёв, Ф. Гарипов), әкиәт. 6+

4 сентябрь "Бөйрәкәй" (Т. Гарипова, А. Абушахманов, инсц. А. Ишбулдина), драма. 16+

М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

1 сентябрь "Мин башҡорт телен өйрәнәм" (Л. Искужина, Р. Хакимов), әкиәт. 6+

4 сентябрь "Бер ғүмер етмәй икән..." (М. Ҡунафин, Р. Хакимов), ватансылыҡ тураһында драматик поэма. 16+

Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

29 август "Золушка" (Ш. Перро). 19:00. 0+

30 һәм 31 август "Золушка" (Ш. Перро). 12:00 һәм 15:00. 0+

Салауат дәүләт башҡорт драма театры

30 август "Светофория - волшебная страна", (Б. Хәйбуллин), мауыҡтырғыс юл ҡағиҙәләре. 6+

БР Милли музейы

27 август М.М. Шаймуратовтың тыуыуына 126 йыл айҡанлы экскурсия. 15:00. 12+

31 август "Балауыҙҙан шәм" оҫталыҡ дәресе. 15:00. 6+

1 һәм 2 сентябрь "Асыҡ ишектәр көнө". 11:00 - 18:00. 6+

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

АҒЫУЛЫ ЕЛӘК

Башҡортостанда 2 йәшлек бала ынйы сәскә емеше ашап ағыуланған. Бәхетһеҙлек осрағы Салауат ҡалаһында булған. Әсәһенең ваҡытында табиптарға мөрәжәғәт итеүе һәм уларҙың тиҙ арала ярҙам күрһәтеүе һөҙөмтәһендә баланың ғүмере ҡотҡарып алып ҡалынған.

Йыш ҡына ҡыҙыл еләктәр зарарһыҙ күренһә лә, уларҙа йөрәккә һәм нервылар системаһына йоғонто яһаған кардиогликозидтар бар: йөрәк ритмы боҙолорға, көҙәк йыйырырға, иҫте юғалтырға мөмкин. Бындай осраҡтарҙа секундтар һәм ваҡытында профессиональ ярҙам күрһәтеү хәл иткес әһәмиәткә эйә, тип һөйләнеләр медицина учреждениеһында.

Урамда, баҡсала, тәбиғәт ҡосағында йөрөгәндә иғтибарлы булығыҙ, балаларға таныш булмаған емеш-еләкте тәмләп ҡарарға ярамағанын аңлатығыҙ, уйын участкаларынан ағыулы үҫемлектәрҙе алып ташлағыҙ һәм ағыуланыуға шик тыуһа, шунда уҡ табипҡа мөрәжәғәт итегеҙ йәки ашығыс ярҙам саҡыртығыҙ, тип кәңәш бирә табиптар.

АТАҺЫ ҒӘФҮ ҮТЕНГӘН

Өфөлә йәнә фажиғә... 12 йәшлек үҫмер Дим биҫтәһендә питбайк менән еңел машинаға бәрелгән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ауыр йәрәхәттәрҙән бала ашығыс ярҙам килеп еткәнсе йән биргән.

Авария Башҡорт атлылары дивизияһы урамында булған, тип хәбәр итә Башҡортостандан дәүләт автоинспекцияһы. Автомобилгә 29 йәшлек ҡатын идара иткән. Үҫмер водителгә юл бирмәгән һәм машинаның алғы өлөшөнә килеп бәрелгән. Фажиғә урынына килеп еткән атай кеше улының тынһыҙ көүҙәһе янында һығылып илай, ғәфү үтенә. Был видеояҙманы күҙ йәштәрһеҙ ҡарау мөмкин түгел. Хоҙай һаҡлаһын!

✓ *Фестивалдең төп үҙенсәлеге шунда: ҡатнашыусыларҙың барыһы ла Урал тауҙарында ғына үҫкән ҡурайҙа уйнаны. Беренсе көндө улар ҡурай үләнен ҡырҡып алып ҡайтыу өсөн Ғүмәр тарлауығына походҡа юлланды.*

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

ӘЙҘӘГЕҘ...

Баймаҡҡа, "Башҡорт аты" байрамына

6 сентябрҙә Баймаҡ районының Граф күле янында дүртенсе тапҡыр "Башҡорт аты" халыҡ-ара фестивале үткәрелә. Халыҡ-ара фестивалдә Белоруссиянан, Ҡаҙағстандан, Ҡырғыҙстандан, Азербайжандан һәм Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренән абруйлы ҡунаҡтар ҡатнаша.

"Байрамдың популярлығы йылдан-йыл арта бара, быйыл фестиваль 15 меңдән ашыу кешене ҡабул итергә йыйына, былтыр иһә 11 мең ҡунаҡ килгәйне, - тип һөйләй ойоштороусылар. - "Башҡорт аты" фестивален йыл һайын уҙғарыу ат туризмын үҫтереү, урындағы етештереүселәргә ярҙам күрһәтеү һәм милли традицияларҙы популярлаштырыу өсөн яңы мөмкинлектәр аса".

Фестивалдең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, сараның программаһы дүрт блоктан тора.

Беренсе блок - йылҡы ите һәм ҡымыҙ етештереүселәрҙең күргәҙмә-йәрминкәһе. Йәрминкәлә "Хәләл" стандарты буйынса сертификатҡа эйә республика етештереүселәре ҡатнаша, был продукцияның юғары сифатлы булыуын һәм уның мосолман традицияларына тап килеүен гарантиялай. Фестивалдә "Оҫталар ҡалаһы" халыҡ кәсептәре һәм һөнәрҙәре күргәҙмәһе ойошторола, унда Башҡортостан һәм күрше төбәктәр оҫталары үҙенсәлекле ҡул эштәре менән таныштыра.

Икенсе блок - эшлекле программа. "Башҡорт аты" фестивале барышында республикала ат спортын, туризмды һәм йылҡысылыҡты үҫтереүҙең төп мәсьәләләренә арналған семинарҙар, пленар ултырыштар була:

- Ат спорты һәм туризм: Башҡортостандың ҡеүәтен асабыҙ.
- Ат спорты төрҙәре - традицияларҙан хәҙерге заманға тиклем.
- Продуктив йылҡысылыҡ үҫешенең хәҙерге тенденциялары.
- Башҡортостандың ат индустрияһын үҫтереү: төбәккә инвестициялар, традициялар һәм яңы мөмкинлектәр.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашлығындағы "Башҡортостанда йылҡысылыҡты үҫтереү: төбәккә инвестициялар, традициялар һәм яңы мөмкинлектәр" пленар ултырышында республикала йылҡысылыҡ тармағы үҫешенең төп факторҙары ҡарала. Ултырышта алдынғы йылҡысылыҡ продукцияһын етештереүселәр ҡатнаша.

Өсөнсө ижади блокта "Башҡорт аты" фестивале ҡунаҡтарын театрлаштырылған сағыу тамаша һәм концерт программаһы көтә.

Дүртенсеһе иһә спорт блогы:

- Милли көрәш, мас-рестлинг һәм самбо буйынса республика турнирҙары.
- Арҡан тартышыу буйынса төбәк-ара турнир.
- "Бәйге" халыҡ-ара фестивале.
- "Ирәндек мәргәне" асыҡ республика турниры.
- Эльбрус Ниғмәтуллин командаһы ойоштороған "Урал батыр" халыҡ-ара бәйләүәндәр турниры.
- ГТО нормаларын тапшырыу майҙансығы.
- "Тай-тулаҡ", "Ауҙарыш", "Ылаҡ" ярыштары.
- Алты төр ат сабышы. Төп бүләк - автомобиль.

Фестивалдең иң мауыҡтырғыс өлөшө - аттар парады.

"Башҡорт аты" фестивале - башҡорт тоҡомло аттарҙы популярлаштырыу, йылҡысылыҡтың үҙенсәлекле традицияларын һаҡлау һәм Башҡортостандың бай мәҙәни мираҫын күрһәтеү өсөн ойоштороларған байрам.

Ләйлә АРАЛБАЕВА.

ҠУРАЙСЫ...

атлы булды

Билдәле ҡурайсы Роберт Юлдашевтың Ишембай районы биләмәһендәге Торатау янында үткән өс көнлөк "Ел моңо" фестивале йәш, шулай уҡ тәжрибәле музыканттарҙы, этно-музыка һөйөүселәрҙе бер сәхнәгә йыйҙы.

Фестиваль сиктәрендә "Ҡурай бәйгеһе" ҡурайсылар конкурсы ойошторолдо. Унда республиканың төрлө төбәктәренән 30-ҙан ашыу музыкант ҡатнашты. Еңеүсеһенә башҡорт тоҡомло ат инселәнгәйне. Ул бүләккә Ғафури районынан Рәмил Ҡотдосов лайыҡ булды.

Фестивалдең төп үҙенсәлеге шунда: ҡатнашыусыларҙың барыһы ла Урал тауҙарында ғына үҫкән ҡурайҙа уйнаны. Беренсе көндө улар ҡурай үләнен ҡырҡып алып ҡайтыу өсөн Ғүмәр тарлауығына походҡа юлланды. Икенсе көндө таң менән "Ел моңо" фестивалендә ҡатнашыусылар ҡояш ҡалҡҡанын ҡарау һәм донъя гимнын башҡарыу өсөн Торатауға артылды.

- Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән (Алтайҙан башлап Силәбе өлкәһенә тиклем) башҡарыусыларҙың килеүе фестивалгә сағыу биҙәктәр өҫтәне, - тип һөйләне фестивалдең матбуғат секретары Зилә Баймырҙина. - Бындай саралар мәҙәни мираҫты һаҡлауға тос өлөш индерә, халыҡ традицияларын менән таныштыра һәм музыкаль стилдәрҙең төрлөлөгөнә ихтирамды нығыта. Быйыл февралдә Өфөлә үткән беренсе "Ел моңо" фестивале Рәсәйҙең төрлө традицияларында ҡурай моңон берләштергән проекттарҙың ни тиклем мөһим булыуын күрһәтте.

Өс көнлөк сараның программаһы бик бай һәм мауыҡтырғыс итеп төҙөлгәйне. "Ел моңо" этно-фестивале ҡунаҡтары традицион ҡурайҙа уйнаусыларҙың оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнашты, башҡорт бейеүҙәрен, оҙон көйҙәрен башҡарырға, милли биҙәүестәр яһарға өйрәнде, көрәштә үҙ көсөн һынап ҡараны. Фестивалдә иң яҡшы башҡорт бейеүе импровизацияһына конкурстар һәм "Урал батыр" эпосын һөйләүселәр араһында ижади ярыштар ойошторолдо. "Ел моңо" фестиваленең иң яҡшы бейеүсеһе тип Салауаттан 11 йәшлек Максим Сергеев танылды (ул ҡурайсылар конкурсында ла ҡатнашты). Ишембай районынан Ғәлиә Шәрипова "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр араһында еңеү яуланы.

Моң байрамының өсөнсө көнөндә тамашасылар асыҡ һауала ойоштороларған сағыу шоуҙың шаһиты булды. Гала-концертты фестивалдә ҡатнашыусыларҙың иң яҡшы номерҙары, Алтайҙың "Бай Терек" төркөмө, Силәбенең "Тюрген Кам" коллективы, "Guzal-dance", "Солнышко" бейеү ансамблдәре, "Ҡурайсы" этнотөркөмө һәм уның етәксеһе Роберт Юлдашевтың сығыштары биҙәне.

АҠЫЛ-ҠАҘНА

Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәкиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

ЙӘН ҠӘРЕНДӘШТЕ...

мал ҡәрендәш айырған

Алты йәшәр юлдан ҡайтһа, алтмыш йәшәр күрешергә килер.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

Бөтә нәмәлә лә ағыу бар: дәүмәле уны йә ағыуға, йә дарыуға әйләндерә.

(Парацельс).

Асыулы саҡта ниндәйҙер ҡарар ҡабул итеүҙән тыйылып тор.

(Сенека).

Ысын мөхәббәт алтындан һәм балсыҡтан шуныһы менән айырыла: бүленгәндә лә ул бәләкәсәймәй.

(Перси Шелли).

Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Оҙон, бормалы һәм һикәлтәле юл буйлап эт эйәрткән бер сәйәхәтсе килә. Ул бик арыған, эте лә хәлдән тайған. Ҡапыл уның алдында матур ҡапҡалы йәм-йәшел баҡса хасил була. Баҡса эсендә музыка яңғырай, сәскәләр күҙҙең яуын ала, шишмә сылтыраған тауыш ишетелә. Ҡапҡа төбөндә торған ҡарауылсынан сәйәхәтсе:

- Был ниндәй урын?- тип һорай.

- Был ожмах, - ти ҡарауылсы. - Һин бит мәрхүмдәр донъяһында.

Ин, әйҙә, ожмахта ял ит.

- Ә унда һыу бармы?

- Бар, әлбиттә. Фонтандар, бассейндар ҙа бар.

- Ә ашарға бирәләрме һуң?

- Нимә теләйһең, шуны ашай алаһың.

- Минең этем дә бар.

- Йәл, ләкин бында эт менән бергә үткәрмәйҙәр. Уны ҡапҡа төбөндә ҡалдырып китергә тура килә инде.

Сәйәхәтсе был һүҙҙәрҙе ишеткәс, ҡапҡа аша үтмәй, ары китә. Бер аҙ барғас, юл уны ниндәйҙер икенсе бер тораҡ янына алып килә. Уның ҡапҡаһы төбөндә лә ҡарауылсы ултыра.

- Һыу эсергә ине... - ти сәйәхәтсе.

- Ин, әйҙә, ихатала ҡоҙоҡ бар.

- Ә минең этемә инергә рөхсәтме?

- Рәхим итһең, ҡоҙоҡ эргәһендә эт өсөн һыу улағы ҡуйылған.

- Ә ашарға буламы?

- Була, әлбиттә. Мин үҙем һине киске аш менән һыйлай алам.

- Ә этемә ашарға табылырмы?

- Һөйәкте генә табабыҙ инде уны...

- Ә был ниндәй урын булды һуң?

- Был - ожмах.

- Нисек инде улай? - тип аптырай сәйәхәтсе һәм әле генә инмәй үтеп киткән баҡса яғына төртөп күрһәтә. - Уны ла ожмах тигәйнеләр...

- Алдайҙар. Унда - тамуҡ, - ти ҡарауылсы.

- Ә был ялғанға һеҙ нисек түҙәһегеҙ?

- Ә был беҙҙең өсөн бик файҙалы, - ти ҡарауылсы. - Ожмахҡа дуҫтарын ташлап китмәгәндәр генә килеп етә бит..."

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Ғәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99
График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты - 28.08.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 28.08.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
Баҫылып сыҡты - 29.08.2025 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2707
Заказ - 1623